З. М. Ғәбитова, М. Ғ. Усманова

# 9 БАШҠОРТ ТЕЛЕ





М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры



Өфө «Нур» татар дәүләт театры



Республика рус драма театры



Башҡортостандың халыҡ шағиры М. Кәримгә һәйкәл



«Ете ҡыҙ» фонтаны

З. М. Ғәбитова, М. Ғ. Усманова

# 9 БАШҠОРТ ТЕЛЕ

**Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларында башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

КИТАП
Өфө • 2017

УДК 373.167.1:811.512.141
ББК 81.2 Баш-922
F68

## Шартлы тамғалар

- ?? — тикшереү эше
- П — проект эше
- Т — төркөмдә эш
- — үтелгәндәрҙе ҡабатлау
- — коммуникатив күнекмәләрҙе үҫтереү өсөн эш төрҙәре
- !! — ауырлыҡ тыуҙырыусы эш төрҙәре
- ? — һораўҙар
- — һүҙлек эше
- — актив үҙләштереү өсөн һүҙҙәр

**Ғәбитова, З. М., Усманова, М. Ғ.**

F68 Башҡорт теле : уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 9-сы класы өсөн башҡорт телен (дәүләт теле буларак) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы / З. М. Ғәбитова, М. Ғ. Усманова. — Өфө : Китап, 2017. — һүрәттәре менән 132 бит.

ISBN 978-5-295-06753-2

**УДК 373.167.1:811.512.141**
**ББК 81.2 Баш-922**

**ТП—089/17**

**ISBN 978-5-295-06753-2**

© Ғәбитова З. М., Усманова М. Ғ., 2017
© Кәримова З. И., һүрәттәр, 2017
© Голубев Г. Е., дизайн, 2017
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

## Һаумы, мәктәп!

**1.** Һүрәтте иғтибар менән ҡарағыҙ, уның буйынса һөйләгеҙ.

1. Унда нимәләр күрәһегеҙ?
2. Уҡытыусы уҡыусылар менән нимә тураһында һөйләшә?
3. Һүрәтте нисек атар инегеҙ?
4. Һеҙ нимәләр өҫтәп төшөрөр инегеҙ?
5. *Тыныслыҡ* һүҙенең мәғәнәһен аңлатығыҙ. Ул һүҙ менән һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ.



**2.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Уның буйынса фекер алышығыҙ.

### Тоғро дуҫым, йор юлдашым

Берәү һорай: «Әйтсе, зинһар,
Яҡын дуҫың кем һинең?»
Мин уға: «Иң тоғро дуҫым,
Саф намыҫлы
йор юлдашым,
Һөйөклө китап», — тинем.

Китап белем донъяһының
Тылсымлы бер инеше,
Ошо тылсымлы инештән
Бөтә ғүмере буйына
Ҡөҙрәт ала һәр кеше!

Китап — рухи хазинабыҙ,
Йәнгә ул дауа һымаҡ.
Ҡәҙерен белгән кешегә
Китап бит бик-бик кәрәк
Икмәк,
        һыу,
            һауа һымаҡ!

*(А. Игебаев)*

**тоғро** — верный
**намыҫлы** — честный
**инеш** — родник, источник
**ҡөҙрәт** — *зд.:* сила

?

1. Шиғыр нимә тураһында?
2. Шағир китапты нимәгә тиңләй?
3. Уның һүҙҙәре менән килешәһегеҙме? Өҫтәп нимәләр әйтер инегеҙ?
4. *Китап — рухи хазинабыҙ,*
   *Йәнгә ул дауа һымаҡ* тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?
5. Шиғыр буйынса фекерегеҙҙе әйтегеҙ.

**3.** Абзацтарҙы үҙ урындарына урынлаштырып, тексты тасуири уҡығыҙ. Нөктәләр урынына тейешле һүҙҙәрҙе ҡуйып, күсереп яҙығыҙ.

## Китапты яратығыҙ

Фекеремдең дөрөҫлөгөнә мин тәрән ... . Шуға күрә кешеләргә: «Китапты яратығыҙ. Ул һеҙҙең тормошоғоҙҙо еңеләйтер, тәрән фекерҙәр тыуҙырыр, нескә тойғолар тәрбиәләр, тормошоғоҙҙо аңларға ярҙам итер. Китап үҙегеҙҙе һәм башҡа кешеләрҙе хөрмәт итергә ... . Китап аҡылды һәм йөрәкте донъяға, кешегә ҡарата мөхәббәт тойғоһо менән ҡанатландыра», — тип белдерәм.

Китапты яратығыҙ — ул белем сығанағы. Тик белем генә кешене тормош ауырлыҡтарынан ... . Тик белем генә кешегә хөрмәт һәм ихтирам ... .

Китаптар миңә тормошта үҙ урынымды ... ярҙам итте, мине тормош һаҙлығынан тартып ... . Китаптар минең алдымда донъя сиктәрен киңәйткәндән-киңәйтә барҙы, кешенең яҡшылығын аңларға ... . Миндә һәр бер хеҙмәт кешеһенә мөхәббәт туплана барҙы.

*(М. Горькийҙан)*

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *ышанам, өйрәтте, ҡотҡарасаҡ, табырға өйрәтер, сығарҙы, тәрбиәләйәсәк.*

**һаҙлыҡ** — болото
**сик** — граница
**яуыз** — *зд.:* плохой
**нәфрәт** — ненависть
**тойғо** — чувство

1. Нөктәләр урынына ҡуйылған һүҙҙәр буйынса һығымта эшләгеҙ.
2. Авторҙың фекере менән килешәһегеҙме? Уның фекере һеҙҙеке менән тап киләме? Нимәләр өҫтәп әйтер инегеҙ?
3. Һеҙ китап уҡырға яратаһығыҙмы, әллә компьютер, планшеттағы электрон күсермәләрҙе өҫтөн күрәһегеҙме? Төркөмдәргә бүленеп, ике яҡлы бәхәс ойоштороғоҙ.

**4.** 2-се, 3-сө күнегеүҙәрҙәге текстарҙан килештәргә тап килгән исемдәрҙе табып яҙығыҙ.

Төп килеш ..., ...
Эйәлек килеш ..., ...
Төбәү килеш ..., ...
Төшөм килеш ..., ...
Урын-ваҡыт килеш ..., ...
Сығанаҡ килеш ..., ...

**5.** Тексты уҡығыҙ.

Ап-асыҡ ҡырау төшкән иртәлә Оло инәйем мине мәктәпкә алып китте. Мин уның ҡатарынан атламайым, үлән өҫтөнә һибелгән бәҫте ярып, үҙемә юл һалып барам.

Мәктәп соҡорҙоң арғы яғында — Мәсет урамының түбән осонда. Мин уны ситтән генә күргәнем бар. Эсенә ингәнем юҡ әле. Инергә атлығып та тормайым. Ни ҡалған миңә ул мәктәптә? «Уҡыған берәү мулла булмаҫ, суҡыған берәү ҡарға булмаҫ», — тине анау көндө Вәлетдин, малайҙар һабаҡ уҡыу тураһында әңгәмә ҡуҙғатҡас. Дөрөҫөн әйтә ул. Бөтә уҡыған әҙәм мулла булып бөтһә, атҡа бесән кем һалыр һуң? Уныһы тағы бер хәл, бесәне булһа, һалыусыһы табылыр.

— Минең мулла булғым да килмәй әле, — тинем мин үҙем дә һиҙмәҫтән.

— Ниңә улай тиһең, улым?

— Уҡый-уҡый мулла булып китермен дә унан үкенермен...

— Яҙған булһа, мулла итмәм мин һине. Мөғәллим булырһың йә землемер. Бер ҙә юҡ икән, иншалла, өй тулы дөм һуҡыр араһында күҙле бер кеше булырһың. — Оло инәйем шунда уҡ төшөндөрөп бирә. — Наҙан кеше был заманда һуҡыр менән бәрәбәр. Без

бөтәбеҙ ҙә наҙанбыҙ, улым. Шуға күрә беҙҙе, ҡара халыҡты, ҡара һарыҡ тип йөрөтәләр. *(М. Кәримдән)*

**катарынан (эргәһенән)** — рядом
**һабаҡ (дәрес)** — урок
**әҙәм (кеше)** — человек
**мөғәллим (уҡытыусы)** — учитель
**наҙан** — неграмотный

1. Өҙөккә исем бирегеҙ, төп фекерен билдәләгеҙ.
2. Текста хәл-ваҡиғалар кем исеменән һөйләнелә? Автор тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫкә төшөрөгөҙ.
3. Һабаҡ — дәрес, әҙәм — кеше, мөғәллим — уҡытыусы — былар ниндәй һүҙҙәр? Аҫтына һыҙылған һөйләмдең, һүҙбәйләнештең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
4. Тексты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ.
5. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ.

**6.** Башҡортостан Республикаһының халыҡ яҙыусыларын һәм шағирҙарын айырып, алфавит тәртибендә яҙығыҙ. Һәр бер яҙыусының берәй әҫәрен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.

Мостай Кәрим, Зәйнәб Биишева, Ғайса Хөсәйенов, Мәжит Ғафури, Рәми Ғарипов, Рауил Бикбаев, Әнғәм Атнабаев, Марат Кәримов, Александр Филиппов, Ҡәҙим Аралбаев, Факиһа Туғыҙбаева, Гөлфиә Юнысова, Абдулхаҡ Игебаев, Ноғман Мусин, Талха Ғиниәтуллин, Суфиян Поварисов, Нәжиб Асанбаев, Назар Нәжми, Рәшит Ниғмәти, Тимер Йосопов, Әхиәр Хәкимов, Сәйфи Ҡудаш, Азат Абдуллин, Рәшит Ниғмәти

**7.** Уҡығыҙ. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе бергәләп тәржемә итегеҙ. Тексты уҡып сыҡҡандан һуң һеҙ нимәләр тураһында уйландығыҙ?

## Нет ничего дороже времени

Однажды учитель предложил нам написать, что думает каждый из нас о времени, как измеряет его и как проводит.

Помню, нас очень поразило тогда это предложение учителя. Оказывается, никто из нас серьёзно не задумывался над этим вопросом.

И вот мы решили тогда заняться хронометражем. Оказалось, что ни у кого из нас нет настоящего режима дня. Мы поняли, как много драгоценного времени тратим мы без толку. И тогда мы объявили борьбу за время! Надо признаться, что сначала было очень трудно приучать себя к порядку. Но постепенно мы стали привыкать. Мы открыли громадные запасы времени.

*(По А. Ферсману)*

**хронометраж** — измерение затрат времени на что-либо

**8.** Диалогтарҙы дауам итегеҙ.

1. — Хәмит, ағастарға иғтибар ит әле!
— Һиңә, Азат?
— ...

2. — Нәфисә, быйылғы уҡыу йылында башҡорт теле дәрестәрендә нимәләр өйрәнербеҙ икән?
— Әлиә, минеңсә, ...
— ...

3. — Рәзилә, бөгөн китапханаға барабыҙмы?
— Эйе, миңә Мостай Кәримдең шиғырҙар йыйынтығын алырға кәрәк ине.
— Ә ниндәй шиғырын уҡырға теләйһең?
— ...

**9.** Уҡығыҙ. «Нимә ул бәхет?» тигән темаға әңгәмә ойоштороғоҙ. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәргә антонимдар табып яҙығыҙ.

## Бәхет нимә?

Һөйөүҙәрең тиң булһа — шул бәхет;
Тигеҙ ғүмер кисерһәң — шул бәхет;
Йәшәүеңдән ҡәнәғәт булһаң — шул бәхет;
Маҡсаттарыңа ирешһәң — шул бәхет;
Донъянан кинәнеп туймаһаң — шул бәхет.
Донъяла һәр кем үҙенсә бәхетле йә үҙенсә бәхетһеҙ.
Бәхеттең ҙуры, кесеһе юҡтыр ул.
Ҡәнәғәт иткәнгә кескәй уңыш та <u>ҙур</u> бәхет.
Бәхетте тойоу һәм ҡәҙерләй белеү — үҙе бәхет.
Донъялар <u>тыныс</u>, тормош имен-аман булһын,
Үҙең иҫән-һау бул — шулар бәхет нигеҙе.

*(Ғ. Хөсәйеновтан)*

**10.** Башҡорт һәм рус һүҙҙәренең әйтелешен сағыштырығыҙ. Беренсе бағаналағы һүҙҙәр менән һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ.

| | |
|---|---|
| болот | совхоз |
| бал | бал |
| он | он |
| был | был |
| эт | этаж |
| балалар | барабан |

**11.** Түбәндәге схеманы иғтибар менән ҡарағыҙ. Унда нимәләр йәшеренгән? Һөйләгеҙ.

# һ И ҡ

**12.** Үрҙәге терәк схема буйынса түбәндәге исемдәрҙе анализлағыҙ. Ошо һүҙҙәрҙе индереп, бәләкәй хикәйә төҙөп ҡарағыҙ.

Өфө, кешеләр, ҡунаҡтарҙы, ҡалаға, музейҙа, экскурсияларҙа, һәйкәлгә, хужаларҙан, күҙ, көндәр

**13.** Тексты уҡығыҙ. Нөктәләр урынына *күбәләк* һүҙен тейешле формала ҡуйып, күсереп яҙығыҙ.

## Күбәләктәр оса

Беҙ, ғәҙәттә, бөжәктәрҙе, тын хәлгә күсеп, төрлө аулаҡ урындарҙа ҡышлай тип уйлайбыҙ. Әммә күп көнө ҡоштар ғына түгел, ҡайһы бер ... ҙә йылы яҡҡа юллана икән. Махаон, кәбеҫтә ... кеүек эре ... хатта Африкаға тиклем үк барып етә.

... көньяҡҡа осоу йүнәлеше ғәмәлдә ҡоштар юлына тап килә. Улар, тотҡан шул йүнәлештән бик ситкә тайпылмайынса, ер өҫтөнән 2—6 метр бейеклектә сәғәтенә 7—14 километр, ә ел ыңғайына хатта сәғәтенә 40 километр самаһы тиҙлек менән оса. Иң ғәжәбе — ... 3—4 көн рәттән туҡталмай оса.

Шуныһы ла бар: ... өлкәндәре үлә, тик йәш быуыны ғына сәйәхәткә китә. Яҙ көнө улар, ҡоштар кеүек көньяҡтан әйләнеп ҡайтып, йомортҡа һала. Күҙ көнө шул йомортҡанан сыҡҡан ... йылы яҡҡа юллана. Тимәк, ... үҙ ғүмерендә көньяҡҡа бер тапҡыр ғына барып ҡайта.

*(«Башҡортостан календары»нан)*

**юллана** — направляются
**тотҡан йүнәлештән ситкә тайпылмайынса** — *зд.:* не отклоняясь от заданного курса

1. Күбәләктәр тураһында нимәләр белдегеҙ?
2. Күбәләктәр йылы яҡҡа ҡайһы ваҡытта юллана тип уйлайһығыҙ?
3. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен иҫкә төшөрөгөҙ. Тексттағы миҫалдар менән иҫбат итегеҙ.
4. Һуңғы һөйләмгә синтаксик анализ яһағыҙ.

намыҫ
инеш
тоғро
сик
тойғо



*Мифтахетдин Аҡмулла — XIX быуаттың икенсе яртыһындағы башҡорт әҙәбиәтенең иң күренекле вәкиле.*

*Мифтахетдин Камалетдин улы Аҡмулла 1831 йылда Өфө губернаһының Бәләбәй өйәҙе Елдәр олоҫо (хәҙер Миәкә районы) Туҡһанбай ауылында мулла ғаиләһендә тыуған. Аҡмулла тыуған ауылында, күрше Мәнәүезтамаҡ, Әнәс, атаҡлы Стәрлебаш мәҙрәсәләрендә уҡыған. Һуңынан ҡаҙаҡ далаларына китеп ҡаҙаҡ балаларын уҡытҡан. 1895 йылдың көҙөндә Миәс ҡалаһынан йыраҡ түгел ерҙә фажиғәле үлтерелә.*

*Революцияға тиклем Аҡмулланың өс китабы баҫылып сыҡҡан. 1981 йылда Аҡмулланың 150 йыллығына Өфөлә, Ҡазанда, Алматыла башҡорт, татар, ҡаҙаҡ телдәрендә һайланма әҫәрҙәре донъя күрә. Уның шиғырҙары рус телендә лә айырым китап булып сыға.*

## Көҙ

Йәмерәйеп, күктә болоттар күсә,
Һыуыҡ елдәр ер өҫтөн ялап иҫә.
Йорт бөрөшөр, ҡарт ҡылысын һөйрәткән,
Шығырлаған ҡыш һулышы «ау!» тиһә.

Яҙғы йәшел ерҙең төҫө уңғанын,
Һыуыҡ һуғып, урмандарҙың туңғанын
Күреп күңелең, эсең бошор, һарғайып,
Япраҡтар төшөп ерҙә һулығанын.

Ер йөҙөндә йәшлек күрке ҡалмайҙыр,
Биткә ыжғыр, һыуыҡ елдәр ыулайҙар.
Дала тып-тын. Күк тә һорғолт күренеп,
Көндөң күҙе унан ҡарай алмайҙыр.

Ҡай саҡ дауыл көн-сыуаҡты ҡоротор,
Ерҙе, күкте һоп-һорғолт ҡыр һыуытыр.
Яҙғы күргән рәхәттәрен бар ғаләм
Ваҡытлыса, яҙ килгәнсе, онотор.

**ҡыш һулышы** — дыхание зимы
**туңыу** — замёрзнуть
**һыуыҡ һуғыу** — *зд.:* заморозки
**һулыу** — увянуть
**япраҡтар төшөү** — листопад
**һарғайыу** — желтеть

1. Автор көҙгө тәбиғәтте нисек тасуирлай?
2. Көҙ билдәләрен һүрәтләү өсөн автор ниндәй һүҙҙәр ҡуллана? Ни өсөн тип уйлайһығыҙ?
3. Шиғыр йөкмәткеһе буйынса нимәләр әйтер инегеҙ?

**Дөрөҫ әйтегеҙ!**

1) һабаҡ, табан, ябалар
2) юл башы, юл буйы, һыу буйы
3) шуға күрә, ҡыр ҡаҙы

**14.** Нөктәләр урынына тейешле хәрефтәр ҡуйып яҙығыҙ.

Бәхет юллап, хыялланып, әллә ҡайҙарға ашабыҙ, күпте көтәбеҙ. Ә бәх...ттең эргәлә генә, үҙеңдә үк икәнен абайлап та бирмәйбеҙ. Һау-сәләм...тлегеңдән ирәйеп, иркенләп эшләп йөрөүҙәрең, донъя, й...шәү йәмен күреп кинәнеүҙәрең, эшең, игелегең менән башҡаларҙы шатландырыуың — үҙе бәхет тә баһа. Ялтырап тормаған бәхет ҡәҙ...рлерәк һәм күпкә ғүм...рлерәктер ҙә ул.

*(Ғ. Хөсәйеновтан)*

1. Автор бәхетте нимәлә күрә?
2. Һеҙ бәхетте нисек аңлайһығыҙ?
3. Ҡылымдарҙың аҫтына һыҙығыҙ, заманын билдәләгеҙ.

**15.** Мәҡәлдәрҙең икенсе өлөшөн табығыҙ. Ике мәҡәлде яҙып алығыҙ, ятлағыҙ.

| | |
|---|---|
| Алтын-көмөш яуған ерҙән | хөрмәте юҡ. |
| Белеме барҙың | үҙ аҡылың менән эш ит. |
| Хеҙмәте юҡтың | тыуған-үҫкән ил артыҡ. |
| Кеше аҡылын ишет, | уйлап һөйлә. |
| Уйнап һөйләһәң дә, | ҡәҙере бар. |

**16.** Һөйләм сиктәрен билдәләп, тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып, күсереп яҙығыҙ. Бер-берегеҙҙең эшен тикшерегеҙ.

Ысын кеше булыу өсөн бик күп яҡшы сифаттарға эйә булыу кәрәк шуларҙың береһе — үҙ һүҙеңдә тора белеү һүҙҙә тороу кешеләр араһындағы мөнәсәбәтте яҡынайта бер-береңә ышанысты арттыра үҙ һүҙенә тоғро булғандар тураһында уның менән утҡа-һыуға инергә була тиҙәр

тыныслыҡ
зиһен
ғүмер
тормош
донъя
шарлауыҡ
уңыш
ҡәнәғәт

**17.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

Алтын тәңкәләрен һибә ҡайын,
Ел уларҙы сөйөп уйната,
Күктә, сите китек мөйөш яһап,
Торна өйөрө уҙа көньяҡҡа.
Ҡоштар үҙе менән, әйтерһең дә,
Алып китә бергә көн йәмен:
Шәрә ҡала ҡалын урмандар,
Ҡырҙар алмаштыра күлдәген.

Баҙлап яна ҡан ҡыҙыл төҫ менән
Бары миләш, балан ҡыуағы,
Үрмәкселәр үргән аҡ уҡаны
Ялтырата әбей сыуағы.

*(Б. Бикбай)*

**тәңкә** — монета
**сөйөү** — метать
**шәрә** — голый
**уҡа** — позумент, галун
**әбей сыуағы** — бабье лето

1. Шиғырҙа көҙҙөң ҡайһы мәле сағылдырыла?
2. Миҫалдар ярҙамында үҙ фекерегеҙҙе иҫбат итегеҙ.
3. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәрҙе ниндәй һүҙҙәр менән алыштырып була?
4. Һеҙҙең иғтибарығыҙҙы ниндәй һүҙ, һүҙбәйләнештәр үҙенә йәлеп итте? Ни өсөн? Аңлатығыҙ?

**Хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ!**

Предметтың билдәһен белдергән һүҙ **сифат** тип атала. Ул **ниндәй? ҡайһы? ҡайҙағы? ҡасанғы?** һорауҙарына яуап бирә. Мәҫәлән: **ҙур** өй, **ҡалалағы** әхирәтем, **иртәнге** сәй.

**18.** Тексты тәржемә итегеҙ. Дүрт һөйләм һайлап алып, башҡорт теленә тәржемә итеп яҙығыҙ. Сифаттарҙың аҫтына һыҙығыҙ.

## Осенний день

С самого рассвета идёт мелкий дождь. Это не летний, грозовой дождь, который шумит и низвергается, подобно водопаду. Он льёт беспрестанно, тихими, тонкими струйками. Ветер дует без устали, далеко разнося созревшие семена деревьев и трав. Первая распустилась берёза, и она первая пожелтела. А осина расцветилась красными, багровыми, золотистыми листьями. Но порывистый осенний ветер сбрасывает и это последнее убранство: крутя в воздухе лёгкие иссохшие листья, он расстилает их по мокрой земле. Цветы исчезли: как будто мёртвая рука осени сжала и измяла их. Измокшие заборы смотрят уныло из-под бесконечной сетки дождя. Галки стаями летят из побуревшего сада и, сталкивая одна другую, усаживаются на крышах. Всё позже восходит солнышко, всё раньше нисходит оно к краю земли.

*(По К. Д. Ушинскому)*

**19.** Тәҡдим ителгән тексты уҡығыҙ, уны артабан дауам итегеҙ.

Йәйҙең күңелле көндәре үтеп тә китте. Тәбиғәттә хәҙер көҙ билдәләре көндән-көн нығыраҡ күҙгә ташлана. Тәбиғәттең үҙгәре-

үен күҙәтеү өсөн, беҙ класташтарыбыҙ менән урманға киттек. Аяҡ аҫтында япраҡтар ҡыштырлай...

Беләһегеҙме?

Донъялағы иң бейек статуя — «Ватан-Әсә» һыны. Ҡатын-ҡыҙ һынындағы был мөһабәт статуя Волгоград эргәһендәге Мамай ҡурғанына 1967 йылда ҡуйыла. Авторы — Евгений Вучетич, һындың бейеклеге — 82,30 метр.

Ҡоштар араһында иң бейек осоусы ҡош — таҙ бөркөт. 7500 метр бейеклектә осоу уға бер ни тормай.

Донъяла иң юғары шарлауыҡ — Көньяҡ Америкалағы Анхель шарлауығы. Ул 1054 метр бейеклектән түбәнгә атыла.

*(«Башҡортостан календары»нан)*

**таҙ бөркөт (таҙғара)** — чёрный гриф
**шарлауыҡ** — водопад

**20.** Белешмә өсөн һүҙҙәрҙе ҡулланып, В. Э. Меостың «Октябрь. Ҡоштар китә» картинаһы буйынса инша яҙығыҙ.

План.

1. Йыл миҙгеле.
2. Ҡоштар китеүе.
3. Төҫтәрҙең биреленеүе.
4. Көҙ — муллыҡ, байлыҡ миҙгеле.

Белешмә өсөн һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр: *ел, һоро, һалҡын, кәртә, бесән, уңыш, йорт-ҡура, ағастар, иген, баҫыу, ураҡ өҫтө, муллыҡ, ер, трактор, иген урыу, бураҙна, «себеште көҙ һанайҙар», һарай, ер һөрөү, ҡоштар өйөрө, хушлашыу, быу, томан күтәрелеү, кисереш, йоғонто, көн, ҡара, көрән төҫтәр, һауа, күк йөҙө, һағыш, күңел, офоҡ, тойғо, теҙелешеп осоу, тау башы, ер өҫтө, ҡыштырлау, йәйелеп ятыу, ҡойола.*

**21.** Түбәндәге белешмәне уҡығыҙ. Аҡҡоштоң башҡа ҡоштарҙан айырмалы яҡтарын билдәләгеҙ.

## Аҡҡош

Ул ҡаҙҙан ҙурыраҡ. Йәш саҡта — һорғолт көрән, ҙурайғас — бөтә ҡауырһындары ла ап-аҡ. Йөҙгәндә муйынын тура тота. Күҙҙәре һәм аяҡтары ҡыҙыл, суҡышы ҡыҙғылт һары. Тауышы яңғырауыҡлы: «ҡаң» йәки «ҡаң-ға» тигән өн сығара. Ярҙары ҡамышлы ҙур күлдәрҙә, йылғаларҙа йәшәй. Үлән, төрлө орлоҡ, иген менән туҡлана. Күсмә ҡош. Бик һирәк осрай. Ояһы ҡуйы ҡамышлыҡтарҙа була. 4—6 бөртөк аҡ йомортҡа һала.

*(Э. Ишбирҙин)*

Берәй ҡошто тасуирлағыҙ, ниндәй ҡош тураһында һөйләүегеҙҙе иптәштәрегеҙ билдәләһен.

**22.** Тәҡдим ителгән темаларға диалогтар төҙөгөҙ.

1. Яҙыусылар менән осрашыу.
2. Республикала күркәм саралар үтте.
3. Минең хыялым.

**23.** Йәйәләр эсендәге һүҙҙәрҙе тәржемә итеп, тексты уҡығыҙ. Уға исем бирегеҙ. Текст буйынса һорауҙар әҙерләп, әңгәмә ойоштороғоҙ.

...Ер шарында шундай (места) бар — улар өҫтөнән йыл һайын бер үк мәлдәрҙә күп һанлы (птицы) осоп китә. Ҡош юлдарының үҙенсәлектәре (история) төпкөлөндә ята. Шуныһы ҡыҙыҡлы: (осень) көндәрендә осҡан ҡоштар (весна) осҡандарына ҡарағанда күберәк. Сәбәптәре шуның менән аңлатыла: көҙгө күсенеү мәлендә ҡоштар үрсегән һәм һан яғынан артҡан була. Өҫтәүенә, көҙгө осоу яҙғыһы менән сағыштырғанда (спокойнее) килеп сыға, сөнки улар, алыҫ (дорога) алдынан аҙыҡ күберәк урынды һайлап, туптарға ойошоп, аяҙ көндәрҙе (дожидаются). Яҙ ҡоштар оялаясаҡ урындарына ашығып (возвращаются).

Европала ҡоштарҙың тупланыу нөктәләре (много). Швециялағы Фальстербу, Төркиәләге Босфор боғаҙы — тап шундай урындар. (Ветер) көсәйгән осраҡта ҡоштар Гибралтар аша ла оҙон юлға сығып китә.

Ҡоштарҙың күпләп тупланыуы, ғәҙәттә, (на берегу) күҙәтелә. Был йәһәттән бигерәк тә Швеция айырылып тора. Бында уңайлы йыйылыу урыны ла, аҙыҡ запасы ла (достаточно).

*(«Башҡортостан» газетаһынан)*

**Хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ!**

Һөйләмдең баш киҫәктәре — **эйә** менән **хәбәр. Эйә** һәр ваҡыт төп килештә килеп, **кем? нимә? кемдәр? нимәләр?** һорауҙарына яуап бирә.

Эйә тураһында нимәлер белдергән, хәбәр иткән һөйләм киҫәге **хәбәр** була. Хәбәр эйәгә буйһоноп, уның менән ярашып килә һәм **ни эшләй? ни эшләйҙәр?** һорауҙарына яуап бирә.

**24.** Тексты уҡығыҙ. Ни өсөн ул «Аҫылташтар иле» тип атала? Бында ниндәй таш тураһында яҙылған?

## Аҫылташтар иле

Башҡортостан тауҙарында быяла кеүек үтә күренмәле ҡырлы-ҡырлы таштар осрай. Уларҙы тау гәлсәре тип йөрөтәләр.

Өйкөм-өйкөм булып йәбешкән төрлө ҙурлыктағы был **кристалдар** ҡояш яҡтыһында йәйғор булып йымылдай.

Тау гәлсәре кремний менән туйынған эҫе иретмәләрҙән барлыҡҡа килә. Иретмә ер тәрәнлегенән ҙур көс менән өҫкә күтәрелә. Был юлда гәлсәрҙең тамыр һымаҡ тәрәнгә киткән **яҡкылыҡтары** хасил була. Өҫкө ҡатламда иретмә һыуынып ҡата һәм гәлсәр булып ярала.

Башҡортостан **тауҙарының** көньяҡ ҡырластарында таҙа гәлсәр ер өҫтөндә лә табыла. Уны биҙәүестәр эшләгәндә, һауыт-һаба яһағанда ҡулланалар.

*(Э. Ишбирҙин)*

**ҡырлы** — гранёный, имеющий грани
**өйкөм** — скопление
**гәлсәр** — хрусталь
**йымылдай** — блестит
**иретмә** — сплав
**ятҡылыҡ** — залежь, месторождение
**ҡырлас** — склон (горы)

1. Сифаттарҙы үҙҙәре билдәләп килгән һүҙҙәр менән айырып яҙығыҙ.
2. Ҡалын хәрефле һүҙҙәрҙе берлек һанда яҙығыҙ һәм уларҙың яҙылышын аңлатығыҙ.
3. Ҡаҙылмаларға ҡағылышлы һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ, үҙегеҙ белгән ҡаҙылма атамаларын өҫтәгеҙ.

**25.** Күҙ миҙгеле һәм уҡыусылар тормошо менән бәйләп, тексты дауам итегеҙ. Һөйләмдең баш киҫәктәре аҫтына һыҙығыҙ.

Ҡыҙарып ҡояш сығып килә. Күк томан күтәрелә. Офоҡ ялтырай башланы...

**офоҡ** — горизонт

**26.** Нөктәләр урынына тейешле һүҙҙәрҙе тәржемә итеп яҙығыҙ, мәҡәлдәрҙе тултырып уҡығыҙ.

1. Кәңәшле ... тарҡалмаҫ.
2. ...-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ил артыҡ.
3. Ауыр эшкә беләк бар, ҡыйыу эшкә ... бар.
4. Егет кешегә етмеш төрлө ... ҙә аҙ.
5. Айырылғанды ... ашар.
6. Егет ... бер булыр.
7. Ҡош ҡанат менән, кеше ... менән көслө.

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *медведь, золото, профессия, дружба, сердце, страна, слово.*

**27.** «Тыуған яғымда күҙ» тигән темаға проект эше ҡороғоҙ.

# Башҡортостан тәбиғәте

**1.** Тексты тасуири итеп бер нисә тапҡыр уҡып сығығыҙ һәм уй-фекерҙәрегеҙ менән уртаҡлашығыҙ.

Тыуған төйәкте, туған тәбиғәтте «йәшел бишек» тибеҙ. Шағирҙар хатта Ер шарын йәшел бишек тип ебәрә. Әммә әҙәм балаһы үҙен тирбәтеп, туйындырып үҫтергән шул йәшел бишегенә ҡарата ҙурая бара ҡатыраҡ ҡылана башлай. Һорауһыҙ әрәм-шәрәм итә, туҙҙыра, ҡорота бәғзеһе.

Туған тәбиғәт туған әсә төҫлө. Ҙурайҙым, хәҙер кеше булдым тип, нисек әсәне ҡәҙерһеҙләргә мөмкин? Тимәк, туған тәбиғәт-әсәгә мөнәсәбәт тә — әҙәп-әхлаҡ мөнәсәбәте.

Үҙ-үҙеңә хужа булып алғас, кемдәргәлер әсәһеҙ йәшәргә лә мөмкиндер, әммә тәбиғәттән башҡа йәшәп булмай бит — һин ғүмер буйы уның ҡуйынында, унан туҡланыуыңда. Балаларың, балаларыңдың балаһы өсөн дә ул — бер әсә. Бала бер саҡ әсә һөтөнән айырыла, ә кеше бер саҡта ла Ер-әсәнән айырыла алмай.

*(Ғ. Хөсәйенов)*

**?**

1. Тәҡдим ителгән һүҙҙәргә һәм һүҙбәйләнештәргә тәржемә итегеҙ: *Ер шары, бишек, тәбиғәт, тирбәтеү, ҡыланыу, туҙҙырыу, ҡоротоу, әҙәп-әхлаҡ, мөнәсәбәт, ғүмер буйы.*
2. Текста күтәрелгән төп проблеманы билдәләгеҙ.
3. Автор тәбиғәтте нимә менән сағыштыра?
4. Яҙылғандарға өҫтәп нимәләр әйтер инегеҙ?

**2.** Тексты күсереп яҙығыҙ. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәрҙең ниндәй килештә килеүен билдәләгеҙ, һуңғы һөйләм буйынса әңгәмә ойоштороғоҙ.

Беҙҙең тәбиғәт ғәжәп бай һәм йомарт. Болонда төрлө-төрлө сәскәләр үҫә. Баҫыуҙа игендәр тулҡынлана. Ер аҫтында хазиналар ята. Йылғала һәм күлдәрҙә балыҡтар йөҙә.

Ләкин һаҡһыҙ файҙаланһаң, байлыҡтың да бөтөүе бар. Шуға күрә уны һаҡлай ҙа белергә кәрәк. «Тәбиғәтте һаҡлау — тыуған илде һаҡлау ул», — тигән яҙыусы М. Пришвин. Әйләнә-тирәне: һауаны, һыуҙы, тупраҡты, йәнлектәрҙе һәм үҫемлектәрҙе һаҡлау — һәр кешенең изге бурысы.

*(«Мәктәп календары»нан)*

**3.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

## Уралыма

Таш һыныңды, Урал, оҡшатамын  
Ҡандан ҡынға кергән ҡылысҡа.  
Ҡулдарына һине алмаҡ булып,  
Ҡүпме дошман ерҙә тырышҡан.

Ил баçырға килгән һәр килмешәк
Был ҡылыстан ауған туралып.
Күпме генә һиңә ҡараһам да,
Күҙем тала белмәй, Уралым.

Шишмәләрең минең йөрәк аша
Сылтыр-сылтыр ағып үтәләр.
Йөрәгемә, гүйә, ҡаным түгел,
Шул шишмәләр йәшәү илтәләр...

Һиңә баҡһам, күңелем күтәренке,
Киләсәгем шат та, тыныс та;
Сөнки беләм:
Иңдәрендә илдең
Урал тигән һынмаç ҡылыс бар.

*(Р. Бикбаев)*

**һын** — статуя
**ҡылыс** — меч
**килмешәк** — пришелец
**бағыу** — *зд.:* смотреть
**иң** — плечо

1. Автор кемгә өндәшә?
2. Ул Уралды нисек тасуирлай?
3. Һәр строфаға айырым анализ эшләгеҙ.
4. Шиғыр йөкмәткеһе буйынса бер-берегеҙгә һорауҙар әҙерләгеҙ.

**4.** Текстарҙы тасуири уҡығыҙ. Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һөйләмдәрҙе нисек аңлайһығыҙ? Бер-берегеҙ менән фекер алышығыҙ. Унда күтәрелгән проблема буйынса инша яҙығыҙ.

## I. Урманым минең

Һай, урманым, урманым, күпте күргән урмандарым минең! Һинән башҡа — ерҙе, һинән айырып — һыуҙы, үҙем һулаған һауаны күҙ алдына килтереп буламы? **Һин юк икән — ерҙең йәме-күрке юк; һин туплаған дым бөттөмө — йылғалар корой; һин шифалы һутыңды сәсмәнеңме — тыны ҡурылыуҙан ерҙә әҙәм заты ҡалмаç ине.**

Эйе, һин әҙәм балаларын утлы, һыулы, ризыҡлы, йортло-ерле иткәнһең. Ер йөҙөндә тереклек башланғандан бирле, кешеләр һинән ни саҡлы изгелек күрҙе икән? Иçәпләп бөткөһөҙҙөр. Улар бөгөн ошо хаҡта ныҡлап уйлап ҡарайҙармы? Үткәндәрҙе иçәпкә алып ҡына ҡалмайынса, алдағы ғүмереңтураһында ла хәстәрлек күрәләрме?

*(Н. Мусин)*

**һулаған һауа** — *зд.:* воздух, которым мы дышим
**күрке** — *зд.:* красота
**шифалы** — полезный
**тыны ҡурылыу** — зд.: задохнуться
**тереклек** — жизнь, существование
**хәстәрлек** — забота

## II. Тормош йәме

Тәбиғәттең үҙ вайымы менән ағышын ситтән генә күҙәтеп торһаң, ер йөҙөн иң әрһеҙ, бер үк төрлө ағастар ғына ҡаплап алмаҫ тимә. Әгәр шулай була ҡалһа, бер төрлө генә ағас үҫкән урмандың ни йәме? Уның хәҙерге төҫө лә, хуш еҫе лә, хозурлығы ла булмаясаҡ бит. **Матурлыҡ — төҫтәр, еҫтәр төрлөлөгөндә ул. Уларҙы беҙ, кешеләр, илебеҙҙең ысын хужалары, һәр ҡайһыһын үҙ урынына ҡуйырға, үҙенсә балҡыта белергә тейешбеҙ.** Имәнгә — имән, ҡарағайға — ҡарағай, уҫаҡҡа — уҫаҡ, ҡайынға ҡайын алмашҡа килһен. Юғиһә мәғрур имәнһеҙ, зифа ҡайынһыҙ, мәңге йәшел ҡарағайһыҙ, ут ҡыҙыл миләшһеҙ урмандың ни йәме?! Бал тамыҙған йүкә сәскәһеҙ, балыҡ ҡаптырыр муйыл сәскәһеҙ урмандың ни еҫе?! Туғайҙағы әрәмәләр урынында өйәңкеләр генә һерәйешеп ултырһа, һандуғастар уны төйәк итерме?

*(Н. Мусин)*

**үҙ вайымы менән** — *зд.:* своим чередом
**хозурлыҡ** — *зд.:* красота
**мәғрур** — величавый
**әрәмә** — урема́
**өйәңке** — ветла

5. Ағас һәм сәскә исемдәре яҙып, дәфтәрегеҙҙә кроссвордты тултырығыҙ.




6. Фәһемле фекерҙәрҙе күсереп яҙығыҙ. Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ. Береһен ятлағыҙ.

1. Һәр бер кеше бөтә кешеләр өсөн нимәлер булһа ла эшләргә тейеш. Шуға күрә һәр кем хәҙергенән мәңгелеккә күпер һала — бер-береңде аңлау күпере.

*(М. Кәрим)*

2. Урман — биҙәк. Тик бер-ике йылда кейеп туҙҙырып, яңыһын алыштыра торған күлдәк түгел ул, изге ер биҙәге. Ә ер — мәңгелек. Шуға күрә, уның биҙәген уңдырмау өсөн, айырыуса һаҡ ҡыланырға кәрәк. *(Н. Мусин)*

| |
|---|
| шифалы<br>тереклек<br>мәңгелек<br>мәғрур |

3. Кешене бар иткән, йәшәткән нәмә — тәбиғәт. Ул — атлап йөрөр ереҥ, һулар һауаң, эсер һыуың. Туған тәбиғәт кешегә барын да биргән: ерен-һыуын, аҙыҡ-түлеген, кейем-һалымын... Шуға туған әсәләй ғәзиз һәм үҙ ул туған тәбиғәт.

*(Ғ. Хөсәйенов)*

**7.** Нөктәләр урынына тейешле хәрефтәр ҡуйып, тексты күсереп яҙығыҙ. Текстағы һорауға яуап бирегеҙ.

Табан балы...тар кеше ҡатнашлығынан башҡа ла бер һыуҙан икенсеһенә күсә алалар. Торфлы һа...лыҡ урында тәрәнерәк канау килеп сыҡты, ти. Бер-ике й...л үтеүгә, көтмәгәндә табан балыҡтар күренә. Ҡайҙан һәм нисек?

Табан балыҡ ыуылдырығын сәскән быуаға яҙғы ки...тәрҙә өйрәктәр килә. Улар ү...емлек тамырҙарын кимерә, һыу үҫемлектәренең орлоҡтарын ашай, табан балыҡ ыуылдырығы менән һыйлана. Өйрәктәр, таң атыу менән, көндө үткәрергә һаҙлыҡҡа китә. Ы...ылдырыҡ, уларҙың тәпәй, ҡанаттарына йәбешеп, һаҙлыҡтағы канауға килеп етә. Табан балыҡ талымһыҙ булғанлыҡтан, ул иң насар һ...уҙа ла йәшәүгә еңел яйлаша.

*(В. Сабанеев)*

**табан балыҡ** — карась
**көтмәгәндә** — неожиданно
**ыуылдырыҡ** — икра
**быуа** — пруд
**талымһыҙ** — неприхотливый, нетребовательный



*Тамара Ғәниева 1951 йылда Көйөргәҙе районы Кинйәбай ауылында тыуған. Павловка һигеҙ йыллыҡ мәктәбен, Салауат педагогия училищеһын тамамлай, аҙаҡ Өфө, Салауат ҡалаларында балалар уҡыта.*

*Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлағандан һуң, Стәрлетамаҡ мәҙәни-ағартыу училищеһында педагог булып эшләй. 1980 йылда Өфөгә күсә. «Ленинсы» газетаһы, Башҡортостан радиоһы, «Башҡортостан ҡыҙы» журналы редакцияларында хәбәрсе, бүлек мөхәррире вазифаларын башҡара.*

*Тамара Ғәниева оҙаҡ йылдар Башҡортостан Яҙыусылар союзының шиғриәт секцияһы рәйесе булды.*

*Шағирәнең «Осрашырбыҙ әле» (1980), «Кейек ҡаҙҙар» (1984), «Көмөш ысыҡ» (1988), «Уйлы сағым» (1991), «Ҡондоҙ ҡойроғо» (1993), «Ҡыпсаҡтар» (1994), «Арҡайым» (1997), «Аҡыҡ көмбәҙҙәр» (2004), «Ғүмер кисеүҙәре» (2015) тигән китаптары донъя күрҙе.*

## Оло Ялан

Онотолмаҫ, ахыры,
Оло Ялан,
Бесән өҫтө томра июлдә.
Наҡаҫ туғайында һурпа бешә,
Ағайҙарҙың сәме үҫә төшә,
Бесән бакуйҙарын өйгән саҡта
Алма битле еңгә, килендәр.

Аһ, нисәләр саҡрым,
Алыҫтамы Оло Ялан,
Бесән еҫтәре?
Ҡалышмайыҡ, тиеп, апайҙарҙан,
Һыр бирмәйсә тиҫтер малайҙарға,
Көнө буйы салғы уйнатып та
Деү килтереп бейеү кистәрен.

Онотолмаҫ, ахыры,
Киске усаҡ,
Баш әйләнер сәскә еҫтәре.
Өҙҙөрөп тә бераү гармун тарта,
Зәңгәр төндә күңелең ирер саҡта.
Йондоҙ көтөүҙәре һыулай микән? —
Йондоҙ ғына йылға өҫтәре.

Онотолма, йәме,
Оло Ялан,
Мин бит бөгөн Оло Майҙанда.
Йәндәремә өр ҙә көрәш сәмен,
Иҫтәремә төшөр еләк тәмен,
Күк үләндәр булып шыбырла,
Аяҡтарым ҡапыл тайғанда.
Оло Ялан...
Бесән сабыу түгел —
Оло Майҙан...

**?**

1. Автор ҡайһы ваҡытты онотмай? Бесән сабыуҙы нисек һүрәтләй?
2. Оло Яланды нимә менән һәм нисек сағыштыра?
3. Һеҙҙең бесән сапҡанығыҙ бармы?
4. Шиғырҙың тәржемәһен уҡығыҙ, сағыштырығыҙ.

## Большое Поле

Большое Поле — сенокосный луг.
Июльский зной
С пьянящим сенным духом,
С мужским задором,
С копнами вокруг,
С румяными щеками молодух,
С девичьим смехом
Над цветущим лугом.

Ах, мой тугай,
Ты в памяти моей!
Мне не забыть твой шум многоголосый,
Твоих лихих и юных косарей,
Твои — весенних соловьёв нежней —
Звенящие в траве росистой
Косы.

Родной тугай, ты сердцем не забыт...
Под вечер мы шагаем на стоянку,
Горит костёр,
В котле шурпа кипит,
Отара звёзд к реке попить спешит,
А мы поём и пляшем под тальянку.

Большое Поле,
Славный мой тугай,
Сегодня на другом стою я поле.
То поле — Жизнь...
Но ты не исчезай,
Напоминай мне мой родимый край,
Буди во мне настойчивость и волю.

Не оставляй меня в моих трудах,
Встревожь мой сон,
Росой на щеки брызни,
Воскресни соком ягод на губах,
Прошелести травой в моих ушах...
Большое Поле —
Нынче — Поле Жизни.

*(Перевод Р. В. Паля)*

**8.** Һүҙҙәрҙе үҙ урындарына ҡуйып, һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ. Ниндәй күренекле ваҡиғаны иҫтә ҡалдырырға кәрәк? Һөйләгеҙ.

Ҡурай, булған, юлдашы, борон-борондан, халҡының, башҡорт. Оҙатып йөрөгән, ҡурай, йыйындарҙа ла, уны, байрамдарҙа ла, яуҙа ла. Париж ҡалаһына, менән, яугирҙары, башҡорт, уҡ-һаҙаҡ, еткәндәр, ҡурай. Бөйөк, бүләк, немец шағиры Гётеға, Рәсәйгә, итеп биргән, башҡорт командиры, ҡайтышлай, ҡурай, уҡ-һаҙаҡ. Бүләкте кемгә бирергә кәрәк икәнен белгәндәр бит әле улар.

*(«Аманат» журналынан)*

## Дөрөҫ әйтегеҙ!

аҡ икмәк, арлы-бирле, барыбер, Ватан, ҡабаланма, ҡыр ҡаҙы

**??** **9.** Һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ. Бер-берегеҙҙең эшен тикшерегеҙ һәм баһалағыҙ.

Кеше ғүмере — йәшнәп үткән йәшен, ялт итеп бер балҡый ҙа һүнә. Ошо ҡыҫҡа ғүмер юлын һәр кеше үҙенсә үтә. Берәүҙәр был ерҙә аҙ ғына йәшәп тә үҙҙәренең исемдәрен мәңгеләштереп өлгөрә. Ҡайһы берәүҙәр йөҙ йыл йәшәп тә телгә алып һөйләрлек бер эш ҡыйрата алмай.

Бөтә ғүмерҙәрен заяға үткәреүселәр ҙә юҡ түгел был ерҙә. Тик шунырһы хаҡ: әжәлдән ҡасып ҡалған кеше генә юҡ донъяла. Был йәһәттән кешеләр барыһы ла бер тигеҙ.

*(Ф. Әсәнов)*

**әжәл** — смерть
**зая** — напрасно, бесполезно

**?**

1. Беренсе һөйләмде нисек аңлайһығыҙ?
2. Исемдәрен мәңгеләштереп өлгөргән кешеләрҙән кемдәрҙе беләһегеҙ? Үҙегеҙ йәшәгән төбәктә ундай кешеләр бармы?
3. Исемеңде мәңгеләштерер өсөн нимәләр эшләргә, нисек йәшәргә кәрәк?
4. Рус әҙәбиәтендә ошоға оҡшаш фекерҙәр уҡығанығыҙ бармы?

**10.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Һеҙ киләсәктең матур кешеһен ниндәй итеп күҙ алдына баҫтыраһығыҙ? Шиғырҙы ятлағыҙ.

### Кеше

Кеше
Кешеләргә кәрәк булһын,
Бер ҡайҙа ла артыҡ булмаһын.
Эшләгәндә —
Янып эшләһен дә

Ял иткәндә —
Көлһөн,
Йырлаһын!
Һыҡранмаһын
Тормошонан кеше,
Үҙе биҙәп ҡорһон ул уны.
Ҡыуанһын ул,
Яҡты эҙен күреп
Аҡыллы һәм оҫта ҡулының.
Хыялланһын,
Янһын,
Ҡанатланһын,
Тынғы белмәй алға ынтылһын,
Һөйһөн,
Көйһөн,
Күркәм булһын кеше,
Халыҡ ғәме менән ул тулһын!
Үҙ ҡайғыһын
Кескәй ҡайғы итеп,
Иң ҙур байрам көтөп йәшәһен.
Шундай бай бәхетле итеп күрәм
Киләсәктең
Матур кешеһен!

*(Р. Ғарипов)*

**һыҡранмаһын** — пусть не жалуется
**ғәм** — заботы, хлопоты

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

Һөйләмдең баш киҫәктәрен асыҡлап килгән һөйләм киҫәктәре **эйәрсән киҫәктәр** тип атала. Эйәрсән киҫәктәр өс төргә бүленә: **аныҡлаусы, тултырыусы, хәл.**

**Обстоятельство (хәл)** — это второстепенный член предложения состава сказуемого; характеризует с разных сторон действие, признак, выраженные сказуемым, и отвечает на вопросы **ҡасан? ҡайҙа? нисек? күпме? ни сәбәпле? ни өсөн?** Алтын **бөртөкләп (нисек?)** йыйыла. — Золото собирается **крупицами.** Себеште **көҙ (ҡасан?)** һанайҙар. — Цыплят **по осени** считают.

По значению обстоятельства делятся на разряды: **образа действия (рәүеш хәле), времени (ваҡыт хәле), меры и степени (күләм-дәрәжә хәле), условия (шарт хәле), причины (сәбәп хәле), места (урын хәле), цели (маҡсат хәле).**

**11.** Мәҡәлдәрҙе күсереп яҙығыҙ. Өҫтәп бер мәҡәл яҙығыҙ. Хәлдәрҙең аҫтына һыҙығыҙ.

Бер эшлә, берәгәйле эшлә. Батыр егет яу күрке, сәсән егет дау күрке. Көслө кеше көсөнә таяныр. Егет кеше ике һөйләмәҫ. Тырышҡан табыр, ташҡа ҡаҙаҡ ҡағыр. Ергә эйелһәң, байлыҡ килә. Ергә тамған тир — гәүһәр. Ил ҡеүәте — икмәктә. Ил ҡәҙерен белмәгән — башын юғалтҡан, ер ҡәҙерен белмәгән — ашын юғалтҡан.

Т

**12.** Өҙөктө тасуири уҡығыҙ. Унда күтәрелгән төп проблеманы билдәләгеҙ. Тексҡа ҡарата ниндәй эпиграф һайлар инегеҙ? Йөкмәткеһенә тап килгән мәҡәлдәр яҙығыҙ.

## I. Тыуған илкәйем — ғәзиз еркәйем

Тыуған ер, тыуған Башҡортостан! Ни тиклем күңелемә яҡынһың, ни тиклем ҡәҙерлеһең һәм изгеһең һин! Бәпкә үләнле урмандарың да, ҡышҡы ыжғыр бурандарың да, диңгеҙ кеүек тулҡынланып ятҡан ҡырҙарың да — бөтәһе, бөтәһе лә күҙ алдымда, һәммәһе лә йөрәк түрендә. Тәүге тапҡыр ҡояшты, зәңгәр күк йөҙөн һиндә тойҙом мин. Икмәктең тәмен, ҡәҙерен белергә лә һин өйрәттең, тыуған ер.

Башҡортостан! Күҙ күреме етмәҫ ерҙәргә һуҙылған бәрәкәтле баҫыуҙар, хәтфә болонлоҡтар, күкһел тауҙар иле. Сырҡыраған өйөр-өйөр йылҡылары, майлап ҡуйған ҡайыштай йыландары, тарбаҡ мөгөҙ һомғол боландары, яҫы табан айыуҙары, шифалы үләндәре, ут йәшеллеге, йәйғор төҫлө сәскәләре күңелгә әйтеп бөтмәҫлек рәхәтлек бирә, тыуған ергә тәрән һөйөү, йәшәүгә дәрт, илһам уята. Тирә-йүндең йәнде арбағыс хозурлығы, ғаләмдең үҙе менән серләшеп, күңелдәрҙә бөтмәҫ-төкәнмәҫ һөйөнөс тыуҙыра, яҡты тойғоларҙан балҡыған күңелем талпынып күктәргә ашҡына.

*(Р. Әҙһәмованан)*

## II. Тыуған яҡ

Тыуған яҡ! Нисек һағындырғанһың һин, йөрәгемде ҡайһылай елкендереп ебәрҙең! Баҫыуҙарыңда диңгеҙҙәй арыш-бойҙайың да, ап-аҡ нәфис ҡайындарың да, үлән араһындағы буҙ турғайҙарың да, сәстәремдән иркәләгән йоп-йомшаҡ елдәрең дә миңә бик яҡын.

Тыуған яҡҡа ҡайтыу ҡалай күңелле! Илһеҙ ҙә, ерһеҙ ҙә ғүмер ҡороу аяныстыр ул. Кешенең ус аяһындай ғына булһа ла төйәге булырға тейештер. Ҡуш йоҙроҡ хәтлем генә булһа ла, йөрәктең дә бит тамырланыр, йәшәү өсөн һут алыр ере булыу мотлаҡ. Шунһыҙ кеше үҙен етем итеп тойор ине, йөрәге һыҡрар ине.

Тыуған ауылым, Ватаным булыуға ысын-ысынлап шатланам мин. Кешенең тыуған ере булыу бик ҙур бәхет тә баһа! Шунан да ҙурыраҡ бәхеттең булыуы мөмкинме һуң?!

*(Д. Бүләков)*

1. Текст буйынса терәк һүҙҙәр яҙығыҙ.
2. Авторҙың йөрәк түрендә нимәләр ята?
3. Тыуған ер нимәләргә өйрәткән?
4. Башҡортостан ниндәй ил?
5. Текст буйынса тағы ла ниндәй һорауҙар төҙөр инегеҙ?
6. Бер-берегеҙгә һорауҙар бирегеҙ.
7. Хәлдәрҙе табығыҙ, төрөн билдәләгеҙ.
8. Сифаттарҙы билдәләп килгән һүҙҙәре менән яҙып алығыҙ. Яҙылғандарға өҫтәп ниндәй һүҙҙәр яҙыр инегеҙ?
9. Үҙегеҙ һайлап, текстың береһе буйынса диктант яҙығыҙ һәм бер-берегеҙҙең эшен тикшерегеҙ.

**13.** Горизонталь буйынса шаҡмаҡтарға тура килтереп, йылға исемдәрен дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ.



**14.** I. Һорауҙарға яуап яҙығыҙ.

1. Башҡортостандың баш ҡалаһы ҡайҙа урынлашҡан? 2. Салауат Юлаев ҡайҙа һөргөнгә ебәрелгән? 3. Ҡариҙел йылғаһы ҡайҙан башлана? 4. Ағиҙел йылғаһы ҡайҙан алып ҡайҙа саҡлы һуҙылған?

II. Һорауҙар ярҙамында диалог төҙөгөҙ, дауам итегеҙ.

— Башҡортостан Республикаһының майҙаны күпме?
— ...
— Башҡортостандағы иң бейек тау нисек атала?
— ...
— Башҡортостан урмандарында ниндәй ағастар үҫә?
— ...
— «Янғантау» шифаханаһы ҡайҙа урынлашҡан?
— ...
— Арҡайым тураһында нимәләр беләһегеҙ?
— ...

## Дөрөҫ әйтегеҙ!

алтын көҙ, бабай килә, ишек алды, ҡыҙ бала, бал ҡорто

**15.** Белешмә өсөн һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе тейешле формала ҡулланып, тексты тәржемә итеп яҙығыҙ.

Уральские горы — самые древние горы нашей планеты. Вершина Народная является самой высокой горой Урала. Немного найдётся таких уголков на Руси, где перед вашими глазами в такой великой панораме развёртывалась бы удивительная картина горных равнин.

*(Д. Н. Мамин-Сибиряк)*

Белешмә өсөн һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр: *Урал тауҙары, иң боронғо тауҙар, беҙҙең, планета, түбә, Народная, иң бейек тау, Урал, булып тора, Русь, мөйөш, ундай, табыла, күп түгел, һеҙҙең, күҙ алдында, ҡайҙа, шундай, бөйөк, панорама, асыла, иҫ киткес, картина, тау, тигеҙлек.*

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Обстоятельство времени (ваҡыт хәле)** указывает на время, продолжительность действия, его начало или завершение, отвечает на вопросы **когда?** — ҡасан? **до каких пор?** — ҡасанға тиклем? **с каких пор?** — ҡасандан бирле? **Иртәгә** ҡунаҡтар килә. — **Завтра** придут гости.

**Обстоятельство места (урын хәле)** обозначает место действия и отвечает на вопросы **где?** — ҡайҙа? **откуда?** — ҡайҙан? **куда?** — ҡайҙа? **Алыҫтан** тауыштар ишетелә. — **Издалека** слышны голоса.

**Обстоятельство образа действия (рәүеш хәле)** обозначает характер и способ реализации действия, отвечает на вопросы **как?** — нисек? ҡайһылай? **каким образом?** — ни рәүешле? **Ҡысҡырып** уҡыу — читать **вслух**.

**16.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Хәлдәрҙе табығыҙ, төрөн билдәләгеҙ.

— Хәлиҙә, һин ниңә киноға барманың?
— Мин бик яҡшы китап уҡыным.
— Ул китапта нимә тураһында һүҙ бара?
— Дөйөм әйткәндә, ҡатын-ҡыҙҙың ғаилә усағы булыуы хаҡында. Тормошта ҡатын-ҡыҙҙың иренә, балаларына булған йылы мөнәсәбәтенә күп нәмә бәйле булыуына мин тағы ла бер тапҡыр инандым. Ундай ғаилә ныҡ була. Ғаилә ағзалары бер-береһен ярата, бер-береһенә иғтибарлы ла була.
— Эйе, был хаҡта беҙгә бер ҡасан да онотторға ярамай, сөнки беҙ ҙә буласаҡ әсәләр бит.

**инаныу** — верить

**17.** Нөктәләр урынына тейешле һүҙҙәр ҡуйып, тексты уҡығыҙ. Цифрҙарҙы дөрөҫ әйтегеҙ. Текстағы хәлдәрҙең аҫтына һыҙығыҙ, төрөн билдәләгеҙ. Ҡыҙыл китапҡа ингән ниндәй үҫемлектәрҙе беләһегеҙ? Уларҙың исемдәрен яҙығыҙ.

## Ҡыҙыл китап

Республикабыҙҙа һирәк осраған, юҡҡа сығыу ҡурҡынысы янаған ..., ... һаҡлау, үрсетеү йәһәтенән хөкүмәтебеҙ ҙур эш алып бара. Министрҙар Кабинетының «Башҡортостан Республикаһының Ҡыҙыл китабы тураһында» ҡарары сыҡты.

Башҡортостанда быңдай китап беренсе тапҡыр 1984 йылда ... ... .

Ә 1987 йылда ул өҫтәмәләр һәм ... менән яңынан баҫыла.

Ҡыҙыл китапҡа бөтәһе 232 төр тәбиғәттә әҙ ҡалған үҫемлек ... . Унда ингән үҫемлектәрҙе йыйған, уларҙың үҫкән урынын юҡ иткән өсөн ... билдәләнгән.

*(«Йәншишмә» газетаһынан)*

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *донъя күрә, үҫемлектәрҙе, үҙгәрештәр, хайуандарҙы, индерелгән, штраф.*

**янау** — угроза
**ҡарар** — указ

| |
|---|
| ҡарар<br>ылымыҡ<br>бөйөк<br>тигеҙлек |

**18.** Ребустарҙы сисегеҙ, килеп сыҡҡан һүҙҙәрҙе яҙығыҙ. Аңлатма бирегеҙ.






*Файыҡ Тимерйән улы Мөхәмәтйәнов 1921 йылда Борай районының Ҙур Баҙраҡ ауылында тыуа. 1940 йылда Салҡаҡ урта мәктәбенең 10-сы класында уҡып йөрөгән сағында Ҡыҙыл Армияға алына, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша.*

*Һуғыштан һуң Файыҡ Тимерйән улы төрлө эштәрҙә йөрөй, хатта Көньяҡ Сахалин күмер шахталарында эшләй.*

*Ул 1953 йылда тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайта һәм 1981 йылда хаҡлы ялға сыҡҡансы «Совет Башҡортостаны» («Башҡортостан») газетаһында эшләй.*

*Ил алдындағы хеҙмәттәре Ҡыҙыл Йондоҙ, II дәрәжә Ватан һуғышы, «Почёт билдәһе» ордендары һәм бик күп миҙалдар менән баһаланды. Уға Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре тигән исем бирелде.*

*Файыҡ Мөхәмәтйәнов күп кенә очерктар, балалар һәм өлкәндәр өсөн яҙылған ун шиғыр китабы авторы.*

*1982 йылдан Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

## Кешем — ил күрке

Тауҙар — **минеке**,
Тауҙар — **һинеке**,
**Бейекме** тауҙар,
**Тәпәшме** тауҙар —
Тауҙар илдеке.
Урман — минеке,
Урман — һинеке,
**Ҡуйымы** урман,
**Һирәкме** урман —
Урман илдеке.

Йылға — минеке,
Йылға — һинеке,
**Талғынмы** йылға,
**Ярһыумы** йылға —
Йылға илдеке.
Ҙур ил — минеке,
Ҙур ил — һинеке,
Илеңде биҙәп,
Йәшә һин, йәшә,
Кешем — ил күрке!

**күрк** — *зд.* гордость

1. Шиғырҙың төп темаһын билдәләгеҙ.
2. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәр буйынса һығымта яһағыҙ. Ошондай һүҙҙәр теҙмәһен дауам итегеҙ.
3. Шиғырҙы ятлағыҙ.

**19.** Һүҙбәйләнештәрҙе тәржемә итегеҙ, өс һүҙбәйләнеш менән һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ.

осенний день, дремучий лес, летняя погода, зимняя ночь, синяя тетрадь, хорошая погода, дальнее поле, вечерняя звезда, лёгкое облако, большое озеро, старшая сестра

**Хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ!**

Ҡылымдар өс заманда килә. **Үткән заман** элек эшләгән эште белдерә һәм **ни эшләне? ни эшләгән?** һорауҙарына яуап бирә. Мәҫәлән: уҡыған — **ни эшләгән? Хәҙерге заман** эштең әлеге ваҡытта эшләнеүен белдерә һәм **ни эшләй?** һорауына яуап бирә: уҡый — **ни эшләй? Киләсәк заман** алда эшләнәсәк эште белдерә, **ни эшләр? ни эшләйәсәк?** һорауҙарына яуап бирә: уҡыр — **ни эшләр?** уҡыясаҡ — **ни эшләйәсәк?**

!! **20.** Тексты уҡығыҙ. Нөктәләр урынына ҡылымдар уйлап яҙығыҙ. Заманын билдәләгеҙ. Тексттың планын төҙөгөҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ.

## Еребеҙҙең йәшел биҙәге

Башҡортостан ерен ысын мәғәнәһендә «Урал ынйыһы» тип ... була. Уның тәбиғи байлыҡтарының айырылғыһыҙ өлөшө — урмандар. Республикабыҙҙа урмандар 5,5 миллион гектар майҙанды ... һәм уның запасы 0,6 миллиард кубометр тәшкил итә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, урмандың муллығы күп урындарҙа уның менән һаҡсыл эш итмәүгә, тәбиғәткә вайымһыҙ ҡарауға алып ... .

Бөйөк рус ғалимы Д. И. Менделеев шундай һүҙҙәр яҙып ... : «Урал — Азия менән Европаның тәбиғи сиге. Унан күп йылғалар башлана, уларҙың ҡайһы берҙәре Волга, икенселәре Обь яғына юл ала. Көньяҡҡа ла Урал күп һыу бирә. Шуның менән Урал күп майҙанда йәшәгән халыҡтың тормошон тәьмин итә. Урал урмандарын бөтөрһәк, тауҙар ғына яланғас ҡалмаҫ, миллиондарса халыҡ һәм улар йәшәгән төбәк ҙур зыян күрер. Был урмандарға ҡағылырға ярамай».

XIX быуатта әйтелһә лә, күренекле ғалимдың тәрән мәғәнәле фекере бөгөн айырыуса әһәмиәтле. Сөнки беҙҙә әллә нисә миллион кубометр ағас әҙерләнә, был эштә тейешле талаптар үтәлмәй.

Урманды һаҡсыл ..., уны ишәйтеү — хәҙер көн үҙәгендәге бурыстарҙың береһе. Урмандарҙы ... — тимәк, еребеҙҙең йәшел юрғанын, тупрағыбыҙҙың уңдырышлығын, һулаған һауабыҙҙың сафлығын, бер һүҙ менән әйткәндә, йәшәгән мөхитебеҙҙе һаҡлау ул.

*(«Мәктәп календары»нан)*

**21.** Һүҙҙәргә ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр табып, дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ. Был һүҙҙәр нисек атала? Һығымта эшләгеҙ.

1. Күтәрә —
2. Атлай —
3. Китә —
4. Менә —

**22.** Аҫтына һыҙылған һүҙҙәрҙе, ә һуңынан тексты тәржемә итегеҙ. «Башҡортостан тәбиғәте» темаһы буйынса ниндәй һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр хәтерегеҙҙә ҡалды? Шуларҙы дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ.

Сколько слов произносит человек **ежедневно**? Это зависит от характера, профессии, от социальных **условий. Учёные** всё же установили **среднюю цифру**: 30 тысяч слов. В среднем человек говорит беспрерывно в течение одного часа каждый день, а за **всю жизнь** — почти три года. **Правда**, есть люди, которые разговаривают значительно больше. Один учёный **в шутку** сказал, что если бы можно было превратить **человеческую речь** в электрическую линию, то пяти соседок хватило бы на **освещение** целого города.

*(Из газеты «Вечерняя Уфа»)*

**23.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ, төп темаһын билдәләгеҙ.

## Башҡортостан

Зәңгәр күктә балҡып ҡояш сыға,
Зәңгәр нурға сума сал Урал.
Зәңгәр тауҙар ҡуйынында ята
Алтын бишек — изге Атайсал.
Аҡ бүрене халҡым тәңре иткән,
Ер тамыры — көмөш Аҡ Иҙел.
Аҡ нур сәсә, аҡ бәхеттәр юрай
Аҡ күңелле халҡың, Тыуған ил.
Йәшеллеккә сумған хозур ерең,
Йәшәү төҫө лә ул йәшеллек.
Һәм Ватаны булған һәр милләткә
Изге булһын дуҫлыҡ, ғәҙеллек.
Азатлыҡҡа оран Салауатың,
Моңло ҡурай — ерем тамғаһы.
Муллыҡ, бәхет, берҙәмлеккә өндәй
Беҙ күтәргән ирек байрағы.
Аяҙ күкле, тыныс, хозур илдә
Берҙәмлекте ҡойоп ҡоростай,
Йәшә, күкрә, нурға күмел әйҙә,
Ғәзиз ер — гүзәл Башҡортостан.

*(М. Багаев)*

**?**

1. Ни өсөн автор шиғыр йөкмәткеһен асып бирер өсөн төҫтәр ҡуллана?
3. Аҫтына һыҙылған юлдарҙың мәғәнәһен аңлатығыҙ.
3. Шиғырҙан синонимдарҙы табығыҙ.

## Дөрөҫ әйтегеҙ!

Атайсал
мүк
ҡурсалау
заман
хәсрәт
тәьҫорат

Вәсилә, Вәли, ваҡыт, Вәлимә, ваҡ, Вәкил

**24.** Тексты тасуири уҡығыҙ. Уға исем бирегеҙ. Күсереп яҙығыҙ. Бер-берегеҙҙең эшен тикшерегеҙ һәм баһалағыҙ.

Ер-әсә! Үҙ ғүмерендә ниҙәр күрмәгән, ниҙәр генә кисермәгән. Яу уттарында ла ул көйрәп янған, мең бәләләрҙән иҫән ҡалған.

Ер-әсә! Күк күкрәүен дә, диңгеҙ шаулауын да, шишмә тауышын да, ҡоштар һайрауын да ишетә ул. Кешеләрҙең һөйөнөсөн дә тоя ул. Тыныслыҡ яҡлыларҙың имен тормош төҙөүенә сикһеҙ шатлана, мәкерле дошмандарҙың ҡара эштәрен күрә лә борсола ул.

Ярһып елә заман, тик Ер-әсә тыныс түгел һаман!

*(А. Игебаев)*

?

1. Автор Ер-әсә тураһында нимәләр яҙа?
2. Нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн Ер-әсә тыныс түгел?
3. Текста әйтелеү маҡсаты буйынса ниндәй һөйләмдәр бар?
4. Тексттың йөкмәткеһе буйынса фекерегеҙҙе әйтегеҙ.

**25.** Мәҡәлдәрҙе тасуири уҡығыҙ. Уларҙы ниндәй дөйөм тема берләштерә? Тема буйынса бер нисә мәҡәл өҫтәп яҙығыҙ.

1. Ерҙең даны ирҙән.
2. Ерҙең көнө ил менән, илдең көнө ер менән.
3. Ере байҙың — иле байыр.
4. Ил терәге — ир, ир терәге — ил.
5. Ир — тыуған ерендә, ат — туйған ерендә.
6. Тыуған ер — яҡын, тыуған ил — алтын.

**26.** Автор күтәргән проблема буйынса, уның тексынан цитаталар ҡулланып, үҙегеҙ текст уйлап яҙығыҙ.

Беҙҙең һәр беребеҙ өсөн изге тыуған йорт, изге Ватан ул — Башҡортостан. Мин ошо илдә, ошо ерҙә тыуыуым һәм ошо тыуған ерҙә йәшәүем менән бәхетлемен. Шуға һәр ваҡыт ҡыуанып йәшәйем. Бар булмышым, күңелем, рухым ошо тупраҡҡа бәйле. Бөтә күңелем ошо тауҙарға, йылғаларға, далаларға, ошонда йәшәгән халҡыма, туған телемә, йыр-моңдарыма барып тоташҡан.

Ер, ил тойғоһо кеше өсөн айырыуса изге бер төшөнсә ул. Минең күҙәтеүем буйынса, кешене яҙмыш ситкә ташлаһа ла, барыбер күңеле менән ошо тыуған еренән айырылып йәшәй алмай. Ошо изге ерҙә, тыуған тупрағымда йәшәүем менән бәхетлемен мин.

*(Р. Шәкүрҙән)*

?

1. Тексҡа исем бирегеҙ.
2. Эпиграф һайлағыҙ.

## Атамалар ни һөйләй?

**1.** Тексты тасуири уҡығыҙ. Өфө ҡалаһының килеп сығышы тураһында һөйләгеҙ. Текстағы атамаларҙы яҙып алығыҙ.

### Беҙҙең баш ҡалабыҙ — Өфө

Өфө — Башҡортостандың баш ҡалаһы. Уның төҙөлөү тарихы былай. 1574 йылда Ағиҙел менән Ҡариҙел йылғалары ҡушылған ҡалҡыулыҡта ҡәлғә һалына башлай. Ҡәлғә хәҙерге Дуҫлыҡ монументы урынлашҡан Беренсе май майҙаны тирәһен биләй. Ҡаланы башта Торатау тип, ә имән стеналар менән уратып алынғас, Имәнҡала тип йөрөтәләр.

1586 йылдан алып Өфө ҡәлғәһе ҡала тип атала башлай. «Өфө» һүҙенең килеп сығышын төрлөсә аңлаталар. Ҡайһы бер ғалимдар «уфа» һүҙе башҡортса «уба» (ҡалҡыулыҡ, бейек булмаған тау) һүҙенән алынған тип уйлай, икенселәре уны Өфө йылғаһы исеме менән бәйләй. Сөнки Ҡариҙел йылғаһы башында йәшәүсе башҡорттар йылғаны хәҙер ҙә Өфө тип йөрөтә.

Өфө хәҙер Рәсәйҙәге иң ҙур ҡалаларҙың береһе. Унда бик күп завод-фабрикалар, Фәндәр академияһы, юғары һәм махсус урта белем биреүсе уҡыу йорттары, мәктәптәр, колледждар һәм төрлө мәҙәниәт үҙәктәре урынлашҡан.

Өфө ҡалаһында «Башҡортостан», «Йәшлек», «Йәншишмә», «Киске Өфө», «Башҡортостан Республикаһы», «Ҡыҙыл таң», «Өмөт» газеталары, «Ағиҙел», «Ватандаш», «Шоңҡар», «Тамаша», «Аманат», «Толпар», кескәй балалар өсөн «Аҡбуҙат», «Әллүки» журналдары һәм башҡа бик күп газета-журналдар сыға.

«Ағиҙел» художество берекмәһе етештергән ағас әйберҙәр, һуғылған балаҫ-келәмдәр, күлдәктәр сит илдәрҙә киң танылыу алған. Был әйберҙәрҙә етештергәндә халҡыбыҙҙың милли биҙәү сәнғәт өлгөләре киң файҙаланыла. Улар Башҡортостан еренең бөтә матурлығын үҙенә һеңдергән. Өфө — илебеҙҙәге иң матур ҡалаларҙың береһе. Уның музейҙары, урамдары һәм һәйкәлдәре халҡыбыҙҙың данлы тарихын һаҡлай. Өфө — Башҡортостан халыҡтарының ғорурлығы.

*(Р. Бикбаевтан)*

**берекмә** — объединение
**ҡәлғә** — крепость

1. 1—2-се абзацтарҙың йөкмәткеһен һөйләгеҙ һәм мәғлүмәттәрҙе хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.
2. Өҫтәлмә сығанаҡтар ҡулланып, Өфө тураһында яңы мәғлүмәттәр яҙығыҙ.
3. Һуңғы абзацты күсереп яҙығыҙ.

**2.** Тексты тасуири уҡығыҙ. Картанан ҡарап, нөктәләр урынына йылға исемдәрен яҙығыҙ.

## Ағиҙел

Башҡортостан картаһына ҡарағыҙ. Уның бер осонан икенсе осона тиклем бер йылға ағып үтә. Оҙонлоғо 1500 километрға яҡын. Был — Ағиҙел. Халҡымдың үткәнен дә, бөгөнгөһөн дә үҙендә кәүҙәләндереүсе Ағиҙел. Башҡортостан тураһында һөйләгәндә, уны иҫкә алмау мөмкин түгел. Сөнки Башҡортостан тиеү менән, Ағиҙелде күҙ алдына килтерәһең, ә Ағиҙел тиһәләр, Башҡортостанды уйлайһың.

Ағиҙел Учалы районы Яңы Хөсәйен һәм Байһаҡал ауылдары янында башлана. Башланған ерендә йылға бала-саға ла ашатлап сығырлыҡ тар ғына. Ә шул тиклем һыуҙы ҡайҙан ала һуң ул?

Күп йәшәгән, күпте белгән бабай әйтә:

— Һеңлеләренән ала уны, — ти. — Бына бер һеңлеһе ... . Бына тағы ... . Һеңлеләре бик күп уның: ... . Ә апаһы берәү генә — Иҙел. Ағиҙел шул апаһын эҙләп бара.

*(Ә. Атнабаевтан)*

**күп йәшәгән** — много проживший
**күпте белгән** — много знающий

1. Ағиҙел йылғаһы тураһындағы текстҡа нигеҙләнеп, үҙегеҙ белгәндәрҙе өҫтәп һөйләгеҙ.
2. Тексты күсереп яҙығыҙ, бер-берегеҙҙең эшен тикшерегеҙ.

**3.** Башҡортостан Республикаһындағы йылға исемдәрен һәм ҡайһы төбәктә урынлашыуын яҙығыҙ.

**4.** Тексты уҡығыҙ. Уны абзацтарға бүлегеҙ. Рус телендәге һүҙҙәрҙе тәржемә итеп уҡығыҙ. Ҡылымдарҙың заманын билдәләгеҙ.



Хөсәйенбәк кәшәнәһе — тарихи археологик ҡомартҡы. «Төркөстандағы бөйөк Ғүмәр Тәрәсбәк улы Хөсәйенбәк» ҡәбер өҫтөндәге яҙыу (говорит об этом). Уның үлгән йылы тип 1341—1342 йылдар һанала. Кәшәнәнең хәҙерге көмбәҙле йорто иһә 1911 йылда төҙөлгән. Иҫке нигеҙенең ер аҫты өлөшө (сохранился). Юматовтың һүрәтләүе буйынса, кәшәнә стеналары 1,57 метр ҡалынлыҡтағы эзбиз ҡатнашмаһы менән шымартылған (из камней) һалынған булған. Хәҙерге көндәге торошо — квадрат, һәр яғы 8,4 метр, ул иҙәндән 2,1 метр бейеклектәге һигеҙ ҡырға, унан һуң түңәрәк

көмбәҙ рәүешенә күскән. Бинаның (высота) 4,2 метр, (снутри) стеналар штукатурланған. Кәшәнә — XIV—XV быуаттарҙағы Алтын Урҙаның юғары ҡатлам кешеләренең ҡомартҡыһы. Әлеге көндә Шишмә станцияһы эргәһендәге Дим йылғаһы бассейнының Аҡзыярат ҡәберлеге биләмәһендә тора. (На этом месте) XV—XVI быуаттарҙа башҡорт хандарының йәйләүҙәре урынлашҡан булған, уның тураһында Ҡыҙрас Муллаҡаев үҙенең «Башҡорт тарихы»нда иҫкә ала.

*(«Ғаилә календары»нан)*

**ҡомартҡы** — археологический памятник
**ҡәбер** — могила
**ҡәберлек** — кладбище
**көмбәҙ** — купол, свод
**ҡатнашма** — смесь
**ҡалынлыҡ** — толщина
**кәшәнә** — гробница
**юғары ҡатлам кешеләре** — люди высокого чина
**биләмә** — *зд.:* территория

1. Нимә ул кәшәнә?
2. Башҡортостан Республикаһында нисә кәшәнә бар? Улар ҡайҙа урынлашҡан?
3. Текст буйынса һорауҙар уйлап яҙығыҙ.
4. Хөсәйенбәк кәшәнәһе тураһында һөйләгеҙ.

**5.** Мәҡәлдәрҙе күсереп яҙығыҙ. Мәғәнәләрен аңлатығыҙ, һығымта яһағыҙ.

Иренгән ике эшләр. Ике уйла, бер һөйлә. Ялҡау ята белмәҫ, ятһа — тора белмәҫ. Аҙ һөйлә, күп эшлә. Бер көнгә артта ҡалһаң, биш көнлөк эшең ҡалыр. Күп аштың тәме юҡ, күп һүҙҙең йәме юҡ. Урманға барһаң, ҡоштар моңон тыңларһың. Йәй эшләмәһәң, ҡыш ашарға тапмаҫһың.

**6.** Текстағы һөйләмдәрҙе үҙ урындарына ҡуйып күсереп яҙығыҙ. Үҙегеҙ йәшәгән ҡала (район) тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт әҙерләгеҙ.

## Октябрьский ҡалаһы

Октябрьскийҙа машиналар төҙөү заводы һалынды. Унда төрлө һауыт-һабалар эшләнә. Октябрьский республикабыҙҙың көнбайышында урынлашҡан. Өҫ кейемдәре, аяҡ кейемдәре тегеү фабрикалары төҙөлдө. Был ҡала шул тирәлә нефть табылғас барлыҡҡа килде.

### Дөрөҫ әйтегеҙ!

ҡала, Ағиҙел, йылға, Салауат, тауыш, Һәләүек, күгәүен, тоҙ, Һаҡмар, Нөгөш, Миләүшә, Әнүәр



*Ҡәҙим Аралбай (Ҡәҙим Әбделғәлим улы Аралбаев) 1941 йылда Башҡортостандың Хәйбулла районы Таңатар ауылында тыуа. Уның бик күп китаптары донъя күрҙе һәм рус, ҡаҙаҡ, татар, алтай, сыуаш, украин, удмурт телдәрендә нәшер ителде.*

*Ҡәҙим Аралбай — Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Хәйбулла районының — Сергей Чекмарёв, Күгәрсен районының — Зәйнәб Биишева һәм 1-се республика башҡорт гимназияһының Рәми Ғарипов исемендәге премияларына лайыҡ булды.*

## Шүлгәнгә

Изге ергә мин тағы ла килдем,
Аяҡ баҫтым Иҙел ярына,
Мәмерйәнең шомло тынлығынан,
Һағышынан йөрәк ярыла.

Уралымдың бында сал тарихы
Аға йылға булып,
Тәүтормоштоң ҡараңғылығынан
Сығам күңелемә нур тулып.

Ниндәй генә даръя кискәндә лә,
Төшкәндә лә төпһөҙ тәрәнгә,
Шүлгәнемдең уңмаҫ тамғалары
Баҙлар беҙҙең йөрәк түрендә.

**мәмерйә** — пещера
**һағыш** — печаль
**сал** — *зд.:* давняя
**тәүтормош** — древняя жизнь, древние века
**төпһөҙ** — бездонный
**уңмаҫ** — невыцветающий

?

1. Шиғырҙа нимә тураһында һүҙ бара?
2. Ни өсөн автор Шүлгәнде изге ер тип атай?
3. Шүлгәндә булып сыҡҡандан һуң, автор ниндәй тойғолар кисерә?
4. Ул тойғолар ниндәй юлдарҙа бирелә?
5. Шүлгән мәмерйәһе тураһында белгәндәрегеҙҙе һөйләгеҙ.

**Беләһегеҙме?**

Боронғо Грецияла һәм Ғәрәбстанда теге йәки был күренекле шәхесте, әһәмиәтле хәл-ваҡиғаны маҡтап һүрәтләгән шиғырҙы айырым исем менән атап йөрөткәндәр. Мәҙхиәләрҙең күпселеге дөйөм халыҡ мәнфәғәтен сағылдырған, алынған теманы лирик-романтик планда хәл иткән.

**7.** Тексты уҡығыҙ. *Каруанһарай ниндәй бина ул?* тигән һорауға яуап әҙерләгеҙ.

## Каруанһарай

Һәр халыҡтың үҙ тарихына ҡағылышлы изге ҡомартҡылары бар.

1837—1846 йылдарҙа Ырымбур ҡалаһында башҡорт кантондарынан йыйылған төҙөүселәр Каруанһарай бинаһын һала. Ул, Ырымбурға килеп йөрөгән башҡорттар өсөн, үҙҙәре йыйған аҡсаға ылау-ылау ташыған ағас-таштан төҙөлә. Ләкин батша түрәләре башҡорт халҡын алдай һәм Каруанһарайҙы 1917 йылға тиклем үҙ мәнфәғәттәрендә файҙаланып килә.

1918 йылдың февралендә башҡорт халҡының милке булған Каруанһарайҙы ысын хужаларына бөтөнләйгә ҡайтарып биреү тураһындағы декрет ҡабул ителә. Каруанһарай милли мәҙәниәт һәм мәғрифәт үҙәгенә әйләнә — унда Башҡорт педагогия техникумы асыла.

Туҡсоран кантоны Ырымбур өлкәһенә ҡушылғас, 1935 йылда Каруанһарайҙағы был педтехникум ябыла.

*(«Башҡортостан» газетаһынан)*

**8.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

## Янғантауға мәҙхиә

Хозур ерҙәр күптер был донъяла,
Янғантау бер ул, бер генә,
Йәннәт ләззәттәрең ары торһон,
Йән дауаһы табыр был ерҙә.
Китһәң әгәр, иҫтәреңә төшөр
Дәрт уятыр янар ҡуҙҙары,
Аҙаштырыр әле ҡайындары,
Һаташтырыр әле ҡыҙҙары.

Мең сырхауға шифа Ҡорғаҙағы
Һыуһындарҙы бермә ҡандырыр,
Һаташтырыр һары һандуғасы,
Ҡауыштырыр сихри таңдары.

Етемһерәр йөрәк Янғантауһыҙ,
Йүрүҙәнден моңло йырыһыҙ,
Һаташтырыр әле ҡайындары,
Һағындырыр әле йылыһы...

*(К. Аралбай)*

**мәҙхиә** — ода
**хозур** — блаженный
**йәннәт** — рай
**ләззәт** — удовольствие
**сырхау** — больной
**һаташыу** — бредить
**сихри** — чарующий
**дәрт** — страсть
**ҡуҙ** — уголь
**аҙашыу** — плутать
**етемһерәү** — осиротеть

1. Автор Янғантауҙы нисек тасуирлай?
2. Уның бөйөклөгөн ниндәй һүҙ менән бирә?
3. Шифахананың дауаһы ҡайһы юлдарҙа һүрәтләнә?
4. «Янғантау» шифахanaһы ҡайҙа урынлашҡан? Картанан күрһәтегеҙ.
5. Нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн ул «Янғантау» тип атала? Бәлки, Янғантау тауының легендаһын беләһегеҙҙер. Һөйләгеҙ.

мәҙхиә
хозур
йәннәт
ләззәт
сихри
дәрт
ҡуҙ

**9.** Өҫтәлмә сығанаҡтар ҡулланып, «Тыуған еребеҙ — Башҡортостан» темаһы буйынса проект эше ҡороғоҙ.

**10.** Нөктәләр урынына тейешле һүҙҙәр ҡуйып яҙығыҙ.

## Шихандар

Ишембай яғында легендаларға ингән Торатау тигән тау ... . Был тау геологтар өсөн дә бик ҡыҙыҡлы, сөнки ул диңгеҙ төбөндә үҫеп сыҡҡан ҙур риф массивы ... ... . Был ҙур бейек ҡоролмалар миллион йылдар үткәс, әҙбизташ тауына ... . Ҡайһы саҡ Торатау кеүек ер өҫтөндә ... ... .

Бындай яңғыҙаҡ тауҙарҙы икенсе төрлө «шихан» тип ... . Торатауҙан башҡа, ул яҡтарҙа тағы өс шихан бар: Шәкетау, Ҡуштау, Йөрәктау. Был атаҡлы тауҙарҙың фотоһүрәттәре башҡа илдәрҙә сыҡҡан ҡайһы бер геология дәреслектәренә ... .

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *булып тора, бар, индерелгән, йөрөтәләр, әүерелә, тороп ҡала.*

**11.** Уҡығыҙ. Үҙегеҙ өсөн иң кәрәкле мәғлүмәтте айырып яҙып алығыҙ һәм хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

## Өфө һыҫары

Баш ҡалабыҙҙың хәҙерге эмблемаларында төрлө күренештәге һыҫар йыш ҡабатлана. Ул Өфө приказдар йорто мисәттәрендә

XVIII быуат урталарында уҡ күренә башлай. Өфө ҡалын урмандар уртаһында ултырғанлыҡтан, ул саҡтарҙа ҡала тирәһендә был кейек бик күп булғандыр, күрәһең.



1752 йылдың 3 июлендә, Өфөнөң рәсми гербын эшләгәндә, йәнә һуҫар һүрәте ҡулланыла.

Шул йылда был кейек рәсеме Өфө наместничествоһына ингән бөтә өйәҙ ҡалаларының (Бөрө, Минзәлә, Бөгөлмә, Боғоролан, Стәрлетамаҡ, Силәбе, Сергеевск, Верхнеуральск, Быҙаулыҡ) рәсми гербы булараҡ иҫәпләнә.

Төп ҡалабыҙ — Өфөнөң гербы айырыуса матур була: асыҡ күк төҫтәге һөйкөмлө йәнлек, сағыу ҡыҙыл телен сығарып, көмөш ерлектә ҡуш аяҡлап сабып бара. Гербтың өҫкө өлөшөндә император тажы балҡый, ян-яҡтары зәңгәр таҫмаға үрелгән имән япраҡтары менән ҡаймалана.

*(Д. Мырҙаҡаеванан)*

**һуҫар** — куница
**мисәт** — печать
**рәсми** — официальный
**өйәҙ** — уезд
**ерлек** — фон
**ҡаймалау** — окаймлять

**Т** **12.** I. Ниндәй хәреф яҙыла?

...уҫар, ...ат, ...әбәр, ...орау, ...ауа, ...ыу, ...ата, ...ыуыҡ, ...өйләм, ...еләү...ен, ...айуан, ...аулыҡ, ...ушлашыу, моң...оу, бур...ыҡ

II. Хәлдәр ҡулланып, тәҡдим ителгән һүҙҙәр менән һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ.

ҡурҡыуынан, аңламағанлыҡтан, тырышҡанға күрә, күп уҡығанға, бармаған өсөн

**13.** Тексты тасуири уҡығыҙ. Тәүге һөйләмдә ҡуйылған һорауға яуап бирегеҙ. Нөктәләр урынына күлдең атамаһын тейешле формала ҡуйып яҙығыҙ.

Башҡортостанда ниндәй күл иң ҙур һәм ул нимәһе менән ҡыҙыҡлы? Республикабыҙҙың географияһы менән таныш кешеләр, әлбиттә, һорауға былай тип яуап бирерҙәр: «Беҙҙә иң ҙур күл — ..., ул 22 квадрат километр майҙанды биләй».

Оҙонлоғо 8 километр, киңлеге 5 километр булған был күл Бәләбәй ҡалҡыулығында ята, ул тау убылыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән.

Бәләбәй ҡалҡыулығының үҙенә килгәндә, шул ҡыҙыҡлы: ҡалҡыулыҡ йыл һайын ярты сантиметрға күтәрелә. Ярты сантиметр тәү ҡарауға күп тә түгел һымаҡ, ә уйлап ҡараһаң, 2000 йылда 10 метрға, йәғни өс ҡатлы йорт бейеклегенә, күтәрелергә тейеш был ҡалҡыулыҡ.

... һыуы саҡ ҡына әскелтем, үҙе эсергә яраҡлы.

Әҙ генә көслөрәк ел иҫтеме, күл ҡоторона башлай. Бейек-бейек тулҡындар шаулап ярға бәреләләр. Күл өҫтөндә дауыл күтәрелгәндә, көслө тулҡындар кәмәне ҡаяға килтереп һуғып, юныҫҡыға әйләндереүе ихтимал.

Хәҙер күл буйында ял базалары, балалар өсөн лагерҙар урынлашҡан, унда туристар ҙа күп була.

*(А. Цветаевтан)*

**оҙонлоҡ** — длина
**киңлек** — ширина
**убылыу** — *зд.:* провалиться
**һөҙөмтә** — результат
**ҡалҡыулыҡ** — возвышенность
**әскелтем** — *зд.:* солоноватый
**юныҫҡы** — щепка

1. Текстҡа исем бирегеҙ.
2. Текстан ҡушма һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ. Аңлатығыҙ.
3. Асылыкүлдә кешегә ниндәй хәүеф янауы ихтимал?
4. Асылыкүл ниндәй районда урынлашҡан? Уны Башҡортостан Республикаһы картаһында билдәләгеҙ.

**14.** I. Тәҡдим ителгән һүҙҙәргә мәғәнәләре менән тап килгән сифаттар һайлап яҙығыҙ.

тау, ер, һауа, тупраҡ, япраҡ, ялан, урман

II. Тейешле хәрефтәр ҡуйып, Башҡортостандағы ҡала исемдәрен дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ.

С_ _ _ _ , М_ _ _ _ _ _ , С_ _ _ _ _ _ , Б_ _ _ , Я_ _ _ _ _ , Д_ _ _ _ _ _ _ , У_ _ _ _ , И_ _ _ _ _ _ , Т_ _ _ _ _ _ , А_ _ _ _ _

III. Йомаҡтарҙың яуабын табығыҙ.

1. Ҡырҙа үҫкән бер бала ел иҫкәндә моң һала.
2. Көмөш тәнле, ите тәмле.
3. Ай менән килделәр,
   Күк тирмәгә инделәр,
   Уйнанылар, көлдөләр,
   Ҡояш менән киттеләр.

IV. Мәғәнәләренә ҡарап, башҡорт һәм рус мәҡәлдәренең парҙарын табығыҙ.

1. Дружно — не грузно, а врозь — хоть брось. Ищи товарища лучше себя, а не хуже себя. Забота не съела — скука одолела. Встречают по одёжке, а провожают по уму. К собаке подходи сзади, а к лошади — спереди.

2. Ағас күрке — япраҡ, кеше күрке — сепрәк. Эшлекһеҙҙе йоҡо баҫыр. Дуҫың булһа, үҙеңдән артыҡ булһын. Ат типмәҫ, тимә, эт тешләмәҫ, тимә. Берлектә — бәрәкәт, тарҡаулыҡта — һәләкәт.

**15.** Тексты тасуири уҡығыҙ. Хәлдәрҙе табып, төрөн билдәләгеҙ.

Александр Матвеевич Матросов (Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәнов) Учалы районы Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Әсәһе, шул уҡ райондың Сәфәр ауылынан Мөслимә Хәйбулла ҡыҙы, ауырып вафат булғас, малай аяғы зәғиф, күҙе лә күрмәгән атаһы Юныс ҡарамағында тороп ҡала. Шакирйәндең 1932 йылда Ҡунаҡбайҙа 2-се класта уҡып йөрөүе билдәле. Астан үлмәҫ өсөн, ул 1933 йылда ауылынан сығып китергә мәжбүр була.

Малайҙың тәүге йәшәгән урыны — Ульяновск өлкәһенең Мәләкәҫ ҡалаһы (хәҙерге Димитровград). Мәләкәҫтә ул ике балалар йортон алыштыра. 1935 йылда Сашаны ҡаты тәртибе менән билдәле булған Ивановка балалар йортона (Ульяновск өлкәһендә) күсерәләр. 1939 йылдың көҙөндә Ивановкала ете класс тамамлаған Матросовты Һамар ҡалаһындағы вагон ремонтлау заводына эшкә урынлаштыралар. Ләкин бында ла ул оҙаҡҡа тотҡарланмай, Һарытау ҡалаһына юллана. Унда паспорт режимын боҙоуҙа ғәйепләнеп, хөкөмгә тарттырыла һәм 1940 йылдың октябрендә Өфө холоҡ төҙәтеү һәм хеҙмәт колонияһына оҙатыла.

1942 йылда ул, бер нисә тапҡыр ғариза биргәндән һуң, Ҡыҙыл Армия сафына алына һәм Чкалов өлкәһенең (хәҙерге Ырымбур өлкәһе) Краснохолм хәрби-пехота училищеһына ебәрелә. 1943 йылдың ғинуарында А. Матросов Калинин фронтына И. В. Сталин исемендәге 91-се Тымыҡ океан доброволец комсомолдар диңгеҙ бригадаһына оҙатыла. Рота командирының ординарецы була. Псков өлкәһенең Локлян районы Чернушки ауылын алыу өсөн барған һуғышта ҡатнаша һәм 1943 йылдың 27 февралендә Чернушкиҙан бер километр ситтәрәк, Плетено ауылы эргәһендә, дошман дзотын күкрәге менән ҡаплап, һәләк була.

Герой хөрмәтенә тыуған ауылы Ҡунаҡбайҙағы мәктәпкә Шакирйән Мөхәмәтйәнов исеме бирелгән, мәктәп эргәһендә музей асылған.

*(Р. Насиров)*

**?**
1. Текстҡа исем бирегеҙ.
2. План төҙөп яҙығыҙ.

3. Шакирйән Мөхәмәтйәнов тураһында хронологик таблица төҙөгөҙ.
4. Тексттың йөкмәткеһен һөйләгеҙ.

**16.** Күренекле шәхестәр исемлеге араһынан һәр төркөмгә тура килгән исемдәрҙе һайлап алып яҙығыҙ һәм исемлекте дауам итегеҙ.

Мәжит Ғафури, Фидан Ғафаров, Александр Филиппов, Айҙар Ғәлимов, Михаил Нестеров, Рәми Ғарипов, Муса Гәрәев, Хәсән Туфан, Әхмәт Лотфуллин, Рәшиҙә Туйсина, Миңлеғәле Шайморатов, Гөлфиә Юнысова, Сергей Чавайн, Арыҫлан Мөбәрәков, Даян Мурзин, Василий Чапаев, Ноғман Мусин, Рудольф Нуриев, Валерий Чкалов, Шәһит Хоҙайбирҙин, Александра Пахмутова, Ғабдулла Туҡай, Рәшит Нурмөхәмәтов, Сергей Есенин, Владислав Меос, Илһам Шакиров, Яков Ухсай, Марат Кәримов, Геннадий Родионов, Рауил Бикбаев, Хәниә Фәрхи, Сергей Аксаков, Муса Йәлил, Раиса Сарби-Яковлева

Яҙыусылар:
Сәнғәт оҫталары:
Рәссамдар:
Батырҙар:

| |
|---|
| һуҫар |
| мисәт |
| рәсми |
| өйәҙ |
| кәсеп |
| солоҡсолоҡ |

**17.** I. Диалогты дауам итегеҙ.

— Айнур, иртәгә көн аяҙ булһа, ...
— Әлфиә, ә һин нимә эшләрһең?
— ...

II. Тәҡдим ителгән темаларҙың береһенә диалог төҙөгөҙ.

1. «Йылға буйында».
2. «Шүлгәнташ мәмерйәһендә».

**18.** Тексты уҡығыҙ. Абзацтарға бүлеп күсереп яҙығыҙ, бер-берегеҙҙең эшен тикшерегеҙ һәм баһалағыҙ.

...Лев Толстой йәй айҙарында башҡорттар араһына ҡымыҙ эсергә килә торған булған. Ул башҡорттарҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын өйрәнгән, улар менән бергә һабантуйҙар, бәйгеләр ойоштороған, һунарға йөрөгән. 1862 йылда Толстойҙың сәләмәтлеге бик нык ҡаҡшай, уға ҡымыҙ эсергә кәңәш бирәләр. Ул ваҡытта башҡорт ҡымыҙының даны Рәсәйҙә киң таралған була. Яҙыусы май айында Һамарҙан 130 саҡрым алыҫлыҡтағы Кәрәлек йылғаһы буйындағы башҡорттар йәйләүенә килә. Башҡорттар Толстойҙы киң күңел менән ҡаршы алалар, ял итергә, дауаланырға килгән кешегә оло хөрмәт күрһәтәләр. Ҡунаҡсыл, киң күңелле халыҡ, бай тәбиғәт, икһеҙ-сикһеҙ иркен дала тәүге көндән үк яҙыусының күңеленә ята.

*(«Ағиҙел» журналынан)*

## Башҡортостан мәҙәниәте

**1.** Тексты тасуири уҡығыҙ. Башҡортостанда ниндәй театрҙар бар? Текст буйынса һорауҙар әҙерләгеҙ.

Өфөлә тәүге театр тамашалары 1772 йылда барлыҡҡа килгән. Унда һөргөнгә ебәрелгән зыялыйҙар спектаклдәр ҡуя торған булған. 1841 йылда ҡалала профессиональ рус труппаһы ойошторола.

XIX быуаттың икенсе яртыһында һәм XX быуаттың башында Өфө, Стәрлетамаҡ, Бөрө, Бәләбәй, Ырымбур ҡалаларында Рәсәй үҙәктәренән килеп сығыш яһаусы артистарҙы күреү рус булмаған халыҡтарҙы ла тамашаларға ылыҡтыра. Милли театр сәнғәтенең тәүге үҫентеләре күренә башлай.

1919 йылдың 4 декабрендә Мөхәмәтша Буранғоловтың «Ашҡаҙар» драмаһын сәхнәгә ҡуйыу менән бөгөнгө Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры үҙенең тыуыуы тураһында хәбәр итә. Был театрҙа эшләгән артистар: Арыҫлан Мөбәрәков, Ғабдулла Шамуҡов, Зәйтүнә Бикбулатова, Гөлли Мөбәрәкова «СССР-ҙың халыҡ артисы» тигән исемгә лайыҡ булалар.

1930 йылда Республика рус театры асыла. 1998 йылда уға «академия театры» тигән юғары исем бирелә.

Утыҙынсы йылдар уртаһында Башҡортостан хөкүмәте милли опера һәм балет кадрҙары әҙерләргә тотона. Ҡала-ауылдарҙан һәләтле балаларҙы йыйып, уларҙы Мәскәү консерваторияһының башҡорт студияһына һәм Ленинград хореография училищеһына уҡырға ебәрәләр. Опера һәм балет театры 1938 йылда эшләй башлай.

Өфөлә тағы Ҡурсаҡ театры, Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры, «Нур» татар дәүләт театры бар. «Стәрлетамаҡ театрҙар берлеге» тигән бер исем аҫтында башҡорт һәм рус труппалары, бейеү театры уңышлы эшләп килә.

Башҡортостанда шулай уҡ утыҙынсы йылдарҙа ойошторолған Сибай һәм Салауат башҡорт дәүләт драма театрҙары, 1990 йылда асылған Туймазы татар дәүләт драма театры бар. *(Ф. Фәткуллиндан)*

**зыялый** — интеллигент
**һөргөн** — ссылка
**тамаша** — представление

1. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе тәржемә итеп яҙығыҙ.
2. Театрҙар исемдәрен айырып яҙығыҙ.
3. Текст буйынса план төҙөгөҙ.
4. План буйынса йөкмәткеһен һөйләгеҙ.

**Хәтерегеҙҙә калдырығыҙ!**

**Приложение (өҫтәлмәлек)** — один из видов определения. Приложение отличается от определения тем, что оно не только обозначает признак определяемого предмета, а превращается в название этого предмета. Приложение отвечает на вопрос определяемого слова. Приложение обозначает разные признаки предмета:

а) кешенең ниндәй белгес икәнен (профессию и специальность): инженер-**төҙөүсе** — инженер-**строитель**, **комбайнсы** Кәримов — **комбайнёр** Каримов;

б) предметтың билдәһен (качество предмета): **герой**-кала — город-**герой**;

в) ҡәрҙәшлекте, ҡартлыҡ, йәшлекте (родство, возраст): Муса **ҡарт** — **старик** Муса, Барый **ағай** — **дядя** Барый.

Если приложение обозначает профессию и специальность и стоит после определяемого слова, то ставится дефис: осоусы-**космонавт** — лётчик-**космонавт**, уҡытыусы-**химик** — учитель-**химик**.

**2.** Өҫтәлмәлектәр менән һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ.

һатыусы-консультант, дәрес-лекция, эшсе-шахтёр, автомобиль-фургон, врач-терапевт, врач-анестезиолог, уҡытыусы-ғалим

**3.** Бирелгән миҫалдарҙа күп нөктәләр урынына өҫтәлмәлектәр һәм улар эргәһенә тейешле тыныш билдәләре ҡуйып яҙығыҙ.

Беҙ, ..., үҙебеҙҙең бурысты намыҫлы үтәргә тейешбеҙ. Беҙгә класс етәксеһе ... тиҙҙән походҡа барасағыбыҙҙы әйтте. Руслandың олатаһы ... Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан. Врач ... ауырыуҙарҙы ҡабул итә. Артист ... сығышы тамашасыларға бик оҡшаны.

**Т** **4.** I. Икенсе республиканан килгән ҡунаҡ башҡорт музыкаһы менән ҡыҙыҡһына, ти. Уға башҡорт халҡының йырҙары, композиторҙары, район, ҡала кимәлендә уҙғарылған саралар тураһында һөйләгеҙ. Ҡунаҡтан уларҙағы мәҙәни саралар тураһында ла һорағыҙ.

II. Һеҙ электрон почта аша күрше республика уҡыусыһы менән аралашаһығыҙ. Уға республикала йәшәгән халыҡтар дуҫлығы, берлектә уҙғарылған саралар, республика театрҙары тураһында яҙығыҙ.

III. Үҙебеҙҙең республикала уҙғарылған ШОС һәм БРИКС саммиттары тураһында һөйләгеҙ.

**5.** Тексты тасуири уҡығыҙ.

## Яңы театр

Ап-аҡ төҫтәге зиннәтле мәрмәр әкиәт һарайының гүзәллегенән күҙҙәр ҡамаша, күккә олғашҡан сағыу йәшел көмбәҙҙәре әллә ҡайҙан үҙенә әйҙәй...

Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры бинаһы — меңдәрсә сәхнә һөйөүселәрҙең иң яратҡан урыны. Санкт-Петербургтан килгән тәжрибәле архитекторҙарҙың ижад емеше ул.

Хәҙер ул үҙенең икенсе йәшлеген кисерә тиһәк тә хата булмаç. Бинала бөгөн алты лифт эшләй, инвалидтар өсөн махсус пандустар ҙа бар. Былдай уңайлы ҡулайламалар әлегә Рәсәй театрҙарында юҡ.

Сәхнә лә өр-яңынан үҙгәртеп ҡоролған. Ундағы «күперсек»тәр өҫкә күтәрелә, аҫҡа төшә, хатта үҙ күсәрендә әйләнә ала. Сәхнә дискыһы ике яртышар түңәрәктән торған һымаҡ.

Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры киләсәктә лә тамашасыларын ҡыуандырасаҡ, яңынан-яңы үрҙәр яулаясаҡ әле.

*(«Башҡортостан календары»нан)*

**?**

1. Текстан терәк һүҙҙәрҙе айырып яҙығыҙ, аңлашылмаған һүҙҙәрҙе тәржемә итегеҙ.
2. Үҙегеҙ һайлап, өс һөйләмде күсереп яҙығыҙ.
3. Белгәндәрегеҙҙе һәм тексты ҡулланып, театр тураһында һөйләгеҙ.

**!!**

**6.** I. Түбәндәге терәк һүҙҙәрҙе файҙаланып, һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ. Һүҙбәйләнештәрҙең береһе өҫтәлмәлек булып килһен. Һуңынан тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатығыҙ.

Ул, Рәмилә инәй; унда, йәштәр йыйылған ерҙә; тауҙар артында, алыҫта; М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында; Башҡортостан Республикаһының милли музейында; Вадим, беҙҙең күрше малай; һигеҙенсе класс уҡыусылары, беҙ.

II. Өҫтәлмәлектәр ҡулланып, өс һөйләм уйлап яҙығыҙ.

**7.** Тексты тәржемә итегеҙ. «Салауат Юлаев» операһы тураһында һөйләгеҙ.

## Опера «Салават Юлаев»

Оперу о Салавате написал известный драматург, либреттист Баязит Бикбай и молодой композитор, студент консерватории Загир Исмагилов. Премьера оперы 15 апреля 1955 года стала крупным событием в музыкальной жизни республики. Это произведение

открыло новый, зрелый этап в развитии башкирской музыки, а его успешный показ на Декаде башкирского искусства в Москве выдвинул Исмагилова в ряды видных советских композиторов.

*(По Г. С. Галиной)*

**событие** — ваҡиға
**зрелый** — өлгөргән

1. Аңлатмалы һүҙлек ҡулланып, *опера* һүҙенә аңлатма бирегеҙ.
2. Ниндәй опера тыңлағанығыҙ бар?
3. Кем ул Заһир Исмәғилев?
4. Композиторҙарҙан кемдәрҙе беләһегеҙ?

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Тиң киҫәкле һөйләмдәр**

Члены предложения, которые обычно отвечают на один и тот же вопрос и связаны с одним и тем же словом, называются однородными.

Однородными могут быть любые члены предложения. Например: Кешене хеҙмәт **тәрбиәләй**, **сыныҡтыра**, рухи яҡтан **байыта**. — Труд **воспитывает**, **закаляет**, духовно **обогащает** человека.

**Тиң киҫәктәр эргәһендә тыныш билдәләре**

При однородных членах запятая ставится:

а) при бессоюзных однородных членах предложения: Яланда **аҡ**, **һары**, **зәңгәр** сәскәләр үҫә. — На лугу растут **белые**, **жёлтые**, **голубые** цветы.

б) перед противительными (ҡаршы ҡуйыу) и определительными (аныҡлау) союзами: Мин шул тиклем арығанмын, **хатта** сәй эсергә лә хәлем юҡ. — Я так сильно устала, **даже** нет сил попить чаю.

в) при повторяющихся собирательных (йыйыу) и разделительных (бүлеү) союзах: Йырҙарығыҙҙа тәрән хис **тә**, мөхәббәт **тә**, өмөт **тә** бар. — В ваших песнях есть **и** глубокие чувства, **и** любовь, **и** надежда.

При однородных членах запятая не ставится:

а) перед одиночным соединительным или разделительным союзом: Ул иртә торған **да** уҡып ултыра. — Он рано встал **и** читает.

б) перед союзом, который объединяет однородные члены в пары: Апайым **менән** мин, атайым **менән** әсәйем дә бер нәмә лә белмәнек. — **Ни** мы с сестрой, **ни** папа с мамой ничего не знали.

**8.** Схема буйынса һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ.

1. ——— ~~~~~~ --------- ═════.
2. –·–·–·– ~~~~~~, ~~~~~~ ——— ═════.
3. –·–·–·– ~~~~~~, ~~~~~~, ~~~~~~ ——— ═════.

**9.** Тексты уҡығыҙ. Нөктәләр урынына тейешле һүҙҙәрҙе тәржемә итеп ҡуйығыҙ.

## Музейҙар

Элек-электән кешеләр үҙҙәренә бик ҡәҙерле һәм иҫтәлекле булған әйберҙәрҙе туплай башлаған. Былдай коллекцияларҙы, ҡорал, китап һәм биҙәүес әйберҙәрҙе Боронғо Рустә монастырь һәм соборҙарҙа ... .

Ябай халыҡ ул хазиналарҙы ишетеп кенә белгән, сөнки былдай әйберҙәрҙе кешегә күрһәтмәгәндәр.

Рәсәйҙә беренсе музей (Кунсткамера) 1719 йылда Пётр I дәүерендә Петербургта ... .

Бөгөнгө көндә дәүләт ҡарамағында 120 тирәһе музей иҫәпләнә. Уларҙа 40 миллиондан ашыу картина, скульптура, ... һәм башҡа төрлө әйберҙәр тупланған.

Шулай уҡ халыҡ һәм мәктәп музейҙары эшләй. Уларҙың һаны ла меңдән артыҡ.

Төрлө музейҙар була: театр, музыка буйынса, археология, ботаника һ. б. Мәҫәлән, зоология музейҙарында хайуан һөлдәләре, күбәләк һәм бөжәк коллекциялары һаҡлана, геология музейҙарында тау тоҡомдары һәм минерал өлгөләре тупланған.

Мәскәүҙә Ҡыҙыл майҙанда Дәүләт тарих музейы ... . Уның залдарында халҡыбыҙҙың үткәнен һәм хәҙергеһен күрергә була.

Донъяла беренсе электр лампаһы, беренсе атом электростанцияһы, Ерҙең беренсе яһалма спутнигы... . Ғалимдар һәм инженерҙарҙың уйлап тапҡан техник ... политехник музейҙа күрергә була.

... картина һәм скульптуралар, ваза һәм гравюралар — Петербургтағы Эрмитажда һәм Рус музейында, А. С. Пушкин музейында һәм Мәскәүҙәге Третьяков галереяһында, илебеҙҙең башҡа музейҙарында һаҡлана.

Күренекле хөкүмәт эшмәкәрҙәренә, ғалим, яҙыусы, рәссам, композитор, артистарға арналған музейҙар ҙа бар.

*(«Мәктәп календары»нан)*

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *хранится, рукопись, открылся, хранили, достижения, расположен, драгоценные.*

**биҙәүес әйберҙәр** — украшения
**хазина** — сокровище, ценность
**дәүер** — *зд.:* во времена
**һөлдә** — скелет
**тоҡом** — *зд.:* порода

1. Нимә ул музей?
2. Бөгөн дәүләт ҡарамағында нисә музей бар?
3. Тарих музейында нимәләр күрергә була?
4. Текста тағы ла ниндәй музейҙар тураһында әйтелә?
5. Һүрәтләнгән музейҙарҙың ҡайһыһында булғанығыҙ бар?
6. Башҡортостан музейҙары хаҡында нимәләр беләһегеҙ? Уларҙың атамаларын дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ.

**10.** Һүҙҙәрҙән һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ.

Асылған, 1938 йылдың 14 декабрендә, Башҡорт дәүләт опера театры. Рус, барлыҡҡа килеүе, театрының, профессиональ, П. А. Соколовтың, менән, бәйләнгән, исеме. Уның труппаһы, беренсе тапҡыр, Өфөлә, 1841 йылда, рус классик драматургияһы, таныштыра, менән. «Ревизор», Н. В. Гоголдең, ҡуйылған, пьесаһы. 1938 йылдың 20 ғинуарында, асылған, Башҡорт дәүләт филармонияһы.

**11.** Тексты уҡығыҙ. Хәлдәр булған һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ, төрөн билдәләгеҙ. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәрҙе аңлатығыҙ. *Кем ул Арыҫлан Мөбәрәков?* тигән һорауға яуап бирегеҙ.

## Арыҫлан Мөбәрәков



СССР-ҙың халыҡ артисы Арыҫлан ағай Мөбәрәковты мин ауылда мәктәптә уҡыған саҡтарҙа ишетеп кенә белә инем.

Ә уның сәхнәлә уйнауын беренсе тапҡыр Өфө сәнғәт училищеһының тәүге курсында күрҙем. Әнғәм Атнабаевтың «Шоңҡар» спектаклендә Арыҫланбайҙы уйнағайны. Мине артистағы ҡеүәт, тауыш, тәбиғилек хайран ҡалдырҙы. Әйтерһең дә, сәхнәлә Арыҫланбай үҙе йөрөй. Шул көндән башлап миңә, артист-студентҡа, Арыҫлан ағай Мөбәрәковтың сәхнә тормошо һәр ваҡыт өлгө булып торҙо.

Икенсе курсты тамамлап, каникулға сыҡҡас, мине шул уҡ спектакль менән гастролгә алып киттеләр. Шатланып риза булдым.

Гастролдә инде мин оло артист һәм ҙур йөрәкле Кеше менән күҙмә-күҙ осраштым. Иң элек уның иҫ киткес ябай булыуы шаҡ ҡатырҙы.

Театрҙа эшләй башлағас та, миңә Мостай Кәримдең «Салауат» пьесаһындағы Салауат ролен бирҙеләр. Арыҫлан ағай Юлайҙы уйнарға тейеш. Әлбиттә, башта аптырап ҡалдым: Мөбәрәковтан һуң Салауатты уйнауҙы күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын ине. Сөнки күп тамашасылар күңелендә ул тыуҙырған Салауат һыны йәшәүен беләм. Шулай уҡ Арыҫлан ағайға тәбиғәт биргән һәләттәрҙең миндә булмауы ла асыҡ. Салауат образын унынса ҡабатлау ҙа ситен. Шуға күрә Арыҫлан ағай Салауатының да ҡайһы бер яҡтарын иҫтә тотоп, үҙемә хасыраҡ Салауатты тыуҙырырға тырыштым.

Эшләү мәлендә ул миңә ысын күңелдән ярҙам итте. Бер ваҡыт: «Һин, ҡустым, хәҙер сәхнәлә һәйбәт кенә йәшәйһең, тик шуны онотма: ваҡиға сәхнәлә генә бармай, шуға сәхнәгә тиклем ни булғанын да кәүҙәләндерергә кәрәк», — тине. Был бер генә миҫал, әммә минең өсөн ул мөһим һәм ҙур һабаҡ булды.

Минең менән тиҫтер башҡа артистар ҙа театрҙа Арыҫлан ағай Мөбәрәков кеүек талант эйәһе менән эшләү бәхетенә иреште, һәм беҙ ошо яҡтан үҙебеҙҙе сикһеҙ бәхетле һанайбыҙ.

*(Ә. Абушахманов иҫтәлектәренән)*

**ҡеүәт** — сила, мощь
**тәбиғилек** — естественность
**иҫ киткес** — удивительно
**һәләт** — способность
**ситен, сит** — затруднительно
**хас** — свойственный, присущий
**кәүҙәләндереү** — изображать

**12.** Тексты уҡығыҙ. Автор музыканы тыңларға өйрәнеү өсөн ниндәй кәңәштәр бирә? Яуаптарҙы башҡорт телендә яҙығыҙ.

## Как научиться слушать музыку

Музыка производит огромное впечатление на тех, кто умеет её слушать. Чтобы получить о музыке достаточно широкое представление, надо чаще слушать её. На что обращать внимание, когда слушаешь музыку? Прежде всего нужно представить содержание, так как музыка по-своему передаёт разнообразные явления жизни, чувства людей, их переживания, настроения. Чтобы воплотить свой замысел в музыкальном образе, композитор использует разнообразные выразительные средства. Чем больше слушатель узнаёт музыку, тем богаче и тоньше становится его художественный вкус. Углублённому пониманию музыки помогает участие в хоре, в музыкальном кружке, особенно самостоятельное исполнение музыкальных произведений на каком-нибудь музыкальном инструменте.

*(По Н. Гродзенскому)*

**впечатление** — тәьҫорат
**представление** — күҙаллау
**разнообразные** — төрлө
**явления** — *зд.:* мәлдәр
**чувство** — хис
**переживание** — уй-кисереш
**настроение** — кәйеф
**замысел** — уй, ниәт
**углублённый** — төптән

тамаша
алҡыштар
ваҡиға
шаршау
тәнәфес
һәүәҫкәр
үҙешмәкәр
күренеш
башҡарыусы

**13.** Һөйләмдәрҙе тулыландырып яҙығыҙ. Үҙегеҙ ике һөйләм уйлағыҙ.

Мин опера һәм балет театрына йөрөргә ... . Иң оҡшаған әҫәр — ... . Миңә бигерәк тә ... ҡарау оҡшай. Яратҡан актёрҙарым: ... . Һуңғы тапҡыр ... театрында булдым. Беҙ унда ... спектаклен ҡараныҡ ... .




**14.** Өҫтәлмә сығанаҡтар ҡулланып, мәҙәни усаҡтарҙың береһе тураһында белешмә яҙығыҙ.

1. Башҡорт дәүләт опера театры тураһында;
2. Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры тураһында;
3. Үҙегеҙгә оҡшаған республика йә район (ҡала) кимәлендәге мәҙәниәт һарайы тураһында.

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Мәҫәл (басня)** — драматик композициялы, өгөт-нәсихәтле һәм аллегорик характерҙағы ҡыҫҡа эпик әҫәр. Образдар системаһы яғынан ул бөтә әҙәби жанрҙар араһында айырым урын тота: уның геройҙары булып кешеләр түгел, ә хайуандар һәм әйберҙәр йөрөй.

**15.** Мәҫәлде тасуири уҡығыҙ. Уның йөкмәткеһен нисек аңланығыҙ? Унда ниндәй проблема күтәрелгән? Һөйләгеҙ.

## Ике себен

Бер үгеҙ көн буйына һөрөп һабан,
Ауылға ҡайтып килә киҫкә табан.
Үгеҙҙең мөгөҙөнә ҡунып килгән
Бер себенгә бер танышы осраны.

Танышы шул ваҡытта быны күрҙе —
Килә был һабан һөргән үгеҙ менән,
«Күҙемә күренмәнең көн буйынса,
Ҡайҙан ҡайтып киләһең һин?» — тип һораған.

Теге себен, эреләнеп, быға ҡарап,
Ҙурланып, тамаҡ ҡырып, бирҙе яуап:
«Көн буйы һабан һөрөп, арып киләм,
Ваҡытһыҙ йөрөмә әле бимазалап!»

Һөйләшһәң себен төҫлө кеше менән,
Маҡтаныр эшләмәгән эше менән.
Көн күргән кешеләр күп был донъяла,
Себен кеүек, башҡаларҙың көсө менән.

*(М. Ғафури)*

| |
|---|
| иҫ киткес |
| танылған |
| һәләт |
| ҡеүәт |
| ҡәүҙәләндереү |
| сәхнә |
| тәбиғилек |

**16.** Текста нөктәләр урынына бирелгән һүҙҙәрҙең кәрәклеһен тәржемә итеп, өҫтәп яҙығыҙ. Нурия Ирсаева тураһындағы белешмәне тулыландырып яҙығыҙ.

## Нурия Ирсаева

Нурия Исхаҡ ҡыҙы Ирсаева Миәкә районының Ҡанбәк ауылында ... . Ул башҡорт мәҙәниәте күгендә балҡыған сағыу йондоҙҙарыбыҙҙың береһе, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисткаһы.

Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрындағы ... ... С. Кайтовтың «Балаларым минең» пьесаһындағы



Вера ине. Унан һуң ижад иткән күп ролдәре, уның моңло тауышы менән бергә үрелеп, тамашасы хәтерендә бары тик «Нурия Ирсаева роле» ... ... .

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *остались, первая роль, родилась.*

**17.** «Театрҙа» исемле диалог төҙөгөҙ.

**18.** Тексты тасуири уҡығыҙ. Йәйәләр эсендәге һүҙҙәрҙе тәржемә итеп яҙығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ.

## Балҡы, «Нур»!

«Нур» театры 1912 йылда Өфөлә (знаменитая артистка) һәм режиссер Сәхипьямал Ғиззәтуллина-Волжская тарафынан ойоштором. Әммә Граждандар һуғышы башланыу сәбәпле, 1918 йылда ул үҙенең эшен туҡтатырға мәжбүр була.

Ләкин «Нур» һүнмәй: 1971 йылдан һуң Өфө ҡала Советы башҡарма комитеты «Нур» татар театр студияһы асыу хаҡында ҡарар ҡабул итә. 1989 йылда ул яңынан ҡабынып (возобновляет работу).

Ошо студия нигеҙендә төҙөлгән Өфө «Нур» татар дәүләт театры 1992 йылда тәүге сезонын аса. 2000 йылдың 12 июнендә театрҙың (новый) бинаһын асыу (торжество) була.

Йәшәйешебеҙҙең яңыса үҙгәртеп ҡороу емештәренең береһе — халҡыбыҙға рухи аҙыҡ өләшеүсе Өфө «Нур» татар дәүләт

театры республикабыҙҙың (национальный) сәнғәт һөйөүселәрен яңынан-яңы спектаклдәре менән шатландырып тора. Бай (творческий) репертуары, тамашасылар күңелен яулап өлгөргән һәләтле актёрҙары арҡаһында театрҙың абруйы ҙур — ул Башҡортостанда ғына түгел, бөтә Рәсәйҙә (известный). Театр коллективы үҙенең (творческий) уңыштары менән күңелдәребеҙҙе нурлап йәшәй.

*(Ф. Латипованан)*

**19.** I. Берәй пейзажды һүрәтләп картина эшләгеҙ һәм уны тасуирлап яҙығыҙ.

II. Пейзаж һүрәтләнгән берәй картинаны йә һүрәтте тасуирлап яҙығыҙ.

**20.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ һәм һүҙлектәр ярҙамында мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

## Фәйзи Ғәскәров

Ул бөтәһен көрәш менән алды,
Ҡаты көрәш менән яуланы.
Бейеүҙәрҙе ут-ялҡындан һыҡты,
Үҙенән дә шулай дауланы.
Был эшенең үлмәҫ киләсәген
Нисек белде икән Ғәскәров?
Донъя буйлап йөрәктәрҙе яулай
Башҡорттарҙың бейеү ғәскәре!

*(И. Кинйәбулатов)*

1. Өҫтәлмә сығанаҡтар ҡулланып, Фәйзи Ғәскәров һәм уның бейеү ансамбле тураһында һөйләгеҙ.
2. Шиғырҙа һүҙ нимә тураһында бара? Һөйләгеҙ.
3. Был ансамблдең ниндәй бейеүҙәрен беләһегеҙ? Өфө ҡалаһында ансамблгә бәйле ниндәй һәйкәл асылды һәм ҡасан?

**21.** Тексты тәржемә итегеҙ. Кем ул Әмин Зөбәйеров? Уның тураһында иң кәрәкле мәғлүмәтте һайлап алып, дәфтәрегеҙгә башҡорт телендә яҙығыҙ.

## Амин Зубаиров

Амин Зубаиров — один из выдающихся деятелей башкирской сцены. Родился в деревне Ишлы Аургазинского района. Учился в уфимских медресе «Гусмания», «Галия», принимал участие в любительских спектаклях. Профессиональная работа началась в театрах «Сайяр» (1911—1913) и «Нур» (1914). После Октябрьской революции 1917 года работал организатором драмкружков в частях Красной Армии и клубах Уфы. С 1922 года творческая жизнь Амина

Зубаирова прошла в Башкирском государственном академическом театре драмы имени Мажита Гафури.

Амин Зубаиров в основном играл комедийные роли. Это — образы Ходжи Насретдина в одноименной пьесе Наки Исанбета, Хайруша в пьесе Хабибуллы Ибрагимова «Башмачки», Щукаря в спектакле по роману Михаила Шолохова «Поднятая целина».

Амин Зубаиров снимался в кинофильме «Салават Юлаев», где исполнил роль Айтугана.

Награждён орденом Ленина и двумя орденами Трудового Красного Знамени. Имел почётные звания «Народный артист БАССР» (1935) и «Народный артист РСФСР» (1949).

*(По Г. С. Галиной)*

**22.** Үҙегеҙгә оҡшаған теманы һайлап алып, Башҡортостан мәҙәниәте тураһында әңгәмә үткәрегеҙ.

1. Башҡортостан театрҙары.
2. Йыр сәнғәте.
3. Бейеү сәнғәте.
4. Әҙәбиәт.
5. Музыка.
6. Һынлы сәнғәт.

мәшһүр
тантана
милли
уңыш
алҡыштар
тамашасы

**23.** Йәйәләрҙе асып, тексты күсереп яҙығыҙ. Бер-берегеҙҙең эшен тикшерегеҙ һәм баһалағыҙ.

Хөсәйен Кудашев сәхнә серҙәренә төшөнөүҙе башҡорт театры эргәһендәге актёрҙар студияһында уҡыу(ҙан, ҙы, ға) башлай. Студияны уңышлы тамамлағас, П. И. Чайковский исемендәге Мәскәү дәүләт консерваторияһының вокал бүлеге(нә, ндә) белем ала. Йәш талант Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрын(ан, да) эш башлай. 1934 йылда Башҡорт академия драма театр(ға, ына) күсә.

Традицион музыкаль пьесалар(ҙа, ға, ҙан) Хөсәйен Кудашев төп ролдәрҙе башҡара: «Башмағым»да — Ғәлимйән, «Ҡара йөҙҙәр»ҙә — Закир, «Тальян гармун»да — Илдар. Йылдар үтеү менән, актёр күберәк ҡатмарлы рухи донъялы, тәрән мәғәнәле образдар(ҙы, ҙан) үҙ итә.

Шулай ҙа актёр(ға, ҙың, ҙа) иң юғары ижад кимәле булып Н. Асанбаевтың «Ҡыҙыл паша» драмаһындағы король Йәғәфәр образы һанала.

Башҡортостандың халыҡ артисы Хөсәйен Кудашев ижад иткән Тригорин, Астров, Волгин образдары ла тамашасылар хәтере(ндә, нән) оҙаҡ юйылмағандыр.

*(«Башҡортостан календары»нан)*

# Халыҡ ижады — халыҡ хазинаһы

**1.** Тексты тасуири уҡығыҙ.

Халыҡ ижады бик боронғо замандарҙа уҡ барлыҡҡа килгән. Ул телдән һөйләү, хәтерҙә һаҡлау, отоп алыу рәүешендә йәшәгән. Халыҡ ижады әҫәрҙәрен боронғо һүҙ оҫталары — сәсәндәр, йырсылар, ҡобайырсылар уйлап сығарған. Халыҡ ижады күп төрлө. Уларҙы халыҡ отоп алған, йыр итеп йырлаған, әкиәт итеп һөйләгән. Телдән телгә, быуындан быуынға күсә-күсә, ул йыр, әкиәт, ҡобайыр, легенда, таҡмаҡ, йомаҡ, мәҡәл, әйтемдәрҙең күбеһе тағы ла яҡшыра, камиллаша барған. Уларҙы уйлап сығарған һүҙ оҫталарының исемдәре онотолоп, әҫәрҙәре генә халыҡ хәтерендә ҡалған.

Тимәк, телдән башҡарыла торған әҫәрҙәрҙе камиллаштырыуҙа күмәк кеше, тотош халыҡ ҡатнашҡан. Уларҙа халыҡ боронғо хәлдәрҙе лә, бөгөнгөһөн дә, яҡты киләсәк тураһындағы хыял һәм өмөттәрен дә сағылдырған. Был әҫәрҙәрҙә халыҡтың донъяға ҡарашы ла әйтелә: тормоштоң матурлығы данлана, кәмселектәре фашлана, ғәҙеллек хуплана.

Халыҡ ижадын халыҡтың яҙылмаған тарихы, тормош фәлсәфәһе тип баһаларға ла була.

*(Ә. Сөләймәнов)*

**уйлап сығар/ырға** — придумать, выдумать
**телдән телгә** — из уст в уста
**быуындан быуынға** — из поколения в поколение
**телдән** — устно, на словах
**от/орға, отоп ал/ырға** — *зд.* усваивать, запоминать
**камиллаш/ырға** — усовершенствоваться
**фәлсәфә** — философия
**донъяға ҡараш** — взгляд на жизнь

1. Нимә ул халыҡ ижады?
2. Халыҡ ижадының ниндәй жанрҙарын беләһегеҙ? Уларға нимәләр инә?
3. Халыҡ ижадын кемдәр барлыҡҡа килтергән?
4. Халыҡ ижады әҫәрҙәре бөгөнгө көнгә тиклем нисек килеп еткән?
5. Ни өсөн халыҡ ижадын «халыҡтың яҙылмаған тарихы», «тормош фәлсәфәһе» тип атарға мөмкин?
6. Һеҙ үҙегеҙ ниндәй әкиәт, легенда беләһегеҙ?
7. Олатай-өләсәйҙәрегеҙҙән үҙегеҙҙең яҡтағы географик атамаларға бәйле легендаларҙы һорашып, яҙып алығыҙ.
8. Тексттың йөкмәткеһен һөйләгеҙ.

**2.** Мәҡәлдәрҙе рус телендәге варианттары менән бергә күсереп яҙығыҙ. Аҫтына һыҙылған мәҡәлдең мәғәнәһен аңлатығыҙ.

1. Ағасты — япраҡ, кешене хеҙмәт биҙәй.
2. Алда булһа ҙур теләк, эштән ял таба йөрәк.
3. Ат — тешенән, егет эшенән билдәле.

4. Башланған эш — бөткән эш.
5. Кем эшләмәй, шул ашамай.

1. Лиха беда начало.
2. Кто не работает, тот не ест.
3. Не тот хорош, кто лицом пригож, а тот хорош, кто для дела гож.
4. Дерево красно плодами, человек делами.
5. Где хотенье, там и уменье.

**3.** Тексты тасуири уҡығыҙ.

## Торнаның күҙ йәше

Бала саҡ. Яҡтыкүлдә һыу инәбеҙ. Күл буйында ултырған тимерлектән килеп сыҡҡан ағай түбән генә осҡан парлы торнаның береһенә атты. Торна сәбәләнә-сәбәләнә ергә килеп төштө. Беҙ сыр-сыу килеп торна ҡолап төшкән ергә йүгерҙек. Яраланған торна ҡанаттарын ҡағып маташа, аяҡтары артҡа ҡайырылып сыҡҡан, оҙон муйыны, башын күтәрә алмай, ергә һалынып төшкән. Ҙур йомро күҙҙәренән йәш аға. Торна, йән бирә алмай, оҙаҡ аҙапланып ятты ла, күҙҙәрен дә йоммай, хәрәкәтһеҙ ҡатып ҡалды. Халыҡ йыйылып китте. Шул саҡ уларҙың баш осонан ғына яңғыҙ ҡалған торна осоп китте. Ошо хәл бер нисә тапҡыр ҡабатланды. Иптәшен юғалтҡан яңғыҙ торна мәйет өҫтөнән генә оса ла йән тетрәткес итеп ҡысҡырып ҡуя. Бәхилләшеүе булғандыр инде, бахырҙың.

Был ваҡиғаға бик күп йылдар үтте. Ләкин ул иҫкә төшкән һайын, үлеп барған торнаның күҙҙәренән тамған йәштәр йөрәгемдә өтөп ала.

*(«Киске Өфө» газетаһынан)*

**тимерлек** — кузница
**ҡолап төшөү** — падать
**һалынып төшөү** — отвиснуть, повиснуть
**йомро** — круглый
**йән биреү** — умереть
**хәрәкәтһеҙ** — без движения
**баш осонан** — над головой
**мәйет** — труп
**йән тетрәткес итеп** — жалобно
**бәхилләшеү** — прощание
**ваҡиға** — событие

1. Текст ни өсөн «Торнаның күҙ йәше» тип атала?
2. Тексты уҡып сыҡҡандан һуң һеҙҙең күңелегеҙҙә ниндәй хистәр тыуҙы?
3. Текст буйынса бер-берегеҙгә һорауҙар бирегеҙ.
4. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ.

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Ҡобайыр** — *ҡоба* һәм *йыр* һүҙҙәренән алынған, маҡтау, данлау йыры тигән мәғәнә аңлатыусы термин.

Ҡобайыр — башҡорт халыҡ тормошон киң күләмдә ҡаһарман образдар аша һүрәтләүсе, халыҡтың уй-тойғоларын, ҡараштарын, йолаларын, көнкүрешен тәрән яҡтыртыусы, ҙур эволюция этабын үткән боронғо поэтик жанр.

**4.** «Урал батыр» эпосы тураһында яҙылғандар менән танышығыҙ. Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

Башҡорт халҡының бөтә донъяға билдәле эпостарының береһе — «Урал батыр». Уны 1919 йылда хәҙерге Баймаҡ районы Иҙрис ауылында йәшәүсе Ғәбит Арғынбаев (1856—1921) һәм II Этҡол ауылында йәшәүсе Хәмит Әлмөхәмәтов (1861—1923) сәсәндәрҙән Мөхәмәтша Буранғолов яҙып алған.

«Урал батыр» эпосынан башҡа башҡорт халҡының «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Ҡуңыр буға», «Алпамыша менән Барсынһылыу», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Аҡбуҙат», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Күсәк бей» һәм башҡа эпостары ла бар.

*(С. Галиндан)*

**Беләһегеҙме?**

«Урал батыр» эпосы бынан 4 мең йылдан ашыу элек ижад ителгән. Ул 4576 поэтик юлдан тора.

**5.** Тексты уҡығыҙ.

## «Урал батыр» эпосы тураһында

«Урал батыр» — башҡорт халыҡ эпостарының иң ҙуры һәм иң күренеклеһе. Ул композиция яғынан өс быуын батырҙары хаҡында һөйләй, өс өлөштән тора.

Эпоста тәүҙә бөтә донъяны һыу баҫыу, иң тәүге кешеләр — Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡ, уларҙың Урал менән Шүлгән исемле улдарының донъяға килеүе тураһында әйтелә. Урал бик тыңлаусан, тәрбиәле, ә Шүлгән үҙ һүҙле, көнсөл бала булған, ти.

Улар егет булып еткәс, ата-әсәһенән рөхсәт һорап, ил күреп ҡайтырға, йәнлектәрҙе, кешеләрҙе үлтереүсе әжәлде табып юҡ итергә, кешене мәңге үлемһеҙ итер Йәншишмә һыуын эҙләп табырға сығып китә.

Бер юл сатында улар йәрәбә һалыша. Йәрәбә буйынса Урал һул яҡҡа китергә тейеш булһа ла, ағаһы Шүлгәндең баш тартыуы арҡаһында, Урал уң яҡҡа — Ҡатил батша иленә китергә мәжбүр була.

Урал батыр яуыз, ҡанескес Ҡатил ханды һәм йыландар батшаһы Ҡәһҡәһәнең батшалығын ҡыйрата; ер аҫты һәм һыу аҫты батшаһы Әзрәҡәне үлтерә; яуызлыҡ юлына баҫҡан туғаны Шүлгән менән алыша.

Эпостың 3-сө бүлегендә Урал менән Шүлгәндең улдары тыуыуы һәм уларҙың, дейеүҙәр менән алышып, Йәншишмәне эҙләп табыуы һүрәтләнә. Урал батыр Йәншишмәнең тереклек һыуын тирә-яҡҡа бөркөп, тәбиғәтте, Урал буйҙарын мәңге йәшел, йәнле итә.

Урал батыр үлеп ҡала. Батырҙың кәүҙәһе башҡорттарҙың төйәген кәүҙәләндереүсе Уралтауға әүерелә. Эпоста халыҡтың мәңгелеге хаҡындағы идея сағылған.

Урал батыр үҙенең төп йәшәү маҡсаты хаҡында былай ти:

Атым Урал булғанда,
Затым кешенән булып,
Был донъяға тыуғанда,
Кешегә ярҙам итермен,
Илем байман итермен,
Кешегә ярҙам итермен,
Барын тар-мар итермен.
Мин күренмәҫ әжәлде
Юҡ итергә сыҡҡанмын,
Ҡан эсеүсе батшанан,
Кеше ашар дейеүҙән
Бар кешене ҡотҡарыу,
Йәншишмәнән һыу алып,
Үлгәндәрҙе терелтеү
Өсөн тыуған батырмын.

*(Ш. Шәкүрова, Ә. Сөләймәнов)*

**сығып кит/ергә** — отправляться
**эҙләп таб/ырға** — найти
**йәрәбә һал/ырға** — бросать жребий
**тыңлаусан** — послушный
**китергә мәжбүр була** — вынужден был отправиться
**байман** — *устар.:* богатство, богатый
**ҡанескес** — кровопийца
**кәүҙәләндереүсе** — воплощающий, представляющий
**зат** — род
**йәшәү маҡсаты** — цель жизни

1. «Урал батыр» эпосы нимә тураһында?
2. Урал батыр үҙенең йәшәү маҡсатын нисек аңлата?
3. «Урал батыр» эпосы тураһында белгәндәрегеҙҙе һөйләгеҙ.
4. Республикала «Урал батыр» эпосына арналған ниндәй саралар үтә?

**Беләһегеҙме?**

Ҡырғыҙ халҡының Манас тураһындағы эпосы донъялағы иң ҙур поэма иҫәпләнә. Ул китап булып 1958 йылда баҫылып сыға. Эпос 500 мең юлдан тора.

**6.** Ребуста нимә йәшеренгән? Аңлатығыҙ.




**7.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ. Башҡорт халыҡ ижады жанры буларак, мәҡәлдәр тураһында белгәндәрегеҙҙе һөйләгеҙ. Өс мәҡәл өҫтәп яҙығыҙ.

1. Яҙғы боҙға ярҙай булһа ла ышанма.
2. Яҙҙың бер көнө йылды туйҙыра.
3. Яҙғы ҡарҙы ямғыр йыуа.
4. Ямғыр яуһа — ер ырыҫы, яҡшы бала тыуһа — ил ырыҫы.

**8.** Тексты тасуири уҡығыҙ. Башҡорт халыҡ ижадының ниндәй жанры тураһында һүҙ бара? Нөктәләр урынына ул һүҙҙе тейешле формала ҡуйып уҡығыҙ.

... — халыҡтың күңелендә быуаттар буйына һаҡланып килгән гүзәл поэтик хазина ул. ... беҙ халыҡта булып үткән иң мөһим, иң күренекле ваҡиғаларҙың поэтик йылъяҙмаһын, халыҡ тормошоноң, йолаларының төрлө яҡлап сағылышын, уның эстетик һәм философик ҡараштарының кәүҙәләнешен күрәбеҙ. ... халыҡ үҙенең Тыуған илен, батырҙарын данлай, шатлығын һәм ҡайғы-хәсрәтен уртаҡлаша, мөхәббәтен данлай.

*(С. Галиндан)*

**9.** Р. Нурмөхәмәтовтың «Чехов Башҡортостанда» картинаһын һәм тексты ҡулланып, башҡорт телендә текст төҙөп яҙығыҙ.

Башкирский кумыс с давних времён считается ценным пищевым продуктом, кроме того, обладает высокими целебными свойствами. Он применяется при лечении больных туберкулёзом и некоторыми другими заболеваниями.

В мае 1890 года была открыта первая в Башкортостане кумысолечебница в поселке Аксаково. Несколько позже такая

лечебница была открыта в 5 километрах от станции Глуховская. С 1892 года начинает строиться и действовать большая группа санаториев вокруг станции Шафраново. В 1898 году открыт Андреевский санаторий.

Андреевский санаторий стал знаменитым после посещения его великим русским писателем А. П. Чеховым.

Врачи посоветовали ему из-за резкого ухудшения здоровья немедленно ехать на кумысолечение в Башкортостан. Весной 1901 года он приезжает в санаторий. Чехов хорошо переносил кумыс и пил его до четырёх бутылок в день.

Интерес к кумысолечению не ослабевает до сих пор. Многие лечившиеся в санаториях и на курортах больные с благодарностью отмечают целебное действие кумыса.

*(По А. Г. Шамаеву)*

**10.** Һорауҙар ярҙамында диалогтар төҙөгөҙ, белгәндәрегеҙҙе иҫкә төшөрөгөҙ.

1. — Нимә ул ҡобайыр?
— ...
— «Урал батыр» ҡобайырын уҡығанығыҙ бармы?
— ...
— Унда нимә тураһында һүҙ бара?
— ...
— Төп геройҙары кем?
— ...
— «Урал батыр» ҡобайыры тураһында нимәләр өҫтәп әйтер инегеҙ?
— ...

2. — «Урал батыр» ҡобайырын уҡығанығыҙ бармы?
— ...
— Төп геройҙарҙың исемдәре кем?
— ...
— Шүлгән тураһында нимәләр әйтә алаһығыҙ?
— ...
— Уралды нисек итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ?
— ...

**11.** Тексты уҡығыҙ. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе яҙып алып, тәржемә итегеҙ.

По древнему обычаю каждый башкир должен знать своих предков до седьмого колена, хранить в памяти родословную своего рода — шежере. В древнейшей истории моей нации, восходящей не только к семи, а к семидесяти поколениям, предстают **крупнейшие и грозные события.** Наш **гордый Урал, задумчивая Агидель, величавые горы, раздольные степи** на протяжении веков были свидетелями этих событий. Наши **меткие пословицы, пла-**

**менные кубаиры, волшебные сказки, чарующие песни, величавые эпосы-дастаны, рукописные и печатные книги** из поколения в поколение передавали и донесли до наших дней **заветные мечты, надежды и устремления, глубокий и богатый исторический опыт** башкирской нации.

*(По Р. Бикбаеву)*

1. Текстың төп темаһын билдәләгеҙ.
2. Ҡалын хәрефтәр менән яҙылған һүҙбәйләнештәрҙе тәржемә итеп, дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ.
3. Текстың йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләгеҙ.

**12.** Тексты уҡығыҙ. *Шәжәрә* һүҙен тейешле формала ҡуйып, күсереп яҙығыҙ.

... — ырыу тарихының йылъяҙмаһы. Башҡорттарҙа борон-борондан үҙенең ырыу шәжәрәһен яҙыу һәм уны һаҡлау йолаһы йәшәгән.

... ырыуҙың ирҙәр һаны ғына индерелгән һәм ... белеү талап ителгән. Нәҫел-ырыу тураһындағы мәғлүмәттәр ныҡлы һаҡланылған, быуындан быуынға аманат рәүешендә ҡалдырыла килгән. Үҙеңдең ... белеү ғәҙәте башҡорттарҙа бик оҙаҡ ваҡыт һаҡланып килгән. Нәҫелде 7 быуынға тиклем белеү ғәҙәти хәл булған, ата-бабаларҙан 10—12 быуынды белеүселәр ҙә осраған.

Бөгөнгө көндә 25 башҡорт ... ташҡа баҫылған. Улар араһында йөкмәткеләренең бай һәм тарихи факттар менән нығытылғандары яғынан юрматы, бөрйән, үҫәргән, ҡыпсаҡ, меңле ырыуҙарының ... билдәләргә мөмкин.

Халыҡ тарихын өйрәнеүҙә ... әһәмиәте ҙур. Һәр бер ырыу тарихының нигеҙендә ... ята. Ә инде ырыу тарихы халыҡ тарихын тәшкил итә. Тимәк, башҡорт халҡының ... белеү өсөн уның ырыуҙар тарихын өйрәнергә кәрәк.

*(Р. Янғужиндан)*

**13.** Түбәндә яҙылған һүҙҙәргә баҫым ҡуйығыҙ, тәржемә итегеҙ. Өс һөйләм уйлап яҙығыҙ.

| | |
|---|---|
| алма | алма |
| баҫма | баҫма |
| бүлмә | бүлмә |
| һалма | һалма |
| тартма | тартма |
| япма | япма |

**14.** Тексты уҡығыҙ. *Народ* һүҙен тәржемә итеп, нөктәләр урынына тейешле формала ҡуйып, күсереп яҙығыҙ. М. Горький әйткән һүҙҙәрҙе ятлағыҙ.

Бөйөк яҙыусы Максим Горький: «... ауыҙ-тел ижадын белмәй тороп, хеҙмәтсән ... ысын тарихын белеп булмай. ... — бөтә бөйөк

драмаларҙы, Ер шарындағы иң гүзәл трагедияларҙы — бөтә донъя мәҙәниәтенең тарихын барлыҡҡа килтереүсе шағир һәм философ ул», — тигән.

**15.** Көләмәсте ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Нимә ул көләмәс?

## Хан менән Алдар

Бер хан атҡа атланып ҡайҙалыр китеп барғанда, Алдарға тап була. Хан, атын туҡтатып:

— Эй, Алдар, һине хәйләгә бик оҫта кеше, тиҙәр. Улай үтә аҡыллы баш булһаң, бына мине атымдан төшөр! — ти.

Алдар:

— Атыңдан төшөрөүен төшөрә алмам, бына ерҙә булһаң, эйәреңә мендереп ултырта алыр инем, — ти.

Хан:

— Ҡарап ҡарайыҡ, — тип, эйәренән төшә лә, — йә, кире мендереп ултырт инде! — ти.

— Сабыр ит, ханым, төшөр тинең, төшөрҙөм. Ваҡыты еткәс, мендерермен дә! — ти.

Шунан хан, үҙенең алданғанын аңлап, ҡыҙарынып-бүртенеп эйәренә менеп ултыра һала. Шул саҡ Алдар:

— Бына хәҙер атыңа атландырҙым да инде! — ти.

Көлкөгә ҡалған хан асыуынан атын һуҡтыра-һуҡтыра сабып китә.

**16.** Һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ итеп уҡығыҙ. Тәржемә итегеҙ. Һүҙлек диктантына әҙерләнегеҙ.

башҡорт халыҡ ижады, башҡорт халыҡ әкиәттәре, әҫәр, йөкмәтке, батырҙар тураһында әкиәттәр, батырлыҡ, ҡобайыр, таҡмаҡ, башҡорт халыҡ йыры, көй, оҙон көй, мәҡәл, йомаҡ, гәҙел, гәҙеллек, тырышлыҡ, ҡыйыу, батыр, ҡыйыулыҡ, көс, үҙенсәлекле, онотолмай, хәтер, уҡырға, хәтерләргә, белергә

**17.** Йырҙы тасуири уҡығыҙ.

## Йәмле Ағиҙел буйҙары

(Халыҡ йыры)

Ағиҙелкәй ҡайҙа, ай, туғайҙа,
Ағиҙелкәй кеүек һыу ҡайҙа,
Ағиҙелкәйҙәрҙең, ай, һауаһы
Йәнгә рәхәт, тәнгә ҙур файҙа.

*Ҡушымта:* Йәмле Ағиҙел буйҙары ла
Бөтөрәлер хәсрәтле уйҙарҙы шул,
Бөтөрәлер хәсрәтле уйҙарҙы.

Ағиҙелкәйҙәрҙең, ай, буйында
Һандуғастар һайрай муйылда.
Иҙел һыуы эскән ир-егеттәр
Яман теләк йөрөтмәҫ уйында.

*Ҡушымта:* Йәмле Ағиҙел буйҙары ла
Бөтөрәлер хәсрәтле уйҙарҙы шул,
Бөтөрәлер хәсрәтле уйҙарҙы.

Ағиҙелкәй һыуы, ай, тын икән,
Яр ситтәре бигерәк ҡомло икән.
Ағиҙелдә үҫкән, ай, ҡыҙҙарҙың
Тауыштары бигерәк моңло икән.

*Ҡушымта:* Йәмле Ағиҙел буйҙары ла
Бөтөрәлер хәсрәтле уйҙарҙы шул,
Бөтөрәлер хәсрәтле уйҙарҙы.

**файҙа** — польза
**хәсрәтле** — горестный
**ҡом** — песок

1. Халыҡ Ағиҙел йылғаһының ниндәй сифаттарын маҡтай?
2. Был йыр менән халыҡ тыңлаусыларға нимә әйтергә теләй?
3. Һеҙ Ағиҙел йылғаһы тураһында нимәләр өҫтәп әйтер инегеҙ?
4. Һеҙ йәшәгән урында ниндәй йылғалар бар?



*Сәғит Агиш (Сәғит Ишмөхәмәт улы Агишев) 1905 йылда Ырымбур өлкәһенең Иҫәнгилде ауылында тыуған.*

*Тәүҙә үҙ ауылында, унан Ырымбурҙың «Хөсәйениә» мәҙрәсәһендә, педагогия техникумында белем ала. 1924 йылда Өфөгә килә. 1925 йылда «Башҡортостан йәштәре» газетаһына секретарь итеп эшкә алына. Ике йыл Башҡорт дәүләт педагогия институтының киске бүлегендә уҡығас, Сермән, Дәүләкән педагогия училищеларында башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡыта. 1943 йылда Өфөгә ҡайта, Министрҙар Советы эргәһендәге сәнғәт эштәре идаралығында инспектор, Яҙыусылар союзында әҙәби консультант, ә 1949—1951 йылдарҙа «Әҙәби Башҡортостан» журналының редакторы булып эшләй.*

*Башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүҙәге ҙур хеҙмәттәре өсөн ул Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ һәм «Почёт Билдәһе» ордендары менән наградлана.*

*Сәғит Агиш тәүҙә шиғырҙар яҙа, 1928 йылда «Беҙҙең көләү» исемле китабы сыға. 1933 йылда сыҡҡан «Шартына килһен» тигән хикәйәләр йыйынтығы уның ысын әҙәби уңышы була. Ул «Мәхмүтов», «Егеттәр», «Мәзин йортонда», «Тәүге дәрестәр», «Яҡташтар» повестарын, «Нигеҙ» романын ижад итә.*

*Уға республиканың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы бирелә.*

## Ҡунаҡ ашы

Иван менән Марфа Ҡотлобайҙарҙы ҡунаҡҡа саҡырырға булды. Ниндәй башҡорт ашы бешереп саҡырыу тураһында баш ваттылар.

Иван әбейенә:

— Ни эшләйбеҙ? Бауырһаҡ, ҡабартма, табикмәк, ҡоймаҡ-маҙар әҙерләп саҡырабыҙмы? — тине.

Марфа бик оҙаҡ уйлап торҙо. Башҡорт өйҙәрендә күргән ашамлыҡтарҙы һанап сыҡты. Күбек майҙы ла, ҡош телен дә, самбусаһын, муйыллы майын, ҡоротон да, ҡағын да — бөтәһен дә һанап сыҡты. Ит ашына күсеп ҡуллама, тауыҡ тултырыуҙы ла күҙ алдына ҡуйҙы.

Иван:

— Булды, ҡарсыҡ, теге колбаса һымаҡ нәмә бар бит әле? Ярма, май, үпкә-бауыр ҡушып бешерәһең.

— Ә-ә, тултырманы әйтәһеңме?

— Эйе, эйе, тап үҙе. Улар беҙҙә бар бит.

Марфа шунда уҡ эшкә кереште. Иван өйҙө башҡортса итеп йыйыштырырға тырышты. Ашъяулыҡ, мендәр әҙерләне. Күпмелер торғас, бабай ҡапҡа төбөнә сыҡты. Ҡотлобай менән Сәбилә аллы-артлы килә яталар ине. Иван уларҙы ҡаршы барып алды. Йылы өйгә инделәр. Марфа ҡаҙан янында тора ине. Ул ҡунаҡтарҙы асыҡ йөҙ менән сәләмләне:

— Әйҙәгеҙ, түрҙән уҙығыҙ!

Иван был ил ғәҙәттәрен үҙләштереп еткәнлеген әйтергә ашыҡты:

— Мин, Ҡотлобай дуҫ, башҡорттар шулай итә тип, һеҙҙе саҡырырға барманым. Бер ҡыҙ ебәрҙем. Дөрөҫ эшләгәнменме?

— Уныһы уның дөрөҫ. Бала ебәреү ярай ул. Ләкин хата ебәргәнһең. Алдан уҡ нимә ашатасағыңды әйтеп ебәргәнһең. Эш бит ашауҙа түгел, бер һөйләшеп ултырыуҙа.

Сәбилә ҡарсыҡ Иванды яҡларға ашыҡты. Ҡотлобай уның һүҙен бүлде:

— Тағы ла хата бар, Иван дуҫ!

— Нимә тағы ла?

— Йомошсо ҡыҙға йомошон үтәмәҫ борон уҡ әйбер биргәнһең.

Сәбилә асыуланғандай итте:

— Бигерәк һин. Ике йыл эсендә шуларҙы белгәс тә етер. Тағы ла ике йыл торһондар, шунан йоланы белеп бөтөрҙәр.

**баш ватыу** — ломать голову, думать
**аллы-артлы** — друг за другом

1. Тексттың төп темаһын билдәләгеҙ.
2. Башҡорт халҡының милли ризыҡтарын айырып яҙып алығыҙ. Уларҙың береһен нисек бешереүҙәре тураһында һөйләгеҙ.
3. Иван ниндәй йолаларҙы үҙләштергән? Ҡотлобай ниндәй хаталарҙы иҫкәртә?
4. Текст буйынса үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ.

**18.** Тема буйынса һүҙҙәр теҙмәһен дауам итегеҙ.

1. Милли уйындар: аҡ тирәк, күк тирәк, ...
2. Башҡорт халҡының милли музыка ҡоралдары: ...
3. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады жанрҙары: ...
4. Үҙ милләтегеҙҙең халыҡ уйындарын, музыка ҡоралдарын яҙығыҙ.

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Легенда** тип теге йәки был күренеш, предмет, атаманың килеп сығышын аңлатҡан халыҡ хикәйәһенә әйтәләр.

**19.** Легенданы уҡығыҙ. Йөкмәткеһен башҡорт телендә һөйләгеҙ.

## Дорога лебедей

Поэтичны легенды чувашского народа. Млечный Путь чуваши называют Хургайк Сюле, что в переводе означает Дорога Лебедей. Древняя легенда так рассказывает о её появлении на небе.

Летели лебеди с севера, спешили, потому что зима гналась за ними. Вожак-хургайк вёл свою стаю по древнему пути. Он помнил всё: где какие реки и озёра, где леса. Боясь, что снег скроет приметы, Хургайк вёл свою стаю днём и ночью.

Всё было хорошо в полёте. Но вдруг вожак уловил в движении крыльев летящих позади птиц какой-то перебой, до его слуха донесся похожий на стон крик лебедя. Хургайк понял, что кто-то в стае ранен. Но инстинкт повелел ему оставить несчастного и уводить от опасности других: настигнет зима — погибнет вся стая...

А раненая птица падала и падала, и подруги ничем не могли помочь ей. Каждая из них лишь оставляла в небе несколько своих

пушинок, чтобы птица, если поправится, могла бы потом найти путь к ним.

С тех пор и светятся пушинки, как звёзды, образуя дорогу Хургайк Сюле. В народе говорят, что лебеди летят по Млечному Пути.

*(М. Юхма)*

?

1. Легенданы уҡыған ваҡытта һеҙҙә нимә борсоно һәм ни өсөн?
2. Легендала ҡоштарҙың бер-береһенә тоғролоғо нимәлә күренә?
3. Легенда буйынса үҙ фекерегеҙҙе әйтегеҙ.

**20.** Һүҙҙәрҙе тәржемә итеп кроссвордҡа горизонталь буйынса яҙһағыҙ, вертикаль буйынса халыҡ ижады жанрын уҡырһығыҙ.

1. Воробей
2. Книга
3. Тень
4. Сказка
5. Песня
6. Спор
7. Частушка



**21.** Риүәйәт менән танышығыҙ. Нисек уйлайһығыҙ, нимә ул риүәйәт?

## Үлеклекүл

Сапай ауылынан өс саҡрым ерҙә Үлеклекүл тип аталған ер бар. Борон ошо тирәләге башҡорттар еренә баҫҡынсылар килә. Бик ҡаты һуғыш була. Ике яҡлап та күп халыҡ ҡырыла. Яу ҡайтарылғас, иҫән ҡалғандар үлеп ҡалғандарҙы ерләп, таш ҡуйып китәләр. Ошо күп халыҡ ҡырылған урынды Үлеклекүл тип йөрөтә башлайҙар.

*(«Башҡорт халыҡ ижады»нан)*

**22.** Әкиәтте уҡығыҙ. Нимә ул әкиәт? Белгән әкиәттәрегеҙҙе һөйләгеҙ.

## Өс әхирәт

Бер-береһенә йәнәш кенә өс сәскә үҫкән, ти. Улар бик дуҫ булған. Яҙ еткәс, бөтәһе лә бер иш һап-һары сәскә атҡан. Улар өсөһө бергә бик матур күренгән. Тик бер сәскәнең үҙенең генә матур булғыһы килгән. Ул бер дуҫын алдап, батып үлһен өсөн, күл уртаһына ебәргән. Тегеһе, ысынлап та, кире ярға килеп етә алмаған. Таң атыуға күл уртаһында ап-аҡ булып сәскә атҡан. Ҡояш байығас,

ерҙе, дуҫтарын һағынып, бик бойоҡҡан, битен ҡаплаған кеүек таждарын япҡан. Кешеләр уға томбойоҡ тип исем ҡушҡан.

Ә икенсе әхирәтен яр ситенә алып барған да шунда аҙаштырып ҡалдырған, ти. Уныһы ла аҡ тажлы, уртаһында һарыһы булған матур сәскәгә әйләнгән, ти. Уны кешеләр аҡ сәскә тип атай башлаған.

Ә үҙе, дуҫтарының үлмәгәнен, тағы ла матурланыуын күреп, шул тиклем көнләшкән. Шулай көнләшеп, гел генә насарлыҡ теләп йөрөгәнгә ул бөтөнләй үҙгәргән, сәнскеле дегәнәккә әйләнгән, ти.

*(Л. Арыҫланова)*

**бер иш** — одинаковый
**батып үлһен өсөн** — чтоб утонул
**ярға килеп етә алмаған** — не смог вернуться к берегу
**таж** — венчик; **таж япрағы** — лепесток
**томбойоҡ** — водяная лилия
**көнләшеү** — зависть; завидовать
**дегәнәк** — лопух

1. Текста яҙылған сәскә исемдәренең килеп сығышы тураһында һөйләгеҙ.
2. Текст буйынса бер-берегеҙгә һорауҙар бирегеҙ.
3. Тексың исеме йөкмәткеһенә тура киләме? Һеҙ нисек атар инегеҙ?

**23.** Йомаҡтарҙың яуабын табығыҙ.

1. Бер ҡарттың ун ике улы бар,
Шуларҙың өсәүһе һоро көпө кейә,
Өсәүһе йәшел күлдәк кейә,
Өсәүһе һары сәкмән кейә,
Өсәүһе аҡ тун кейә.

2. Аяғы юҡ — ил гиҙә,
Күҙҙәре юҡ — йәш түгә.

3. Сәйгә һалғанды ашҡа һалмайҙар,
Ашҡа һалғанды сәйгә һалмайҙар,
Икеһе лә аҡ, үҙҙәре бик ваҡ.

4. Ҡырҙа үҫкән бер бала
Өйгә килеп моң һала.

**24.** Үҙегеҙ белгән берәй әкиәттең исемен, төп геройҙарын яҙығыҙ. Унда күтәрелгән проблеманы асыҡлағыҙ.

**25.** Өҫтәлмә сығанаҡтар ҡулланып, үҙегеҙгә оҡшаған халыҡ ижады жанрының береһенә проект эше әҙерләгеҙ.



В. Меос. «Октябрь. Ҡоштар китә»



Р. Нурмөхәмәтов. «Чехов Башҡортостанда»



Ф. Кащеев. «Башҡорт ҡымыҙы»



У. Мөхәмәтшин. «Ғаилә. Һабантуй»

## Беҙ ҡышты ла яратабыҙ



**1.** Нөктәләр урынына тейешле һүҙҙәр ҡуйып, шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

### Тәүге ҡар

Ҡыш килеүен ергә хәбәр итеп,
Ойоҡһотоп яуа тәүге ... .
Ойоҡһотоп яуған тәүге ҡарҙа
Күпме ғиффәтлек, тим, сафлыҡ ... !
Ташлана ла шулай ҡара ергә
Тәүге ҡарҙың тәүге ...,
Төшөп бөтмәҫ борон иреп бөтә,
Тере ҡалмайынса бер төгө.
Ләкин күптән уның артынса уҡ
Башҡалары ергә ... ,
Һәм ҡара ер тотош аҡҡа сума,
Һәр үҙгәреш шулай ... .

*(Р. Ғарипов)*

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *бөртөгө, ташлана, ҡар, башлана, бар.*

**?**

1. Шиғырҙан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе яҙып алып, тәржемә итегеҙ.
2. Автор тәүге ҡарҙы нимәгә оҡшата?
3. Ҡар бөртөгөн нимәләр менән сағыштырырға мөмкин?
4. Шиғыр буйынса фекерегеҙҙе әйтегеҙ.

2. Һүрәткә һәм шиғырға нигеҙләнеп, түбәндәге һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланып, «Ҡышҡы көн» темаһына бергәләп хикәйә төҙөгөҙ.

ҡыш, һыуыҡ, бәҫ, һырынды, тағараҡ, ҡоштар, һырғалаҡ, ябалаҡлап, боҙ, саңғы, ҡар бабай, сана шыуыу, көрт, туң, коньки, тау, ярыш, ағастар, йәнлектәр, Яңы йыл, ҡар көрәү

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Йәнләндереү** — бик борондан килгән фәнни нигеҙһеҙ ҡараш, йәнһеҙ тәбиғәт күренештәрен, ҡош-ҡорт, йәнлек-хайуандарҙы кешегә хас сифат, хис-тойғолар менән һүрәтләү.

3. Нөктәләр урынына тейешле һүҙҙәр ҡуйып, тексты күсереп яҙығыҙ. Текстан йәнләндереүҙәрҙе табып, аҫтына һыҙығыҙ.

## Ҡышҡы биҙәктәр

Күктән аҡ ... ҡойола. Ошо тәңкәләр, ҡар бөртөктәре, төпһөҙ бушлыҡта күбәләктәй өйөрөлөшөп йөрөп ергә төшәлә. Ҡояш апай һирәк-мирәк кенә алтын ... һипкәндә, улар төрлө-төрлө төҫтәрҙә ялтырап күренә. Уҫҡа килеп төшкәндәре, шунда уҡ тамсыға әйләнеп, юҡ була. Ҡыш үҙенең тәңкә ... йәлләмәй.

Тәбиғәт йоҡоға талған. Тик буран ғына, асыуын ҡайҙа ҡуйырға белмәй ыжғырып, ҡоторорға тотондо. Ергә төшәлгән йомшаҡ ҡарҙарҙы өйөрөлтөп-өйөрөлтөп, әле бер, әле икенсе яҡҡа алып барып өйә. Эй ҡотора ..., эй ҡотора, хәле бөтә һәм әҙерәк баҫыла төшә.

Ябалаҡлап ҡарҙар яуа. Ниндәй моңһоу ҙа, һағышлы ла был ҡыш. Юҡ, ... тәбиғәттә үҙенсәлекле йәм дә бар. Ҡыштың йәмен йөрәгендә хис-тойғоһо булған кеше генә аңлайҙыр ул.

Ҡыш сафлыҡ, илаһилыҡ миҙгеле: йә илай ул, йә шатлана, ҡайғыра, көлә. Әйтерһең дә, кеше күңеленең биҙәктәре сағыла унда, хис-тойғолар сайпылып киткәндәй була.

*(Н. Исламғолова)*

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *буран, тәңкәләр, ҡышҡы, ҡарҙарын, нурҙарын.*

?? **4.** Тексты тасуири уҡығыҙ.

## Ҡыш

Декабрь айы ҡыш башланыуын хәбәр итә. Ҡоштарҙың йәйге музыкаһы күптән тынған. Урман да йәшел тунын һалған, ҡараһыу төҫкә ингән. Ҡышын ҡояш һирәк күренә, йылытмай. Һирәк күренгән ҡояш нурҙарында ҡар бөртөктәре ынйы кеүек йылтырай.

Ер ап-аҡ юрғанын ябынды. Йылғаларға боҙҙан күперҙәр һалынды.

Ҡышын ҡоштарға һәм хайуандарға аҙыҡ табыу ауырлаша. Шуға күрә уларҙың күбеһе татлы йоҡоға тала. Эйе, оҙаҡламай йыһанда үҙенең зәһәр һалҡындары менән ҡыш тантана итәсәк.

*(Журналист яҙмалары)*

?

1. Дәреслектәрҙе ябып, уҡытыусы уҡығанды тыңлағыҙ.
2. *Ынйы, йыһан, зәһәр, тантана* һүҙҙәренең мәғәнәһен асыҡлағыҙ.
3. Тексты диктант итеп яҙығыҙ.
4. Алдағы ҡағиҙәгә тап килгән һүҙҙәр булһа, аҫтына һыҙығыҙ.

**5.** Йомаҡтарҙы дөрөҫ сисһәгеҙ, һүҙҙәрҙе уҡый алырһығыҙ.

## «Ҡ» башватҡысы

1. Иртән килә, кис китә,
Һөйләшеп тормай үтеп китә.

2. Ҡыш — ҡунаҡта,
Йәй — йыраҡта.

3. Эшләгәндәр ағастан,
Үҙәген — ҡара таштан.

4. Үҙе бер ҙә ашамай,
Ашағанда бушамай.

5. Аяҡтары, ҡулдары бар,
Нәҡ кеше төҫлө үҙе.
Мин һөйләйем, ул өндәшмәй,
Ауыҙынан сыҡмай һүҙе.

6. Ике осонда дүңгәләк,
Уртаһында бер ҡаҙаҡ.

7. Бейә һөтөн ҡойоп эстем.

8. Аҡ кейемен кейгән,
Йәшел суғын элгән.

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1. | ҡ | | | | | |
| 2. | ҡ | | | | | |
| 3. | ҡ | | | | | |
| 4. | ҡ | | | | | |
| 5. | ҡ | | | | | |
| 6. | ҡ | | | | | |
| 7. | ҡ | | | | | |
| 8. | ҡ | | | | | |

Т

**6.** I. Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ. Кире хәлдәрҙең аҫтына һыҙығыҙ.

1. Таш, йөҙ йыл бер урында ятһа ла, тамыр ебәрмәй. 2. Ҡупшы өшөһә лә, ҡалтырамаҫ. 3. Уйнап һөйләһәң дә, уйлап һөйлә. 4. Күпте белһәң дә, аҙ һөйлә. 5. Ҡыйыш ултырһаң да, тура һөйлә.

II. Һынамыштарҙы уҡығыҙ. Бер нисәһен ятлағыҙ.

1. Ҡыш көнө болот юлланып торһа, йылы булыр.

2. Февралдә ҡайын ботағында ҡар алҡа-алҡа булып аҫылынып торһа, ул йылды иген уңыр.

3. Көн оҙаймай, төн ҡыҫҡармаҫ.

4. Ҡаҙ һыңар аяғын ҡанат аҫтына тыҡһа, көн һыуыныр.

5. 15 февраль иретһә, яҙ иртә һәм йылы килер. Ҡар яуһа, ямғырлы, оҙайлы яҙ килер. Ә һепертмә буран булһа, һыуыҡтарҙы көт.



*Атаҡлы башҡорт шағиры Шәйехзада Бабич 1895 йылда Өфө губернаһының Бөрө өйәҙе (хәҙерге Дүртөйлө районы) Әсән ауылында мулла ғаиләһендә тыуған. Уның атаһы Мөхәммәтзакир тирә-яҡҡа даны таралған уҡымышлы кеше булған.*

*Шәйехзада Бабич башланғыс белемде тыуған ауылында атаһы уҡытҡан мәҙрәсәлә ала.*

*Ун биш йәшендә ул «бәхет эҙләп» ҡаҙаҡ далаларына сығып китә, Дүсәнбай мәктәбендә балалар уҡыта, ҡаҙаҡ телен өйрәнә. Бер ни тиклем аҡса йыйғас, 1911 йылдың көҙөндә Өфөгә килә һәм «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә.*

*1916 йылда «Ғәлиә»не тамамлағас, Троицк ҡалаһында уҡытыусы булып эшләй. «Аҡмулла» исемле сатирик журналда шиғырҙар, эпиграммалар баҫтыра.*

*Бер йылдан һуң Бабич Өфөгә әйләнеп ҡайта. Ә 1917 йылдың авгусында «Ҡармаҡ» журналы редакцияһының саҡырыуы буйынса Ырымбурға китә, унда секретарь булып эшләй башлай. Әммә шағирға «Ҡармаҡ» редакцияһында оҙаҡ эшләргә тура килмәй. Ваҡиғалар уның тормошон икенсе йүнәлешкә бора.*

*1919 йылдың 25 февралендә Бабич Башревкомдың башҡорт матбуғатына эшкә тәғәйенләнә. Ләкин шағирға бында ла оҙаҡ эшләргә насип булмай. 1919 йылдың 24 мартында Бабич, типографияны тейәп, ун бишләп һыбайлы менән Темәстән Ҡыҙыл Мәсеткә (Мораҡҡа) юлға сыға. Йылайырға етеү менән, Шәйехзада Бабич ҡулға алына һәм йыртҡыстарса язалап үлтерелә.*

## Кем өсөн?

Айға урләп, нурҙа уйнап,
Күкрәгемде нурланым.
— Ит ғәфү, әй, Ай, — тинем мин, —
Нурҙарыңды урланым.
— Һис зарар юк, ал, — тине Ай, —
Ал да сәс нур халкыңа;
Мин дә бит төн хакына
Алдым кояштың нурҙарын.

**урлау** — украсть
**нур** — луч
**зарар** — вред

1. Шиғырҙа нимә тураһында һүҙ бара?
2. Шиғырҙы ятлағыҙ.

## Кышкы юлда

Их, рәхәт шыуа сана, юрта ат талғын ғына,
Як-яғымда киң ялан йоклап ята тып-тын ғына.

Алдымда ак кар йәйелгән, ялтырап ап-ак булып,
Ынйы мәрйендәр сәселгән өҫтөнә вак-вак булып.

Юл ситендә кар киҫәктәре торалар теҙелешеп,
Барыһы ла эйелеп калалар, хуш, иҫән бул, тиешеп.

Ак кояш нур ептәрен һуҙған да ергә нур һибә,
Нурлы ептәрҙән ағып, моңло күңелгә йыр килә.

Йырлай башлайым, шунда һалкын ел иҫеп, йырҙы киҫә,
Ай уҫал ел кырҙағы бар йәмде, бар моңдо киҫә.

**талғын ғына** — не спеша
**ынйы мәрйендәр** — жемчужины, жемчужные бусины

1. Шиғырҙы тасуири укырға өйрәнегеҙ, ятлағыҙ.
2. *«Ялан йоклап ята», «кар киҫәктәре ... эйелеп калалар, хуш, иҫән бул, тиешеп», «уҫал ел ... моңдо киҫә»* һөйләмдәрен нисек аңлайһығыҙ?
3. Шиғырҙан йәнләндереүҙәрҙе күсереп яҙығыҙ.

**7.** Нөктәләр урынына мәғәнәләре менән тап килгән һүҙҙәрҙе һайлап, тексты күсереп яҙығыҙ.

Уралда һалкын (йәй, яҙ, көҙ, кыш) тора. Ерҙә калын (кар, тупрак) ята. (йылғалар, күлдәр) калын (ер, түшәк, боҙ) менән каплан-

ған. Ваҡыты-ваҡыты менән ыжғыр (елдәр, дауылдар, бурандар) булып тора. Бындай саҡтарҙа ҡара (урман, туғай, баҫыу) уҫал бүре кеүек олой. Ә буран баҫылғас, ҡышҡы урман яланғасланып ҡала, әйтерһең дә, кемдер уның йылы (кейемен, тунын) систереп ташлаған. Тыныс ваҡыттарҙа урман бик алыҫҡа үтәнән-үтә күренеп тора. (Ҡоштар, йәнлектәр) хәҙер юҡ инде. Сыҙамлы ҡорҙар, ваҡ селдәр генә арлы-бирле күренгеләп ҡала. Улары ла ваҡыттарын күберәк (ҡар, ер, тупраҡ) аҫтында үткәрә.

*(Н. Мусин)*

**8.** Диалогты уҡығыҙ. Һеҙ ниндәй миҙгелде яратаһығыҙ? Ни өсөн?

— Рәфҡәт, әйт әле, ни өсөн ҡыш миҙгелен яратаһың?

— Ҡышты үҙенең ҡар бурандары, һыуыҡтары менән яратам. Мин нимә өсөн яратҡанымды әйтә лә алмайым. Лилиә, һин ҡар яуыуын ғына күҙ алдыңа килтер әле. Ниндәй матур! Бөтә донъя аҡ мамыҡ эсендә ҡала. Ниндәй саф һауа!

— Рәфҡәт, һиңә хатта ҡышҡы һыуыҡтар ҙа оҡшаймы?

— Әлбиттә, оҡшай. Ныҡ итеп кейенеп, йүгерә-атлай йөрөйһөң икән, ниндәй һыуыҡ һине ҡурҡыта алһын!

— Ярай, һинең өсөн ҡышҡы һыуыҡтар ҙа бер ни түгел икән, ә йәнлектәргә, ҡоштарға ни тиклем ауыр икәнен уйлайһыңмы?

— Лилиә, мин барыһын да уйлайым. Беҙ, кешеләр, йылдың ниндәй миҙгеле булыуға ҡарамаҫтан, кейектәр, ҡоштар өсөн яуаплы икәнебеҙҙе бер ваҡытта ла онотмаҫҡа тейешбеҙ.

— Рәфҡәт, әйҙә ял көнө урман буйҙарынан саңғы менән йөрөп киләйек. Тағараҡтарға ем, икмәк валсыҡтары һалырбыҙ.

— Ярай, килештек.

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Обращение (өндәш һүҙ)** — слово или сочетание слов, называющее лицо (предмет), к которому обращаются с речью. Чаще всего обращения выражаются существительным в форме именительного падежа, сочетаниями слов, реже — субстантивированными прилагательными или причастиями, а также местоимениями: Онотмағыҙ мине, **һабаҡташтарым!** — Не забывайте меня, **одноклассники!**

Обращения могут быть нераспространенными и распространёнными: Минең тәҙрәм төбөндә һайрамасы, **һандуғасым**! — Ты не пой, **мой соловей**, под моим окном (А. Кольцов). Бәхетле булығыҙ, **ҡәҙерле балалар!** — Будьте счастливы, **дорогие дети!**

**9.** Шиғыр юлдарын уҡығыҙ. Тәржемә итеп, өндәш һүҙҙәрҙе яҙығыҙ.

Здравствуй, мир, здравствуй, друг,
Здравствуй, песен щедрый круг,
Здравствуй, миг, здравствуй, век,
Здравствуй, добрый человек!
Здравствуй, дом, здравствуй, даль,
Здравствуй, радость и печаль,
Здравствуй, быль, здравствуй, новь,
Здравствуй, светлая любовь!

*(В. Костров)*

**10.** Һүрәтте файҙаланып, «Ҡыштың һыуыҡ көндәрендә» тигән темаға хикәйә төҙөгөҙ.





**11.** I. Түбәндәге һорауҙарға яуаптар әҙерләп, диалог төҙөгөҙ. Диалогты дауам итегеҙ.

— Кеҫә телефоның бармы?
— ...
— Ниндәй компанияныҡы?
— ...
— Ниндәй функциялары бар?
— ...
— Һиңә тағы ниндәй телефондар оҡшай?
— ...

II. Ялғауҙар өҫтәп, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ.

Мин кеҫә телефоны аша һөйлә... .
Һин кеҫә телефоны аша һөйлә... .
Ул кеҫә телефоны аша һөйлә... .
Беҙ һөйлә... .
Һеҙ һөйлә... .
Улар һөйлә... .

**12.** Тексты уҡығыҙ. Һорауҙарға яуап яҙығыҙ. Кеҫә телефоны тураһында һөйләгеҙ.

Кеҫә телефонының кешелек донъяһына килеп инеүе донъяны ҡырҡа үҙгәртте.

1983 йылдың 13 июнендә Америкала тәүге кеҫә телефоны һатыуға сығарыла. Motorola компанияһы сығарған был ҡулланма 800 г ауырлыҡта һәм 33 см оҙонлоҡта була.

Кеҫә телефоны Motorola компанияһы инженеры Мартин Купер тарафынан полиция хеҙмәткәрҙәре өсөн уйлап сығарыла.

Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә был телефон күп функциялыға әйләнде. Уның аша Интернетҡа сығырға, фотоға төшөрөргә, музыка тыңларға, телевизор ҡарарға, СМС-хәбәрҙәр ебәрергә мөмкин. Япон ғалимдары төрлө түләүҙәргә аҡса күсереү һәм аралашҡан кешеңде экранда күреү мөмкинлектәрен булдырыуға иреште.

*(Л. Минғазовтан)*

?
1. Тәүге кеҫә телефоны ҡасан һатыуға сығарыла?
2. Кем уйлап сығарған?
3. Кеҫә телефонының функцияларын атағыҙ.

Т
**13.** I. Өндәш һүҙҙәр индереп, иптәшегеҙҙең электрон почтаһына хат яҙығыҙ.

II. Бирелгән һүҙбәйләнештәрҙе файҙаланып, «Ҡышҡы урман» тигән темаға хикәйә яҙығыҙ.

көн ҡараңғыланыу, көслө ел, эре ҡар бөртөктәре, ябалаҡлап яуыу, күҙ асҡыһыҙ буран ҡотороу, ышыҡ урындар, йәшеренергә тырышыу, беҙҙә ҡышлаусы ҡоштар, йылы кейенгән кешеләр, кәртә-ҡураларҙы ҡарау, йән өҙгөс олоу, бейек ҡар өйөмдәре, әҙәм йырып үткеһеҙ көрт, көр күңелле балалар

**14.** Класташың менән тауға саңғыла шыуырға барыуығыҙ тураһында телефон аша һөйләшегеҙ.

**15.** Тәржемә итегеҙ. Текст буйынса башҡорт телендә һорауҙар төҙөп, дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ.

## В зимний день

Стоит ясный морозный день. Светит солнце. Кусты, деревья, камыши покрыты пушистым инеем. Разноцветные огоньки блестят в их зимнем наряде.

Я выхожу на улицу. Кругом тихо-тихо. Только снежок скрипит под ногами. Иногда раздаётся шорох инея, который падает с тяжёлых сучьев. Я зашагал в сторону реки.

Вдруг потянул свежий ветерок. На небе появились тёмные тучки и закрыли солнце. В морозном воздухе закружились лёгкие снежинки. Они падают на холодную землю и покрывают её снежным ковром.

С реки доносятся радостные голоса ребят. Там мальчики все ещё играют в хоккей.

*(Из журнала «Начальная школа»)*

**16.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Уның төп темаһын билдәләгеҙ.

## Һалдаттар

Һалдаттар йырлап уҙалар,
Талпынып, берҙәм атлап.
Ғорурланмай мөмкинме ни —
Булдым үҙем дә һалдат!
Һалдат булмаған берәүҙәр
Һалдатса атлап ҡарар.
Һалдат булаһы кешегә
Итмәҫ был һис тә зарар.
Ҡарттар үткәнен хәтерләр,
Хәтерләр яу юлдарын.
Ҡыҙҙар һағыныр һөйгәнен,
Әсәләр — үҙ улдарын.
Уҙған йәшлек, тик баҡһам да
Сафтағы һәр һалдатҡа,
Оло һынау тотам һымаҡ
Илемә биргән антҡа.
Ил менән бергә һалдаттың
Күргәне, күрәсәге.
Ир иңендә була һәр саҡ
Ватандың киләсәге.

*(Р. Әхмәҙиев)*

**берҙәм** — вместе
**ғорурланыу** — гордиться
**зарар** — вред
**саф** — *зд.:* строй
**һынау** — испытание
**ант** — клятва
**киләсәк** — будущее

| |
|---|
| киләсәк |
| ант |
| дәүер |
| тәлгәш |
| хәстәрлек |

1. Автор беҙгә һалдаттар тураһында нимәләр еткерә?
2. Шиғырҙың һуңғы строфаһын нисек аңлайһығыҙ?

**17.** «Ватанды һаҡлаусылар көнө» темаһына түбәндәге план буйынса әңгәмә ойоштороғоҙ.

1. Был ниндәй көн?
2. Ул көндө ниндәй саралар үтә?
3. Байрам менән ҡотлау открыткаһы, СМС-хәбәр, электрон почтаға ҡотлау открыткалары яҙығыҙ. Ҡотлауҙарығыҙҙа өндәш һүҙәр ҡулланығыҙ.

**18.** Өҫтәлмә сығанаҡтар ҡулланып, «Башҡортостанда ҡыш» темаһына проект эше ҡороғоҙ.

**Хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ!**

Башҡорт телендә **ҡылым** һәр ваҡыт һөйләмдең аҙағында килә.

**19.** Тәҡдим ителгән һүҙҙәрҙән һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ.

Тыуа, йыл, ер-яңы. Алып килер, яңы йыл, нимәләр, был. Яңы йыл, әлбиттә, алып килер, бәхет, шатлыҡ. Сөнки, бәхетле, балалар, беҙ. Илебеҙ, тыныс, беҙҙең, аяҙ, күгебеҙ. Тырышып, беҙгә, ҡала, тик, белем, үрләргә, үрҙәренә.

**20.** I. Йомаҡтарҙың яуабын табығыҙ.

1. Ауыр йөктәр күтәрә ул,
Һәр кемде лә үткәрә ул,
Тоташтыра ике ярҙы,
Быны белеүсе бармы?

2. Күҙгә күренмәй,
Бик шәп йүгерә,
Һүндерһәң — һүнә,
Яндырһаң — яна,
Тотонһаң — үлтерә.

II. Мәҡәлдәрҙең икенсе яртыһын яҙып бөтөгөҙ.

1. Кем эшләмәй, ... ... .
2. Ата-әсәңә ни ҡылһаң, ... ... ... .
3. Ағасты кем ултыртһа, ... ... .
4. Башланған эш — ... ... .

**21.** Тексты уҡығыҙ. Нөктәләр урынына тейешле ялғауҙар ҡуйып, күсереп яҙығыҙ.

## Тымаулағанда

Хәҙер һалҡын тейҙереп, тымаулап ауырыусыларҙың иң күбәйгән осоро. Грипп та көндән-көн ҡотора. Был сирҙәр... ҡаршы тороуҙың иң анһат сараһы — һуған, һарымһаҡ.

Ауырыу... иҫкәртеү өсөн, уларҙы бөтәү көйө ашарға ла мөмкин. Шул уҡ ҡырғыста ҡырып, ҡайнар һыу... бутап, 10—15 минут буйы быу... еҫкәп ултырыу ҙа файҙалы. Был процедура... көнөнә ике тапҡыр 10—15 тәүлек буйы ҡабатлағыҙ.

Ике-өс баш һарымһаҡ... ваҡлап турап, 30—50 г ҡайнар һыу... бер-ике сәғәт тоталар. Был төнәтмә... тымаулағанда танау... тамыҙалар. Төнәтмәне һыуытҡыста ике көн һаҡларға була. Грипп... ҡаршы сара буларaҡ, тал ҡайырыһынан, аҡ сәскә, йүкә сәскәһе, гөлйемеш емештәренән сәй әҙерләргә була. Бер балғалаҡ сәй... бер стакан ҡайнар һыуҙа 10 минут төнәтәләр, һөҙәләр. Уны көнөнә өс тапҡыр ашарҙан 15 минут алда эсәләр.

*(«Мәктәп календары»нан)*

**тымаулау** — страдать от насморка
**анһат** — лёгкий, нетрудный
**бөтәү** — целый
**ҡырғыс** — тёрка
**быу** — пар
**төнәтмә** — настой
**тал ҡайыры** — кора ивы
**аҡ сәскә** — ромашка
**гөлйемеш** — шиповник
**һөҙөү** — цедить

1. Тексттың йөкмәткеһенә нигеҙләнеп, гриптан дауаланыу ысулдары тураһында һөйләгеҙ.
2. Гриптан дауаланыуҙың тағы ла ниндәй ысулдарын беләһегеҙ? Бер-берегеҙ менән фекер алышығыҙ.

**22.** Шиғырҙы уҡығыҙ. Уның төп темаһын билдәләгеҙ.

Өр-яңы йыл тыуа, өр-яңы йыл,
Ап-аҡ ҡарҙан, ап-аҡ моңдарҙан.
Елеп бара ваҡыт толпарҙары
Аҡ мамыҡтай ап-аҡ юлдарҙан.
Ҡаршы алам йылдың сабый сағын,
Аҡ биләүҙә ятҡан миҙгелен.
Был минуттар, был сәғәттәр ергә
Алып килһен бары изгелек.

*(Р. Шәкур)*

| |
|---|
| терегөмөш |
| балдаҡ |
| ҡырғыс |
| һарымһаҡ |
| тал ҡайыры |
| гөлйемеш |
| һөҙөү |
| төнәтмә |
| тымаулау |

**?**

1. Шиғыр буйынса фекерҙәрегеҙҙе әйтегеҙ.
2. Яңы йыл байрамына нисек әҙерләнеүегеҙ тураһында һөйләгеҙ.
3. Шиғырҙы ятлағыҙ.

**23.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

## Ҡышҡы урман

**Ҡышҡы урман — үҙе серле донъя,**
Тып-тын ҡалған, ниҙер көткәндәй;
Ҡарһылыуҡай минең алдан ғына
**Ынйыларын һибеп киткәндәй.**

Ап-аҡ булған алда түбәләстәр,
**Аҡ тулҡынын йәйгән үҙәндәр,**
Ап-аҡ ҡарға ап-аҡ ҡайындарҙы,
Гүйә, әле генә теҙгәндәр.

Ҡанат ҡағыр ап-аҡ күбәләктәр,
Ботаҡтарға саҡ-саҡ ҡағылһаң.
Ҡағылмайым, сөнки бар донъяға
**Аҡ ҡар түгел, сафлыҡ яғылған.**

Ҡолаҡ һалып урман тынлығына,
Тып-тын киләм, тып-тын,
                    көрт кисеп,
Өнһөҙ генә көткән шатлығымды
Ҡуйырмын, тим, юҡһа, өркөтөп...

*(С. Әлибаев)*

**?**

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алығыҙ һәм тәржемә итегеҙ.
2. Шиғырҙың йөкмәткеһен асыр өсөн ҡулланылған ниндәй һүҙҙәр һеҙгә оҡшаны? Ни өсөн?
3. Ни өсөн ҡайһы бер һүҙҙәр бәйләме ҡалын хәреф менән бирелгән? Нисек уйлайһығыҙ?
4. Ни өсөн шиғыр күп нөктәләр менән тамамлана тип уйлайһығыҙ?
5. Шиғыр башҡа шиғырҙарҙан ни яғы менән айырыла?

## Менгән атым — уң ҡанатым



1. Текстың исемендәге һорауға яуап бирегеҙ. Нөктәләр урынына тейешле ялғауҙар ҡуйып уҡығыҙ.

### Башҡорт аты ниндәй була?

Башҡорт аты сығышы менән дала һәм урман яғы тоҡомдар... ҡарай. Улар ҡырҡыу континенталь климат шарттарында барлыҡҡа килгән, йыл әйләнәһенә көтөүлектә йөрөгән.

Башҡорт аттары XVII—XVIII быуаттар... уҡ киң таралған булған. Улар Өфө, Ырымбур губерналарында үрсетелгән, Көнбайыш Себерҙең почта юлдарында ҡулланылған.

Башҡорт тройкалары ла киң билдәле булған. Аттар... юлда ял иттермәй һәм ашатмай 8 сәғәттә 120—140 саҡрым юл үтә алғандар.

Башҡорт ғәскәр... ойошторолғанда ла башҡорт аттары киң йәлеп ителгән. Рәсәй алып барған бөтә һуғыштар... рус армияһы башҡорт аттары менән тулыландырылған. Башҡорт аттары 1812 йылда... Ватан һуғышында юғары баһа алған. Был һуғыш... башҡорт һыбайлылары Париж... тиклем һуғыша-һуғыша барып еткән һәм кире әйләнеп ҡайтҡан. Француз генералы де Марбо үҙенең иҫтәлектәр... былай тип яҙған: «... башҡорт һыбайлылары өсөн бер ниндәй юл да кәртә була алманы. Улар һағыҙаҡ күсе кеүек һис көтмәгән яҡтан килеп сығыр ине. Улар... ҡыуып етеү бик ауыр булған».

Хәрби белгестәр башҡорт аттар... ҡыйыулығы һәм тәүәккәллеге, тырышлығы һәм хужаһына ышаныусанлығы, шулай уҡ оҙаҡ ваҡыт шәп сабып һәм йылдам юрғалап барыуға һәләтле булыуы өсөн юғары баһалағандар. Ә был сифаттар һыбайлы... мәргән атырға һәм ҡылыс менән оҫта идара итергә мөмкинлек бирә.

Башҡорт аттары ауыл хужалығы һәм йөк ташыу эштәр..., ҡымыҙ яһау һәм ит етештереү өсөн файҙаланыла.

*(«Һаҡмар» газетаһынан)*

**сығышы менән** — по происхождению
**үрсетеү** — *зд.:* разводить
**мәргән атырға һәм ҡылыс менән оҫта идара итергә мөмкинлек бирә** — даёт возможность метко стрелять и ловко орудовать саблей
**йөк артмаҡлағанда ла, еккән хәлдә лә** — и в гружёном, и в запряжённом состоянии

ат ҡараусы — конюх
ат һарайы — конюшня
ат егергә — запрягать лошадь
бейә — кобыла
ҡолон — жеребёнок
айғыр — жеребец
йылҡы — конь, лошадь
эйәр — седло
йүгән — узда, уздечка
саб/ырға — скакать
ҡымыҙ — кумыс
кешнә/ргә — ржать
йылҡысылыҡ — коневодство

1. Башҡорт аттарына хас сифаттарҙы дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ.
2. Башҡорт аттары тураһында яҙылғандарға өҫтәп һөйләгеҙ.

**2.** I. Һүҙлек һүҙҙәрҙе ҡулланып, бер нисә һөйләм уйлап яҙығыҙ.

II. Бәйләнешле текст төҙөп яҙығыҙ.

**3.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ, йырлап өйрәнегеҙ.

## Ел, ерәнем

Ел, ерәнем, егетеңде
Еткер ел етмәҫ ергә.
Яланда түгел яуҙа ла
Гел икәү булдыҡ бергә.
Менгән атым —
Уң ҡанатым!
Һин батыр егет күрке, һай,
Һинең менән
Елдәй елгән
Батыр егет — ил күрке.
Ҡолон саҡтан татыу үҫтек
Ирәндек итәгендә,
Ил саҡырғас, яуға киттек
Йәмле йәй иртәһендә.

Менгән атым —
Уң ҡанатым!
Һин батыр егет күрке, һай,
Һинең менән
Утҡа ингән
Батыр егет — ил күрке.
Беҙ ҡайттыҡ икәү иҫән-һау,
Яуҙа дошманды еңеп,
Һинең даның, Ирәндектау,
Ерәнсәй менән егет.
Менгән атым —
Уң ҡанатым!
Һин батыр егет күрке, һай,
Һинең менән
Утҡа ингән
Батыр егет — ил күрке.

*(Н. Иҙелбай һүҙҙәре, З. Исмәғилев көйө)*

**?**

1. Шиғырҙың төп фекерен билдәләгеҙ.
2. *Менгән атым — уң ҡанатым* тигәнде нисек аңлайһығыҙ?
3. Шиғырҙың йөкмәткеһенә ҡарата үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ.

**4.** Тексты түбәндә бирелгән һорауҙарға яуаптар менән дауам итегеҙ.

Атты мин кешегә хеҙмәт иткәне, эшкә ярағаны өсөн кешенең ярҙамсыһы итеп кенә түгел, ә беҙҙең ата-бабаларҙың тормошо, көнкүреше, йәшәү рәүеше итеп тә ҡарайым. Ат ир-егеттең таянысы ғына түгел, ә ҡанаты ла булған. ...

**?**

1. Бөгөн Башҡортостанда йылҡысылыҡ менән шөғөлләнәләрме?
2. Ниндәй маҡсаттар менән был өлкәгә иғтибар артты? Ни өсөн?
3. Һеҙҙең ҡарамаҡҡа, был уңышлы өлкәме?
4. «Аҡбуҙат» ипподромы тураһында нимәләр беләһегеҙ?

**Т** **5.** Мәсьәләләрҙе сисегеҙ.

1. Байҙың 40 баш йылҡыһы булған. Үткенсе сауҙагәрҙәр һәр бейәгә 200-әр һум, ә һәр айғырға 210-ар һум алтын аҡса тәҡдим иткәндәр. Һатып алырға теләүселәрҙән тынғы булмаған. Ләкин бай бер генә бейәһен дә, бер айғырын да һатмаған. 34 бейәнән торған өйөрҙө һатмайынса, бай ниндәй сумма аҡсанан баш тартҡан?

**тынғы** — покой, спокойствие
**өйөр** — табун, косяк (лошадей)
**баш тартыу** — отказываться

2. Сапҡынсы Димдән Өфөгә ат менән сәғәтенә 50 км тиҙлек менән 30 минутта килеп еткән. Ошо уҡ юлды саңғысы сәғәтенә 12,5 км тиҙлек менән нисә сәғәттә үткән?

**сапҡынсы, сапҡын** — *зд.:* верховой, всадник
**саңғысы** — лыжник

**Беләһегеҙме?**

Ҡолон — айғыр ҡолон, бейә ҡолон. Бер йәшкә тиклемге йәш ат.
Тай — ике йәшкә тиклемге ат.
Ҡонан — ике йәштән өс йәшкә тиклемге йылҡы малы.
Дүнән, дүнәжен — өс йәштән дүрт йәшкә тиклемге аттар.
Айғыр — дүрт йәштәге ат. Беренсе ҡолонға тиклемге малға — байтал, ҡолонлағас, бейә, тиҙәр.
Атҡа әйләнгән айғыр — алаша.

**6.** Текстҡа нигеҙләнеп, диалог төҙөгөҙ.

Һабантуйҙа иң ҡыҙыҡлыһы — ат сабыштырыу. Шуға күрәләр кемдер: «Хәҙер сабыш башлана!» — тип ҡысҡырыуға, бөтә халыҡ тауҙың һөҙәк битләүе яғына эркелде. Алыҫта һоро туҙан күтәрелгәс, «Аттар килә!» тип ҡысҡырышып ебәрҙеләр.
Бер аҙҙан ҡалҡыулыҡ башында аттар күренде. Иң алда икәүһе килә. Кешеләр, башҡа уйындарҙы онотоп, хәҙер ошо ике аттан күҙҙәрен алмай, ашҡынып һәм түҙемһеҙләнеп күҙәтә башланы. Һәр кем: «Ҡайһыһы алдан килер икән?» — тип тулҡынланды.

*(Ш. Янбаевтан)*

**7.** Һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп уҡығыҙ. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Һүҙлек диктантына әҙерләнегеҙ.

ат, айғыр, ҡолон, ҡымыҙ, айран, бейә, ат ялы, эйәр, йүгән, юртыу, һоло, үлән, бесән, һарай, арба, сана, юлдаш, йылҡы, йылҡысылыҡ, тоғро, тай, ҡаҙы, даға

**8.** I. Ҡымыҙ тураһында яҙылғандарҙы уҡығыҙ. Белгәндәрегеҙҙе хәтерегеҙгә төшөрөп, өҫтәлмә сығанаҡтар ҡулланып, ҡымыҙҙы нисек эшләүҙәре тураһында һөйләгеҙ.

Ҡымыҙ — бейә һөтөнән әсетеп әҙерләнгән күпереп торған аҡ төҫтәге эсемлек. Уны иң беренсе күсмә халыҡтар эшләргә өйрәнгәндәр һәм шифалы эсемлекте эшләү ысулын быуаттар буйына сер итеп һаҡлағандар.
Ҡымыҙ тураһында иң беренсе яҙманы Геродот ҡалдырған. Ул скифтарҙың ағас батманда ҡымыҙ бешеүҙәре тураһында яҙған. Немец һәм рус сәйәхәтсеһе ғалим-энциклопедист Паллас

1770 йылда: «Башҡорт далаһына ҡымыҙ эсергә Московиянан һәм Дондан төрлө халыҡ йыйыла, сөнки һаулыҡҡа уның файҙаһы бик ҙур», — тип яҙа.

Башҡортостанға кемдәр генә ҡымыҙ эсеп дауаланырға килмәгән. А. С. Пушкин XIX быуаттың утыҙынсы йылдарында, «Пугачёв тарихы» һәм «Капитан ҡыҙы» әҫәрҙәренә материал йыйғанда, Ырымбур далаларында башҡорттар менән дә аралаша. «Ҡымыҙ бейә һөтөнән эшләнә. Был эсемлек барлыҡ тау һәм Азияның күсмә тормош алып барыусы халыҡтары араһында киң ҡулланыла. Ул ярайһы ғына тәмле һәм ифрат файҙалы тип иҫәпләнә», — тип яҙа ул.

С. Т. Аксаков, В. А. Жуковский, В. И. Даль, Л. Н. Толстой, М. Е. Салтыков-Щедрин, Ф. Д. Нефёдов, Д. Н. Мамин-Сибиряк, Г. И. Успенский, Р. Г. Игнатьев һәм башҡа бик күп рус яҙыусылары Башҡортостанда йыш була, ҡымыҙ менән дауалана. Уларҙың һәр береһе шифалы ҡымыҙ тураһында һоҡланып та, маҡтап та күп иҫтәлек ҡалдырған. А. П. Чехов, мәҫәлән, табип булараҡ та ҡымыҙҙың иҫ киткес шифалы икәнлеген билдәләй. Ул да беҙҙең яҡтарға ғаиләһе менән йыш килә, дауалана.

II. Тексты уҡығыҙ. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе тәржемә итегеҙ.

Реки — великий дар природы. С незапамятных времён они дают людям воду для питья и орошения земель. Издавна они были путями сообщения, служили границами государства, верной защитой от нападения врагов. По ним наши предки продвигались в глубь страны, открывая новые земли. На таких реках, как Днепр и Волхов, были построены первые большие города Древней Руси: Киев и Новгород. На берегах рек возводились фабрики и заводы, мельницы и электростанции, строились новые города, вырастали мосты.

*(По В. Архангельскому)*

?

1. Кеше тормошонда йылғаларҙың, һыуҙың әһәмиәтен хәҙерге заманға бәйле һөйләгеҙ. Фекерегеҙҙе миҫалдар менән нығытығыҙ.
2. Беренсе һәм икенсе текст араһында ниндәй айырмалыҡтар һәм оҡшашлыҡтар бар? Аңлатығыҙ.
3. Текстҡа нигеҙләнеп һәм үҙ тәжрибәгеҙҙән сығып, күтәрелгән проблема буйынса бер-берегеҙгә һорауҙар әҙерләгеҙ.

**9.** Ф. А. Кащеевтың «Башҡорт ҡымыҙы» картинаһын иғтибар менән ҡарағыҙ, уның буйынса һөйләгеҙ.

1. Картиналаниҙәр күрәһегеҙ?

2. Оло апайҙың йөҙөн, ҡулдарын, өҫ кейемен һүрәтләгеҙ. Ул нимә эшләй?

3. Кесе апай нимә эшләй? Уның йөҙөн, нисек кейенеүен һүрәтләгеҙ.

4. Ҡымыҙ эсеп ултырған бабай һәм көтөүсе тураһында һөйләгеҙ.

5. Ҡымыҙ бешеү һөнәрен быуындан быуынға күсеп килеүен низән күреп була?

6. Ҡымыҙҙы ниндәй һауытта һәм нисек эсетәләр? Оло быуын кешеләренән һорашып, интернет материалдарын ҡулланып, һөйләгеҙ.

7. Картина буйынса инша яҙығыҙ.

Т **10.** I. Уҡығыҙ. Текстҡа нигеҙләнеп һәм белгәндәрегеҙҙе өҫтәп, аттар тураһында һөйләгеҙ.

## Аттар

Кешеләр хайуандарҙы — ауыр, ә хайуандар кешеләрҙе тиҙ аңлай. Бына атты ғына алайыҡ. Күптәр уны аңра тиер. Әммә бындай буш хәбәрҙе атты ҡараңғы һарайҙа тотҡан, ат тәрбиәләүҙең шатлығын татымаған, ашатҡан һәм һуғарған өсөн аттың рәхмәтен аңламаған кешеләр генә әйтәләрҙер.

Ә һеҙ ат өҫтөндә үҫкән һыбайлынан һорағыҙ. Ул, аттан да аҡыллыраҡ һәм эскерһеҙерәк хайуан юҡ, тиер.

Ғәрәптәр элек атты хатта бала ҡарарға ла ҡалдырған. Ул баланы йыртҡыстан да, йыландан да һаҡлай. Әгәр бала имгәкләп ситкәрәк китһә, ат, уның яғаһынан тешләп, иплəп кенә кире урынына алып килә.

Ҡайһы бер аттар хужаһын юҡһыныуҙан хатта үлә, ә икенселәре ысын күҙ йәштәре менән илай.

*(А. Куприндан)*

**бала ҡарарға** — смотреть за ребёнком
**кире урынына** — обратно на место
**эскерһеҙ** — добродушный
**имгәклә/ргә** — ползать (о ребёнке)
**хужаһын юҡһыныуҙан** — от тоски по хозяину
**ысын күҙ йәштәре менән** — настоящими слезами

II. Өҙөктө уҡығыҙ. Текст буйынса һорауҙар төҙөгөҙ һәм йөкмәткеһен һөйләгеҙ.

## Турат

Май айы. Армияла хеҙмәт итеп, ауылға ҡайттым. Әсәй, туғандар менән күрешкәс, күршеләргә инеп сыҡтым. Хәсән бабайым — атайымдың бер туған ағаһы өйҙә булманы. Ул колхоз аттарын ҡарай. Мин, уны эҙләп, ат һарайына киттем. Хәсән бабай унда ине. Ул мине күреп бик шатланды һәм мин юҡта булған ауыр хәлде — атайымдың үлеүе тураһында һөйләне.

Турат — колхоз аты. Атайым колхоз эшен ошо ат менән үтәй ине. Турат мине таныны. Миңә ҡараны ла күрһенгән кеүек итеп кешнәп ҡуйҙы.

Мин Туратты эйәрләнем. Хәсән бабай миңә ҡарап торҙо ла: «Шул тиклем атайыңа оҡшағанһың, — тип йылмайҙы. — Аттан да тоғро хайуан ерҙә юҡтыр. «Ир ҡанаты — ат булыр» тип юҡҡа әйтмәгәндәрҙер, яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ менән ҡайтара ул ат...» — тине.

Армиянан ҡайтыуым, колхозда эшләп китеүем ошо булды. Миңә Туратты бирҙеләр. Ул миңә тиҙ эйәләште. Хәсән бабайым аптыраны: «Атайыңа оҡшатты ул һине», — тигән була. Беҙ бер-беребеҙгә бик ныҡ эҫендек. Көҙөн ауыл хужалығы институтына уҡырға киткәндә, миңә Турат менән айырылышыуы бик ҡыйын булды. Каникулға ҡайтҡан һайын Турат янына барам. Ул, мине күреү менән, күңелле итеп кешнәп ебәрә, яныма килә лә иркәләнә. Ә киткәнемдә моңайып ҡарап ҡала...

Дүрт йыл уҡыу үтеп тә китте. Мин практикаға үҙебеҙгә ҡайттым. Ауыл осондағы туғайлыҡҡа етер-етмәҫтән бөтә көсөмә һыҙғырып ебәрҙем. Ҡайҙалыр алыҫта Тураттың сағыу тауышы ишетелде. Бер аҙҙан ул миңә ҡаршы елә ине инде. Башы ғорур күтәрелгән, оҙон шырт ялы елдә елберләй. Ә өҫтөндә атайым ултыра кеүек...

*(Ә. Әминев)*

**инеп сыҡтым** — зашёл
**атайымдың бер туған ағаһы** — родной старший брат отца; дядя
**көрһөнгән кеүек итеп** — как будто вздыхая
**үтә/ргә** — исполнять
**эйәләшеү** — привыкать, чувствовать привязанность
**бер-беребеҙгә** — *зд.:* друг к другу
**эҫен/ергә** — привыкать *к кому*, сближаться *с кем*
**эйәрләү** — седлать
**ат эйәрләү** — оседлать коня
**моңайып ҡарау** — смотреть с грустью
**ҡаршы елеү** — нестись, мчаться навстречу
**шырт ял** — жёсткая грива
**елдә елберләү** — колыхаться, развеваться на ветру

**11.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ. Уларҙың мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

1. Аты булһа, ҡамыты табылыр.
2. Ат тешенән билгеле, егет эшенән билгеле.
3. Ауыр йөктө ат тарта, ауыр эште ир тарта.
4. Ябаға тайҙы хурлама, яҙға сыҡһа, ат булыр.

**ябаға тай** — жеребёнок-стригунок

**12.** Темалар буйынса фекер алышығыҙ.

1. Мин «Аҡбуҙат» ипподромында аттар сабышын ҡарайым.
2. Минең атым булһа...
3. Ат — кешенең уң ҡанаты.

**13.** I. Хикәйәне тасуири уҡығыҙ. Уның төп фекерен билдәләгеҙ. Нөктәләр урынына тейешле сифаттар өҫтәп яҙығыҙ.

## Турыҡай

Ҡышҡы ҡураға ҡайтыр алдынан, бөтә йылҡылар ... ҡар менән ҡапланған яланға һуңғы тапҡыр сығып киттеләр. Бында ... малдар ҙа, ҡолондар ҙа бар. Малдар ... үләндәрҙе ашай башланы. Ә ... ҡолондар үләнгә артыҡ иғтибар итмәй, сөнки улар әлегә әсәләрен имә. Улар ялан буйлап сабалар, уйнайҙар.

Турыҡай башта уларға һоҡланып ҡарап торҙо. Уның да шулай сапҡыһы, уйнағыһы, һикергеһе килде. Тик ул бала түгел — быйыл яҙ уға дүрт йәш тулды. Йылҡылар араһында ундайҙарҙы «егет» тип атайҙар. Шуға күрә ул үҙен бейәләрҙе һәм ҡолондарҙы бөтә ҡурҡыныстан һаҡларға бурыслы итеп һанай, яндарынан китмәй, уларҙы ҡарап ҡына йөрөй. Тарала башлаһалар, бөтәһен бер урынға йыя. Унан, ҡолаҡтарын торғоҙоп, тирә-яҡты ҡарай.

Бына көнбайышта ниндәйҙер ҡара нөктәләр күренде. Турыҡай шул яҡты күҙәтә башланы. Был нөктәләр туп-тура уларға табан килә. Береһе алдан килә. Улар артынан тағы ла дүртәү күренә.

Былар, һис шикһеҙ, бүреләр булырға тейеш.

*(С. Агиш)*

**ялан буйлап** — по полю
**һоҡланып ҡарап торҙо** — смотрел с восхищением
**һаҡларға бурыслы итеп һананы** — считал обязанным беречь

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *оло, йоҡа, йәш, ҡарт, йомшаҡ йәшел.*

II. Нөктәләр урынына тейешле ҡылымдар ҡуйып, тексты уҡығыҙ.

Турыҡай бөтә йылҡыларҙы бер ергә ... ... .

Теге биш нөктә бөтөнләй ... . Улар бүреләр ине. Турыҡай уларҙың яҡын килеүен ... . Баҫып торған еренән йәшен тиҙлеге менән ... бүреләргә уҡ кеүек ... . Ул алдан килгән ҡарт бүренең елкәһенән алып, ... ... . Ошо ваҡыт икенсе бүре Турыҡайҙың ҡойроғона ... ... . Турыҡай быны ... ... һәм уның яңағына ҡаты итеп ... ... . Бүре әллә ҡайҙа осоп ... ... . Ул, күккә ҡарап, ҡот оҫҡос итеп ... ... . Ә Турыҡай тағы бер нисә бүренең елкәһенән ... ... , тояҡтары менән яңаҡтарына тибергә ... . Яңаҡтарына эләккән һайын, тегеләр ултырып ... ... .

Бүреләр тағы ла йылҡыларға ташланмаҡсы булды. Ләкин был да уңышлы барып сыҡманы. Хатта Турыҡай береһенең ҡойроғон өҙөп алды. Бүреләр ҡаса башланы. Турыҡай уларҙы ҡыуып алып китте. Ул уларҙы баҫтырып еткән һайын береһен йә ҡойроғонан, йә елкәһенән алып ырғыта, йә тояғы менән яңаҡтарына, баштарына тибә ине.

Ун биш минуттан һуң ул бөтөнләй күҙҙән юғалды.

Байтаҡ ваҡыт үтте. Ҡояш байып, һалҡын төшә башлағас ҡына, Турыҡайҙың ҡайтып килгәне күренде. Хәҙер ул сапмай, аҡрын ғына юрта ине.

Йылҡылар янына килеп етеү менән, Турыҡай туҡтаны. Бик арыған ине ул.

*(С. Агиш)*

**ләкин был да уңышлы барып сыҡманы** — но и это не увенчалось успехом
**ҡыуып алып китте** — бросился вдогонку
**оло/рға** — выть
**ырғыт/ырға** — кидать
**бөтөнләй күҙҙән юғалды** — совсем исчез из виду
**ҡояш байый** — солнце заходит; солнце садится

Белешмә өсөн һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр: *яҡынлашты, килтереп ҡуйҙы, көтмәне, ырғытып ебәрҙе, боролдо ла, атылды, йәбешергә уйланы, тибеп ебәрҙе, барып төштө, һиҙеп ҡалды, олорға тотондо, өлгөрҙө, алып ташларға, олой башлай.*

**14.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Һүҙлектәр ярҙамында ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

### Ҡара юрға

**Тәртә** араһына кермәй
**Этләште** ҡара юрға.
Егеп алғас, алып ҡасты,
Һыйманы оло юлға.

Тып-тын көндө буран олой,
Ҡолаҡта
**Сәңгел тауыш:**
Гүйә, санам —
Сәңгелдәгем,
Күңелгә таныш, таныш.

Егетлектер — егелмәгән
Тай-тулаҡ егеп сабыу.
**Аҙашып йөрөп** булһа ла,
Үҙ юлың эҙләп табыу.

*(Х. Юлдашев)*

## Тәбиғәт йәшеллеккә төрөнә



**1.** Һүрәтте иғтибар менән ҡарағыҙ. Уның буйынса түбәндәге эш төрҙәрен башҡарығыҙ.

1. Терәк һүҙҙәр яҙығыҙ.
2. Һорауҙар уйлап яҙығыҙ.
3. Бәйләнешле текст төҙөп яҙығыҙ.

**2.** Шиғырҙы уҡығыҙ.

### Яҙ бүләге

— Әй, ҡамышлы Һаҡмарым,
Яуап бир әле миңә:
Күптән көткән йомарт яҙ
Ни бүләк итте һиңә?
— Йылы нурҙары менән
Иретте ул боҙомдо,
Балығымды ҡарпытып,
Алҡындырҙы һыуымды!
— Әй, тынғыһыҙ киң баҫыу,
Яуап бир әле миңә:
Күптән көткән йомарт яҙ
Ни бүләк итте һиңә?

— Сарсап ятҡан тупраҡты
Туйындырҙы ул дымға.
Орлоҡтарҙы шыттырып,
Йән өрҙө йәш ужымға.
— Әй, мәғрур сал урманым,
Яуап бир әле миңә:
Күптән көткән йомарт яҙ
Ни бүләк итте һиңә?
— Һәр бер тирәгемә ул
Йәм-йәшел һырға элде.
Ҡыуағымды, талымды
Былбыл моңона күмде!
— Әй, биҙәкле болоном,
Яуап бир әле миңә:
Күптән көткән йомарт яҙ
Ни бүләк итте һиңә?
— Рәхмәт әйтһәм дә яҙға,
Рәхмәт кенә уға аҙ...
Ул мине йәшәртеп,
Гөл-сәскәмә бирҙе наҙ,
Мәңге күкрәп йәшә, яҙ!

*(А. Игебаев)*

**сарса/рға** — сильно хотеть пить
**һырға** — серьги
**мәғрур** — гордый, величавый
**сал** — древний, седой

1. Шиғырҙы ролдәргә бүлеп, тасуири уҡығыҙ.
2. Яҙ нимәләргә өндәшә? Өндәш һүҙҙәрҙе табығыҙ һәм яҙып ҡуйығыҙ.
3. Яҙ уларға нимә бүләк иткән?
4. *Һәр бер тирәгемә ул*
   *Йәм-йәшел һырға элде* һөйләмен нисек аңлайһығыҙ?
5. Шиғыр һеҙҙә ниндәй тәьҫораттар ҡалдырҙы? Һөйләгеҙ.

**3.** Тексты тасуири уҡығыҙ.

## Тал бөрөһө

Март башы ине. Көндәр йылына. Әммә ҡалын ҡар һис бирешмәй. Беҙ ҙә, ҡыштың һуңғы көнөндә тау шыуып ҡалмаҡсы булып, иртәрәк торҙоҡ. Көн бер аҙ йылынғас, өс йәшлек ҡыҙым менән ҡала паркына киттек. Текә яр буйы бала-саға менән тулған. Кем санала, кем саңғыла шыуа. Малайҙар тауҙың иң бейек түбәһенә тиклем менеп етә лә, ҡоштай осоп, түбәнгә атыла.

Шул ығы-зығыла берәүҙең ҡыйыуһыҙ ғына тауышы ишетелде. Боролоп ҡараным. Янымда бәләкәй саңғысы тора.

— Әйтегеҙсе, тал бөрөһөн ҡайҙан табып була?

Көтөлмәгән һорауға аптырап ҡалдым.

— Ана бит.

Малай яйлап ҡына, көрт йырып, тал яғына китте. Талға етер-етмәҫ туҡтап, таяғы менән төртөп, тағы һораны:

— Ошолармы?

Мин малайҙың талды бөтөнләй танымауын аңлап, уның янына ашыҡтым. Ҡыҙым да, санаһын һөйрәп, беҙҙең арттан эйәрҙе. Уны күреп, малай:

— Аяғыңда быйма ғынамы? Саңғыларың юҡмы ни? Көрткә батаһың бит, — тип хафаланды. Беҙ өсәүләп ботаҡ һайларға тотондоҡ.

— Миңә эре, бүртә башлаған бөрө кәрәк, — ти яңы танышыбыҙ.

— Ә һин уны нишләтәһең?

— Әсәйемә, 8 Март етә бит.

Малай талды һаҡ ҡына һындыра, үҙе һөйләнә.

— Юҡҡа бәкемде алмағанмын. Ағас йәрәхәтләнә.

Өс-дүрт ботаҡ һындырғас:

— Миңә етте, — тине.

Беҙ тауға күтәрелә башланыҡ. Шул саҡ таныш тауыш ишетелде:

— Мин был яҡҡа ҡайтам, һау булығыҙ!

— Һау бул.

Кем балаһы икән был әҙәпле малай? Һорамай булдыра алманым.

— Ә һинең исемең кем, ҡустым? Нисәнсе класта уҡыйһың?

— Өсөнсө класта. Рәшит Юлдашев булам мин, апай, — тине лә шәп-шәп атлап ары китте.

*(Л. Фархшатова)*

**һис бирешмәй** — никак не поддаётся
**тау шыу/ырға** — кататься с горы
**тауҙың иң бейек түбәһенә** — на самую вершину горы
**шул ығы-зығыла** — в этой суматохе
**көрт йырып** — пробиваясь через сугроб
**таяғы менән төртөп** — показывая палкой
**таныш** — знакомый
**бүрт/ергә** — набухать
**хафалан/ырға** — беспокоиться
**һайларға тотондоҡ** — начали выбирать
**һорамай булдыра алманым** — не могла не спросить
**ары китте** — пошёл дальше

1. Текст буйынса план төҙөгөҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
2. Тексты роллəп уҡығыҙ.
3. Рәшит ни өсөн паркка килә?
4. Уны ниндәй малай тип уйлайһығыҙ? Фекерегеҙҙе миҫалдар менән иҫбатлағыҙ.
5. Текста ниндәй байрам тураһында һүҙ бара?
6. Ул байрамға һеҙ нисек әҙерләнәһегеҙ?

**4.** Һорауҙарҙы интонация менән уҡығыҙ һәм яуап бирегеҙ, һуңынан «Яҙ» темаһына кескәй хикәйә төҙөгөҙ.

— Һеҙ яҙ килеүен ҡайҙан беләһегеҙ?
— Яҙ көнө тәбиғәттә ниндәй үҙгәрештәр күҙәтелә?
— Иң беренсе булып беҙгә ҡайһы ҡоштар әйләнеп ҡайта? Ҡасан?
— Яҙын улар ниндәй эш менән мәшғүл?
— Ҡара ҡарғаларҙан һуң ниндәй ҡоштар ҡайта?
— Һеҙ сыйырсыҡтарҙы нисек ҡаршы алаһығыҙ?
— Мәктәп оҫтаханаһында сыйырсыҡ оялары эшләйһегеҙме?
— Ҡоштарҙың ниндәй файҙаһы бар?



*Ғәлим Дәүләди (1936—2016) (Ғәлим Абдулла улы Дәүләтов) 1936 йылда Башҡортостандың Мәләүез районы Һәргәй ауылында тыуған.*

*1952—1955 йылдарҙа Өфө ҡалаһының 9-сы башҡорт интернат-мәктәбендә уҡый. Шул йылдарҙа ул шиғриәт менән мауыға.*

*Ғәлим Дәүләди 1960 йылда Башҡорт дәүләт университетын тамамлай. 1975—1977 йылдарҙа Мәскәүҙә Юғары әҙәби курстарҙа уҡый.*

*Уның «Мин — ер улы», «Урал йондоҙҙары», «Өҙөлгән япраҡтар» һәм башҡа бик күп китаптары баҫылып сыға. Мәскәүҙә рус телендә «Волны Нугуша», «Буду как мама», «Мальчики с Нугуша», «Помощник Акбай» тигән китаптары донъя күрә.*

*Ғәлим Дәүләди — Сергей Чекмарёв исемендәге премия лауреаты.*

## Яҙғы донъя

Һандуғастар шашып һайрағанда
Нисек йоҡлап ятмаҡ кәрәк?
Яҙ ҡояшы ерҙе уятҡанда
Серем итәме ни йөрәк?
Һыуҙар таша. Тауҙа ҡарҙар ирей.
Муйыл сәскәләнә инде.
Туғайҙарым, йәшел күлдәк кейеп,
Ҡаршылайҙар икән кемде?
Һандуғастар шашып һайрағанда
Нисек йоҡлап ятмаҡ кәрәк?
Эй, Хоҙайым! Яҙғы донъяларҙа,
Яҡты донъяларҙа ғашиҡтарға
Мөхәббәт иленә юл күрһәт!

**шаш/ырға** — неистовствовать
**Нисек йоҡлап ятмаҡ кәрәк?** — Как можно спать?
**таш/ырға** — разливаться, выходить из берегов

1. Яҙ килеүен шағир ниндәй күренештәр менән күрһәтә?
2. Яҙ кешеләргә нисек тәьҫир итә?

**5.** Тексты уҡығыҙ. Һөйләмдә нөктәләр ҡуйылыу осраҡтарын аңлатығыҙ. Рус теле менән сағыштырып, һығымта эшләгеҙ.

Ҡояшлы, йәмле яҙ етте! Бына тағы ҡуянтубыҡ сығыр, йыуа, ҡуҙғалаҡ, ҡаҡы, көпшә шытыр, унан муйыл, ҡарағат, ҡымыҙлыҡ етешер, балан, бөрлөгән өлгөрөр. Оло Эйек туғайы төрлө-төрлө тәмле үләндәр, емештәр менән тулы булыр!

Оло Эйектең боҙо хәҙер-хәҙер ҡалҡынып, күтәрелеп, ағып китергә тора. Көмөш йылан кеүек борғоланып-борғоланып, ҡар һыуҙары аға. Бөтә әйләнә-тирәлә яҙғы ташҡын, яҙғы ярһыу хөкөм һөрә...

*(З. Биишева)*

1. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе дәфтәрегеҙгә тәржемәһе менән яҙығыҙ, уларҙы хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.
2. Беренсе абзацты күсереп яҙығыҙ. Үлән, емеш исемдәре аҫтына һыҙығыҙ. Һеҙ уларҙы таныйһығыҙмы?
3. Тексты нисек дауам итер инегеҙ?

**6.** Түбәндәге һөйләмдәрҙәге нөктәләр урынына һүҙҙәр өҫтәп яҙығыҙ. Һөйләмдәр теҙмәһен дауам итегеҙ.

| |
|---|
| турғай<br>бәпембә<br>балтырған<br>кесерткән<br>кәҙә һаҡалы<br>ҡаҡы<br>йыуа |

Яҙ көнө ҡояш нығыраҡ йылыта, ..., ... . Тау биттәре, ..., ..., ҡарҙан әрселә. Уйһыулыҡта, ..., ..., һыу йыйыла. Ҡар селтәрләнә, ..., ... . Йылы яҡтан ҡара ҡарғалар, ..., ..., ..., ..., ... ҡайта.

**7.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Яттан яҙырға әҙерләнегеҙ.

## Яҙ

Урман эстәрендә матур ҡоштар
Ағастарҙа япраҡ һанайҙар,
Япраҡтарҙы һанап, ботаҡ һайлап,
Таң ҡаршылап улар һайрайҙар.

Ҡояш көлөп сыға, көлөп байый,
Асыулы көн оялып юғала.
Ай шаярып тыуа, уйнап бата,
Төндәр уны тыңлап таң ҡала.

*(Б. Ишемғол)*

8. Йәйә эсендәге һүҙҙәрҙең мәғәнәһе тура килгәнен һайлап яҙығыҙ. Улар ниндәй һүҙҙәр? Һығымта яһағыҙ.

(Һаумы, шәпме, иҫәнме, сәләмәтме), ҡуш тирәк. Хәлеңде белергә килдем. Эйе, (ҡабаланып, ашығып), һин тағы ла (үҫә, ҡеүәтләнә, көсәйә) төшкәнһеңдер, зәңгәр күккә ынтылыуҙан (һылыуланып, матурланып, гүзәлләнеп) киткәнһеңдер, тип килдем. Бер йыл һине күрмәгәнгә, бер оҙон, ауыр кисерештәргә (бай, мул ) йыл.

Мин бына бөгөнгө көнгә, ошо ергә килергә һүҙ биргән көнгә, (өлгөрөр, етешер) өсөн ашығып ҡайттым.

Мин (хәлдән тайып, арып, хәлем бөтөп, хәлһеҙләнеп) ҡуш тирәк төбөнә ултырҙым. Арығанмын шул. Бөгөн станциянан (елдереп осоп, һыпыртып) ҡайттым бит.

*(Ә. Вахитовтан)*

**Т** **9.** I. Күптән күрмәгән иптәшегеҙ менән осрашыу ваҡытын тасуирлағыҙ.
II. Бөгөнгө һауа торошон һүрәтләгеҙ.

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Тиң киҫәктәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр**

Если обобщающее слово стоит впереди однородных членов, перед однородными членами ставится двоеточие: Тормош уны **төрлө кешеләр**: изге күңеллеләре, хәйлә йөрөтөүселәре, ата дошмандары менән дә осраштырҙы. — Он встретил в своей жизни **разных людей**: и добрых, и с хитрыми умыслами, даже врагов.

Если обобщающее слово стоит после однородных членов, то перед ним ставится тире: Һинең уңыштарыңа мин дә, ағайым да, апайым да — **бөтәбеҙ ҙә** ҡыуанабыҙ. — И я, и брат, и сестра — **все** радуемся твоим успехам.

10. Тексты тасуири уҡығыҙ. Үрҙәге ҡағиҙәгә тап килгән һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ һәм аңлатығыҙ. Икенсе абзацта тейешле урынға нөктәләр ҡуйып, һөйләмдәргә бүлеп яҙығыҙ.

## Март

Марттың егерме өсө ине. Иртәнән үк көн бик үҙгәрҙе: аяҡ аҫты еүешләнде, лысҡылдап торҙо. Һуңынан бурап-бурап ҡар яуҙы. Ағастар, ҡыуаҡтар — һәммәһе лә аҡ күлдәк кейгән төҫлө булдылар. Өй стеналары ала-ҡолаланды, бүрәнә araларына аҡ билбау тарттылармы ни! Донъя ағарып китте.

Ул да түгел, ел ҡуҙғалды һәм баш түбәһенә тейерҙәй болоттарҙы ҡыуып таратты ялтырап ҡояш сыҡты, йылытып ебәрҙе былай

булһа, гөрләүектәр йоҡоларынан уянасаҡ һәм яҙғы йырҙарын башлаясаҡ инде... Әммә эш гөрләүектәргә үк барып етмәне, гүйә, болоттар асыуландылар ҙа кире әйләнеп килделәр көн кискә ауышҡанда, йәнә ябалаҡ-ябалаҡ епшек ҡар яуа башланы.

*(Р. Ишморатованан)*

1. Март айының үҙенсәлектәрен билдәләгеҙ.
2. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе тәржемә итегеҙ.
3. Яҙылғандарға өҫтәп нимәләр әйтер инегеҙ?

**11.** Тиҙәйткестәрҙе шыма итеп уҡығыҙ.

1. Ҡара ҡарға ҡарҙан бара,
   Ҡанаттарын ҡаға-ҡаға,
   Эй маҡтана, эй маҡтана:
   «Ҡанат остарыма тағып,
   Яҙҙы килдем тағы алып!»
2. Ҡара ҡарға ҡарға баҫҡан.
3. Ҡараға ҡара, алманы алма.
   Ал төҫтәгеләрен ал!

**12.** Һорауҙарға нигеҙләнеп, диалог төҙөгөҙ.

— Китапханаға йөрөргә яратаһыңмы?
— Ниндәй китаптар оҡшай?
— Үҙеңдең китапханаң бармы?
— Иң һуңғы уҡыған китабың нисек атала?
— Заманса техник саралар китапты алыштыра аламы?

**13.** Һорауҙарға яуаптар яҙығыҙ.

Китапханаға йөрөйһөңмө? Ҡасан һуңғы тапҡыр китапханала булдың? Өйөгөҙгә ниндәй газета, журналдар алдыраһығыҙ? Һиңә ҡайһылары оҡшай? Ниндәй китаптар уҡырға яратаһың?

## Дөрөҫ әйтегеҙ!

ары китте, бире килә, быйыл көҙ, былтыр ҡыш, йыш була, кисә килгән

*Гөлфиә Юнысова (Иҙелбаева Гөлфиә Аҙнағол ҡыҙы) 1948 йылдың 10 сентябрендә Әлшәй районы Һарыш ауылында тыуа.*

*Раевка 1-се башҡорт урта мәктәбендә белем алғас, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Студент йылдарында уҡ йәш шағирәнең балалар өсөн «Миңә бары өс кенә» һәм «Зәңгәр тубым» тигән шиғри йыйынтыҡтары донъя күрә.*



*Сибай педагогия училищеһында рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләгән саҡта ла ижадын ташламай. Балалар өсөн «Яҙ хаҡында әкиәт», «Тылсымлы бүләк» һәм өлкәндәр өсөн китаптары баҫылып сыға.*

*Гөлфиә Юнысова 1973—1978 йылдарҙа «Совет Башҡортостаны» газетаһында хәбәрсе, «Пионер» журналында бүлек мөдире булып эшләй, ә 1978 йылдан 1999 йылға тиклем республикабыҙҙың «Башҡортостан ҡыҙы» журналында баш мөхәррир вазифаһын башҡара.*

*Әҙәбиәт, мәҙәниәт, журналистика, мәғариф өлкәһендә күрһәткән уңыштары өсөн шағирә, журналист һәм сәйәсмән Гөлфиә Юнысова «Почёт билдәһе» ордены менән бүләкләнә. Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы, Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһы һәм М. Аҡмулла исемендәге премия лауреаты, Башҡортостандың халыҡ шағирәһе.*

## Әсәйҙәр бит яҙҙар кеүек

**Яҙғы** ҡояш балҡый күктә,
Үҙе ҡайнар, үҙе яҡты.
Әсәләрҙең ҡарашы ла
Нурлы итә тирә-яҡты.

Бөрөләрҙе тирбәлдереп,
**Йылы, йомшаҡ** елдәр иҫә.
Әсәләрҙең наҙлы һүҙе
Бәхетле һәм көслө итә.

Ҡарҙы тишеп сәскә сыға.
Гөрләп тора **алһыу** таңдар.
Әсәйҙәр байрамы менән
Башланалар **зәңгәр** яҙҙар.

Яҙ байрамын ҡыуанышып
Ҡаршылайбыҙ йырлап-бейеп.
Әсәйҙәр бит үҙҙәре лә
Мәңге көләс яҙҙар кеүек.

1. Автор әсәне нимә менән сағыштыра?
2. Әсәләрҙең ҡарашы, һүҙе донъяны нисек үҙгәртә?
3. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Һығымта эшләгеҙ.
4. *Ҡарҙы тишеп сәскә сыға* тигәндә нисек аңлайһығыҙ?
5. Шиғырҙа әйтелгән байрам тураһында һөйләгеҙ. Һеҙ әсәйҙәрегеҙҙе ниндәй һүҙҙәр менән ҡотлар инегеҙ?

мәңге
күләгә
билбау
кисереш
сәйәсмән



**14.** Һүрәт буйынса «Башҡортостанда яҙ» темаһына хикәйә яҙығыҙ. Белешмә өсөн һүҙҙәрҙе ҡулланығыҙ.

1. План төҙөгөҙ.
2. Ниндәй эпиграф һайлар инегеҙ?

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *яҙ, йылы, ҡояш, бөрөләр, ағастар, урмандар, ҡоштар, ҡош оялары, хайуандар, үлән, йәшел, тәүге сәскәләр, кешеләр, урам, гөрләүек, уҡыусылар, мәктәп, йырғанаҡтар, ҡоштар, миҙгел.*

**15.** Тексты күсереп яҙығыҙ. Бер-берегеҙҙең эшен тикшерегеҙ һәм баһалағыҙ.

## Әсә йыры

Минең донъяла иң тәү күргән нәмәм, иң тәү тойған нәмәм — үҙ әсәйемдең йөҙө, уның йыры.

Әсә йыры — донъялағы иң бөйөк йыр. Сәңгелдәк йыры булмаһа, моғайын, башҡа йырҙар ҙа булмаҫ ине. Ул ваҡыт, күрәһең, донъя-

лағы бәхет тә, шатлыҡ та әлегенән байтаҡҡа ҡайтышыраҡ булыр ине. Беҙ әсә йырын тиҫтәләрсә ваҡыт үткәс тә, тормошобоҙҙоң иң ауыр һәм иң бәхетле сәғәттәрендә иҫкә төшөрәбеҙ.

*(Ғ. Рамазановтан)*

1. Тексттың йөкмәткеһен һөйләгеҙ.
2. Яҙылғандарға өҫтәп тағы нимәләр әйтер инегеҙ?

**16.** Бишек йырын тасуири уҡығыҙ. Күсереп яҙығыҙ. Яттан яҙырға әҙерләнегеҙ.

Йоҡла, улым (ҡыҙым), йом күҙең,
Йом-йом күҙең, йондоҙом.
Кисен тыныс йоҡлаһаң,
Уйнап үтер көндөҙөң.
Әлли-бәлли, бәү-бәү,
Әлли-бәлли, бәү-бәү.

**17.** Тексты тасуири уҡығыҙ. Уны абзацтарға бүлегеҙ, рус телендәге һүҙҙәрҙе тәржемә итеп, күсереп яҙығыҙ. Бер-берегеҙҙең эшен тикшерегеҙ һәм баһалағыҙ.

## Апрель

Апрелдә *первый* яҙ ямғыры — ләйсән яуып үтә. Ҡоштарҙың йылы яҡтан ҡайтыуы ай буйына тиерлек *продолжается*. Тәүге көндәрҙә *скворцы* менән һабантурғайҙар килә. Халыҡта «сыбар сыйырсыҡтар алда килһә, иген уңыр» тигән *примета* йөрөй. Был айҙа йылғалар *от льда* әрселә, ярҙарынан сығып таша. Ләкин яҙғы ташҡын осоро оҙаҡҡа һуҙылмай. Ул ун көн йәки шунан бер аҙ ғына артығыраҡ дауам итә. Урманға ла йәнлелек инә. *Тетерев* менән *глухарь* күренә. Оҙон ҡыштан һуң *растения* уяна. Ҡарҙан әрселгән битләүҙәрҙә сәскә *расцветает* үгәй инә үләнен күрергә мөмкин. Яҙҙың *первые цветы* күренеү менән, иңкештәр һәм бал ҡорттары ояларынан осоп сыға. Көндән-көн *насекомые* күбәйә, *бабочки* терелә. Ғөмүмән, был айҙа бар тереклек уяна.

*(«Мәктәп календары»нан)*

1. Апрель айының үҙенсәлектәре тураһында һөйләгеҙ.
2. Яҙылғандарға өҫтәп, үҙ күҙәтеүҙәрегеҙ буйынса нимәләр әйтә алаһығыҙ?

**18.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Антонимдарҙың аҫтына һыҙығыҙ. Яттан яҙырға әҙерләнегеҙ.

Ағастарҙы япраҡ биҙәй,
Сәскә биҙәй аҡланды,

Төндәрҙе көмөш ай биҙәй,
Сулпан биҙәй сал таңды!
Йылғаны тулҡын матурлай,
Ҡояш нурлай көндәрҙе...
Минең дә гөл иткем килә
Тыуып үҫкән ерҙәрҙе.

*(А. Игебаев)*

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

**Ябай һөйләм төрҙәре**

По строению грамматической основы простые предложения делятся **на двусоставные *(ике составлы)*** и **односоставные *(бер составлы)*.**

Предложения, грамматическая основа которых состоит из подлежащего и сказуемого, называются **двусоставными *(ике составлы)***: Быйыл **япраҡтар** иртә **һарғайҙы.** — В этом году листья рано пожелтели.

Односоставными (бер составлы) называются предложения, которые имеют только один главный член: Был турала өләсәйеңә лә хәбәр ит. — Об этом сообщи и бабушке.

По наличию второстепенных членов простые предложения могут быть **нераспространёнными *(йыйнаҡ)*** и **распространёнными *(таркау)***: Ҡоштар һайрай. — Птицы поют (простое двусоставное нераспространённое предложение). Уҡыусылар дәрестә үҙҙәрен бик тыныс тотто. — Ученики вели себя на уроке очень спокойно (простое двусоставное распространённое предложение).

**Распространёнными** и **нераспространёнными** могут быть и односоставные предложения: Иртәгә ҡайҙа бараһығыҙ? — Завтра куда поедете? (простое односоставное распространённое предложение). Яҡтыра. — Светает (простое односоставное нераспространённое предложение).

Т **19.** I. Тәҡдим ителгән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатығыҙ. Һүҙҙәр теҙмәһен дауам итегеҙ.

яҙ, көн, гөрләүек, тау биттәре, төн, ҡояш, ҡоштар, ағастар

?
1. Һүҙҙәрҙән һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр, һуңынан бәйләнешле текст уйлап яҙығыҙ.
2. Үҙегеҙ уйлап яҙған текстҡа исем бирегеҙ.

**20.** Кроссвордта яҙылған һүҙҙән сығып, яҙ темаһына ҡағылышлы һүҙҙәрҙе вертикаль буйынса тултырып яҙығыҙ һәм һәр һүҙҙең мәғәнәһен аңлатығыҙ.




1. *Тыныслыҡ* һүҙендәге хәрефтәрҙән һүҙҙәр уйлап яҙығыҙ.
2. Дүрт һөйләм уйлап яҙығыҙ.

**21.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе тәржемә итегеҙ.

## Билдәһеҙ һалдат кәбере

Юл сатында тора бер ҡалҡыулыҡ,
Ул ҡараулы һәр саҡ, ҡәҙерле.
Йондоҙ менән өс һүҙ балҡып яна:
«Билдәһеҙ һалдаттың кәбере».

Хаҡлыҡ өсөн башын һалған икән,
Бер батыр ҙа булмай билдәһеҙ.
Халыҡ йәшәй икән, хәтер йәшәй,
Йылдар хәтерендә иҫтә һеҙ.

Һеҙ — кемдеңдер көткән атайҙары
Йә бирәүҙең ғәзиз балаһы.
Кемдәрҙеңдер йәнкәй-йәнәштәре,
Уңалмаҫлыҡ йөрәк яраһы.

Ил-әсәне, Ер-әсәне һөйөү
Батыр иткән ябай кешене.
Ул һалдаттың исеме — Үлемһеҙлек,
Ҡаһарманлыҡ — уның исеме.

*(З. Ҡотлогилдина)*

**билдәһеҙ** — неизвестный
**хаҡлыҡ** — справедливость
**хәтер** — память
**ғәзиз** — дорогой
**уңалмаҫлыҡ** — незаживающий
**ҡаһарманлыҡ** — героизм

ҡалҡыулыҡ
билдәһеҙ
хәтер
ҡаһарманлыҡ
ихтыяр
маҡсат

1. Шиғырҙың төп темаһын билдәләгеҙ.
2. Ни өсөн шиғыр «Билдәһеҙ һалдат ҡәбере» тип атала?
3. Шиғырҙың һәр строфаһын уҡып, йөкмәткеһен аңлатығыҙ, фекер алышығыҙ.
4. Был темаға уҡылған әҫәрҙәрҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.

## Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!

### Односоставные предложения глагольного типа

**Определённо-личные предложения *(билдәле эйәле һөйләмдәр)*** обозначают действие конкретного лица (группы лиц). Главный член этих предложений выражается: 1) глаголом изъявительного наклонения 1-го и 2-го лица единственного и множественного числа настоящего и будущего времени: Кисә хат **алдым.** — Вчера получил письмо. Ҡайҙа **киттегеҙ?** — Куда пошли? 2) глаголом повелительного наклонения: Атаңдың ғына улы **булма**, халҡыңдың да улы **бул.** — Будь сыном не только отца, но и своего народа.

Форма главного члена указывает на определённое лицо: мин — я, һин — ты, беҙ — мы, һеҙ — вы.

**В неопределённо-личных предложениях *(билдәһеҙ эйәле һөйләмдәр)*** главный член выражается: 1) глаголом изъявительного наклонения в форме 3-го лица множественного числа настоящего и будущего времени; 2) глаголом изъявительного наклонения в форме множественного числа прошедшего времени. В них действующее лицо мыслится неопределённо: Кисә **ҡайтманылар.** — Вчера **не приехали.**

**Безличные предложения *(эйәһеҙ һөйләмдәр)*** обозначают явления природы, психическое, физическое состояние человека. Поэтому главный член не допускает постановки вопроса именительного падежа. Например: Яҡтыра. — **Светает.** Ул юлдан **үтеп булмай.** — По той дороге **невозможно пройти.** Ҡалтырата. — **Знобит.**

Односоставные предложения именного типа представлены **назывными предложениями *(атама һөйләмдәр)*.** Они утверждают наличие, существование предмета, явления, факта; состоят только из подлежащего: Өфө. — **Уфа.** Бына мәктәп. — **Вот школа.** Ниндәй һауа! — **Какой воздух!**

**22.** Нөктәләр урынына тейешле һүҙҙәр ҡуйып, тексты тасуири уҡығыҙ. Бер составлы һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ, төрөн билдәләгеҙ.

## Ихтыярҙы тәрбиәләргә кәрәк

Бер кем дә көслө ихтыярлы булып тыумай. Был һәйбәт сифатҡа эйә булыу — һәр кемдең үҙенән, маҡсатҡа ирешеү өсөн ҙур ... һалыуынан килә.

Көслө ихтыярлы булыу — үҙеңдәге ... бөтөрөү өсөн көрәш тигән һүҙ ул.

Беренсе тапҡыр парашюттан һикереүем хәтеремдә.

Беҙ, бер төркөм курсанттар, һауаға күтәрелдек. Самолётта мин бик борсолам: «Парашют асылмаһа, харап булам бит», — тигән уй килә башыма. Шунан тағы: «Ҡурҡаҡ йән. Ана, иптәштәреңә ҡара!» — тип шелтәләйем үҙемде.

Йөрәгем дарҫлап тибә. «Әллә һикермәҫкә инде? Юҡ! Ҡурҡаҡ исемен күтәреп йөрөүҙән үлемең артығыраҡ!» — тинем дә асыҡ ... болоттар өҫтөнә ташландым. Ергә төшкәс белдем: самолётта бөтәбеҙ ҙә ҡурҡыу менән алышҡанбыҙ икән.

Хәҙер мин «кеше үҙен теләһә ниндәй батырлыҡ эшләргә лә мәжбүр итә ала» тигән фекерҙәмен.

Ҙур йылғалар кескәй ... башланған кеүек, көслө ихтыярлы кешеләр ҙә үҙҙәрен оло маҡсат өсөн ... әҙерләгәндәр.

*(А. Мағазовтан)*

**ихтыяр** — воля
**дарҫлап тибә** — *зд.:* сильно стучит
**ҡурҡыу** — страх
**маҡсат** — цель

Белешмә өсөн һүҙҙәр: *ишектән, йәштән, етешһеҙлектәрҙе, тырышлыҡ, шишмәләрҙән.*

1. Көслө ихтыярлы булыу нимәнән тора?
2. Һуңғы абзацты ҡабатлап уҡығыҙ һәм фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
3. «Ихтыярҙы нисек тәрбиәләргә» тигән тема буйынса әңгәмә ойоштороғоҙ.

**23.** Тексты уҡығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ.

Особой страницей легли в историю войны 900 страшных голодных дней Ленинграда.

23 июня 1941 года в Ленинграде подан первый сигнал воздушный тревоги. Блокада началась в конце августа 1941 года, когда были перерезаны все пути из Ленинграда в страну.

...Разным он был, хлеб войны. В музее истории в Ленинграде лежит серый ломтик блокадного хлеба. Те самые 125 граммов,

которые составляли суточный паёк ленинградцев. Мимо этого ломтика никто не проходит равнодушно. А в центре мемориала Пискарёвского кладбища выставлен дневник Тани Савичевой, погибшей в 1944 году. Записки, сделанные синим карандашом рукой школьницы.

*(К. Ахияров)*

**история** — тарих
**голодный** — ас
**воздушный** — һауа
**ломтик** — телем
**суточный** — бер көнлөк

1. Текст йөкмәткеһенән тыш Ленинград блокадаһы тураһында белгәндәрегеҙҙе өҫтәп һөйләгеҙ.
2. Таня Савичева тураһында нимәләр беләһегеҙ?

**24.** Е. Кучеровтың тексынан алынған һөйләмдәрҙе үҙ урындарына ҡуйығыҙ. Тексҡа исем бирегеҙ.

1. Апрель ҡояшы ҡарҙы бик тиҙ иретә.
2. Улар бер-береһе менән ҡушылып, шашып аҡҡан ташҡынға әйләнә.
3. Апрель башында һауа төрлө була: ҡары ла яуа, ҡояшы ла ҡыҙҙыра, ямғыры ла яуып китә.
4. Тейен, һыҫар кеүек йәнлектәрҙең балалары донъяға килә.
5. Ай башында беҙгә сыйырсыҡтар ҡайтып етә.
6. Йылғаларҙа боҙҙар китә, һыуҙар таша.
7. Яҙғы баҫыу эштәре башлана.
8. Апрелдә ҡар иреп бөтә, йылы яҡтан ҡоштар ҡайта.
9. Апрелдә урмандарҙа, тау битләүҙәрендә ҡорҙар һәм һуйырҙар уйнай.
10. Ауыл эшсәндәре, баҡсасылар өсөн апрель — ҡыҙыу осор.

**25.** Диалогты дауам итегеҙ.

— Роберт, бөгөн минең менән музейға бараһыңмы?
— Ҙур теләк менән.
— ...

| |
|---|
| хаҡлыҡ |
| ғәзиз |
| ташҡын |
| тарих |
| сафлыҡ |

**26.** Файҙалы кәңәштәрҙе уҡығыҙ. *Гөл* һүҙен тейешле формала ҡуйып, күсереп яҙығыҙ. Яҙылғандарҙы хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

## Гөлдәр тәрбиә ярата

1. Ҡышҡы көндәрҙә бүлмә ... урындарын йыш алыштырмағыҙ. Сөнки уларҙың япраҡтары яҡтыға борола, урындарын алыштырһаң, һабаҡтары зәғифләнә.

2. Әгәр ... һауытындағы тупраҡ артыҡ кибеп, ярғыланып бөтһә, уға аҙ ғына бысҡы онтағы йә ҡом һалығыҙ.

3. Бүлмә ... һыуҙы артыҡ күп һипмәгеҙ. Һыу һибеп 2—3 сәғәт ваҡыт үтеүгә, һауыт төбөнә ҡуйылған тәрилкәләге һыуҙы түгегеҙ.

4. Үҙәктән йылыта торған йорттарҙа бүлмәләр кәрәгенән артыҡ ҡоро булһа, ... айына бер тапҡыр һөт һибегеҙ.

5. Фикустың япраҡтары ялтырап, йәм-йәшел торһон тиһәгеҙ, ... һабағы менән тамыры тоташҡан урынға бер балғалаҡ кастор майы һибегеҙ.

6. ... йылылыҡ сығарыусы әйберҙәрҙән алыҫ торорға тейеш. Үтә һыуҡан ел дә уларға зарарлы.

7. Бүлмә ... сафлыҡ биреү өсөн, уларға еңелсә балланған һыу һибеү яҡшы.

**27.** Тексты тасуири уҡығыҙ. Уның төп фекерен билдәләгеҙ. Тексты күсереп яҙығыҙ, сифаттарҙың аҫтына һыҙығыҙ, бер-берегеҙҙең эшен тикшерегеҙ.

## Аҡ ҡайын

Ауылыбыҙҙың осонда түңәрәк кенә бер аҡлан бар. Яҙ етеү менән, аҡлан өҫтөн йәшел үлән ҡаплай, тәүге сәскәләр күҙҙәрен аса.

Элегерәк уртала аҡ ҡайын үҫә ине. Ер йәшәргәс, ул аҡланды йәмләп, нәфис япраҡтарын ярып ултыра торғайны. Ләкин быйыл яҙ аҡ ҡайын өндәшмәй генә, моңһоуланып тора бирҙе, сөнки уҙған йәйҙә тыйнаҡһыҙ малайҙар уның ботаҡтарын һындырҙылар, бысаҡ менән уңалмаҫ йәрәхәттәр яһап, тәмле һыуын ағыҙып эстеләр. Ул ғына етмәгән, тәртипһеҙ малайҙар ҡайынға ут төртөп киткәндәр.

Ерҙә тағы яҙ шаулай. Елбер-елбер килеп, береһенән-береһе матур күбәләктәр оса, турғайҙар яңы тыуған көнгә ҡыуанышып күңелле йырҙарын һуҙа. Тик ҡайын ғына һаман терелмәй. Тирә-яғындағы көйгән үләндәр ҙә баш ҡалҡыта алманы. Үҙен маҡтап йырлаған ҡоштар ҙа, күләгәһендә ял итергә ратҡан кешеләр ҙә ҡабаттан күренмәне. Аҡ ҡайын ғына бер үҙе тороп ҡалды.

Эх, аҡ ҡайын! Яҙғы иртәләрҙә һаман да үҙеңдең йәшел, гүзәл сағыңдың кире ҡайтырына ышанаһың, өмөтләнәһең.

Тәбиғәттең бер генә бизәге юғалһа ла донъябыҙҙың бер мөйөшө кителгән һымаҡ тойола. Эй, кешеләр, һаҡлайыҡсы тыуған еребеҙҙе, тәбиғәтебеҙҙе, илатмайыҡ аҡ ҡайынды! Улар беҙҙән мәрхәмәтле ярҙам көтә.

*(«Йәншишмә» газетаһынан)*

**тыйнаҡһыҙ** — *зд.:* хулиганы
**кителеү** — откалываться

# Йәмле йәй айҙары

1. Уҡығыҙ. Тексты абзацтарға бүлегеҙ. Уның буйынса план төҙөгөҙ. Июнь айының үҙенсәлектәре тураһында һөйләгеҙ.

Июнь — йәй башы. Халыҡ иҫәбе буйынса йәй әлморон сәскә атҡан, ҡурай еләге, балан ағасы тажын асҡан ваҡытта башлана. Болгар боросо, помидор, ҡыяр, ҡарбуз, ҡауын, ҡабаҡ үҫентеләре теплицанан асыҡ һауаға сығарып ултыртыла. Йәйге ҡояштың йылы нурҙарында емеш ағастары, еләк ҡыуаҡтары япраҡтарын киң йәйеп, тамырҙарын тәрән ебәреп, иркенләп үҫә. Шул уҡ ваҡытта сүп үләндәре лә ҡотороноп үҫә, баҡса ҡоротҡостары төҙәтә алмаҫлыҡ зыян килтерә. Тәжрибәле баҡсасылар ҡоротҡостарға ҡарата үҫемлек төнәтмәләрен уңышлы ҡуллана. 19—25 июнь — ҡояштың иң юғары нөктәлә сағы. Был ваҡытта эңер менән таң ҡауыша, аҡ төндәр барлыҡҡа килә. Беҙҙең киңлектә лә төндәр ҡараңғы булыуҙан туҡтай, көн оҙонлоғо 17 сәғәт 33 минутҡа етә. Июнь — тәбиғәттә тыныслыҡ айы.

*(«Мәктәп календары»нан)*

**Беләһегеҙме?**

Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнөн үткәреү тураһындағы ҡарар 1925 йылда Женева ҡалаһында балалар именлеге мәсьәләләренә арналған Бөтә донъя конференцияһында ҡабул ителгән. Балалар именлеген һәм һаулығын һаҡлау мәсьәләләре бик актуаль булған ваҡытта Парижда 1949 йылда ҡатын-ҡыҙҙар конгресы үтә, унда ҡатнашыусылар балаларҙың берҙән-бер бәхет гарантияһы — донъяла тыныслыҡ булдырыу тураһында ант бирә. Унан һуң бер йыл үткәс, йәғни 1950 йылдың 1 июнендә беренсе тапҡыр Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнө үткәрелә һәм ул йыл һайын ойоштороla башлай.

2. Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

**Бала булып булмай,**
**тик бала саҡ...**

Бала булып булмай, тик бала саҡ —
Һәр саҡ ҡайтып килә торған ил;
Күңел гөлдәреңдең саңын ҡағып,
Мәңге сафлап, наҙлап торған ел.
Һин, донъяны яҡын күргең килһә,
Бала күҙе менән баҡ уға:
Донъя шундай сағыу, шундай ғәжәп,
Иҫең китерлек бит донъяға!

Ҡояш сыға, сыҡ-сыҡ, тиеп һаман,
Болоттарға һуҙһам ҡулымды.
Ҡояш! Эй һин, балалыҡ ҡояшым,
Ғүмер буйы яҡтырт юлымды!

*(Р. Ғарипов)*

**һәр сак** — всегда
**күңел** — душа
**мәңге** — вечно
**баҡ** — смотри
**ғәжәп** — удивительный

?
1. Автор бала сак тураһында нимәләр әйтә?
2. Уға нисек ҡарарға өндәй?
3. Автор өсөн унда нимәләр асыла?
4. *Ҡояш! Эй һин, балалыҡ ҡояшым,*
   *Ғүмер буйы яҡтырт юлымды!* —
   юлдарын нисек аңлайһығыҙ?
5. Шиғыр йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләгеҙ.

курсаулыҡ
мәңге
күңел
ғәжәп

Т

**3.** Тәкдим ителгән терәк һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәрҙе иғтибар менән уҡығыҙ. «Йәй» темаһына бәйләнешле текст төҙөгөҙ.

йәй, йылы, йәшел, япраҡтар, тәбиғәт ҡосағында, һандуғас, төрлө төҫтә, шифаханала, урман, тау, ҡара ер, баҫыу, экскурсия, алыҫта, ҡояшта ҡыҙыныу, ҡоштар тауышы, аҡ болоттар, һайрай, ел, кәбән, шаулай, ял ваҡыты, ҡайын, июль, еләк, дарыу үләндәре, түшәлгән, костер, бешә, ел, һуҡмаҡ, алғы, салғы тауыштары, йәшен, ямғыр, ялан, ял итеү, йондоҙҙар, һыу инеү, күңелле, баҡса эштәре, аяҙ, төнгө серенада, уйындар, йылға буйы, сәскәләр

**4.** Һынамыштарҙы уҡығыҙ. Иҫегеҙгә төшөрөп, һәр берегеҙ берәй һынамыш өҫтәп әйтегеҙ. Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ, берәйһен яттан яҙығыҙ.

Июндең егерме һигеҙендә яуған ямғыр ете аҙнаға һуҙылыр. Күктәге йондоҙҙар күп атылһа, ел булыр. Йәйғорҙоң ике башы ла һыуға төшһә — ямғыр яуыр, тауға булһа — аяҙ булыр. Ямғыр яуырға булһа — томан күтәрелер. Ҡырмыҫҡа иләүе йәнләнһә, көн яҡшырыр. Иртән ҡуйы томан төшөп, ҡояш сығыуға тиҙ генә таралып бөтһә, һауа торошо оҙаҡ аяҙ булыр.

## Дөрөҫ әйтегеҙ!

көнбағыш, ҡарабойҙай, күл ҡамышы, аҡ икмәк, ҡара икмәк

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

Ҡуш тартынҡыларға бөткән уртаҡлыҡ исемдәргә килеш ялғауы ҡушылғанда, тартынҡыларҙың береһе яҙылмай: грамм — грамды, грамға.

Яңғыҙлыҡ исемдәргә ҡушылғанда һаҡлана: Кузбасс — Кузбасста.

**5.** Тексты тасуири уҡығыҙ. *Металл* һүҙен дөрөҫ итеп яҙығыҙ. Һығымта эшләгеҙ.

## Терегөмөш

Терегөмөш — ... . Ул шыйыҡ хәлдә осрай. Был ... иҫ киткес үҙенсәлектәре бар. Ул көмөш һымаҡ ялтырай. Үҙе ҡара ҡурғаш кеүек ауыр. Яңылыш түгеп ебәрһәң, ваҡ ҡына тамсыларға таралып, тәгәрәп китә. Әгәр терегөмөш эсенә тимер киҫәге һалһаң, ул ҡалҡып сыға. Ә алтын һәм көмөш кеүек ... терегөмөштә ирей. Бына ниндәй ғәжәп ... ул!

Ләкин был ... кеше өсөн зарарлы. Әгәр градусник ярылһа, ҡул менән тейә күрмәгеҙ! Ололар һеперәп алһын да сығарып күмһен.

*(«Аманат» журналынан)*

**6.** Мәҡәлдәрҙең яртыһын табып яҙығыҙ.

| | |
|---|---|
| Иле барҙың — | һүҙең ҡыҫҡа булһын. |
| Ҡулың оҫта булһын, | дуҫ ҡәҙерен онотма. |
| Дуҫлыҡ, туғанлыҡ — | белмәгән белгәнен тешләр. |
| Дуҫ булһаң, | теле бар. |
| Белгән белгәнен эшләр, | бөтә байлыҡтан артыҡ. |
| Ялҡаулыҡ — хурлыҡ, | ҡышҡа керһәң, йәйҙе уйла. |
| Йәйгә сыҡһаң, ҡышты уйла; | тырышлыҡ — ҙурлыҡ. |

**7.** I. Тексты уҡығыҙ. Унда осраған яңы һүҙҙәрҙе яҙып алып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. Тексттың йөкмәткеһен башҡорт телендә һөйләгеҙ.

## Сабантуй

Слово «сабантуй» означает «праздник плуга». Закончив сев, крестьяне устраивали для себя день отдыха. Сабантуй был самым большим праздником в Башкирии и Татарии.

Удивительные вещи происходят на этом весёлом народном празднике.

Сидя на гладком бревне, два богатыря сбивают друг друга мешками, полными опилок; бегут наперегонки юноши с полными вёдрами воды на коромысле.

Два силача с завязанными глазами бьют горшки под громкий смех зрителей.

А рядом высокий столб. На самом верху столба — петух в клетке. Кто сможет подняться на столб и выпустить птицу на волю? Пробует один, другой, третий — и все скользят вниз.

Самое главное событие сабантуя — национальная борьба «курэш». Побеждает тот, кто кладёт противника на обе лопатки. Победителю обычно вручают барана.

*(По Т. Васильевой)*

?
1. Һеҙ һабантуйҙа булғанығыҙ бармы?
2. Текста ниндәй уйындар һүрәтләнгән?
3. Һабантуйҙа тағы ниндәй ярыштар, уйындар була?

!!
II. У. Г. Мөхәмәтшиндың «Ғаилә. Һабантуй» картинаһын иғтибар менән ҡарағыҙ. Картина буйынса һорауҙар уйлап яҙығыҙ һәм уның йөкмәткеһен һөйләгеҙ.

**8.** I. Йәй һәм яҙ миҙгелдәренең үҙенсәлектәре тураһында һөйләгеҙ.
II. Ни өсөн йәйҙе яратаһығыҙ?



*Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйенов 1928 йылдың 10 апрелендә Башҡортостандың Ҡырмыҫҡалы районы Үтәгән ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Тыуған ауылында ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай. Бер йыл Елем-Ҡаран урта мәктәбендә уҡығандан һуң, Өфөгә килеп, 9-сы мәктәп-интернатта урта белем алып сыға. 1947—1951 йылдарҙа Башҡорт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетында уҡый.*

*Ғайса Хөсәйеновтың әҙәби тәнҡит менән шөғөлләнә башлауы институтта уҡыған йылдарына тура килә. Уның беренсе тәнҡит мәҡәләһе 1949 йылда «Әҙәби Башҡортостан» журналында баҫылып сыға. Шунан алып уның башҡорт совет әҙәбиәтенең теоретик мәсьәләләренә арналған мәҡәләләре матбуғатта күренә башлай.*

*Ғ. Хөсәйенов проза өлкәһендә лә эшләй. Әҙәбиәт ғилеме өлкәһендә күрһәткән хеҙмәттәре өсөн ул Халыҡтар дуҫлығы ордены һәм миҙалдар менән бүләкләнә. Башҡорт АССР-ның атҡаҙанған фән эшмәкәре. «Заман. Әҙәбиәт. Әҙип» тигән китабы өсөн уға республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы бирелә.*

*Ғ. Хөсәйенов — Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы.*

## Ғәзиздәрҙән-ғәзиз тупраҡ

**Тупраҡтың беҙҙә төрлөһө бар: ҡараһы, һороһо, ҡыҙғылты.** Ерҙең ҡом-ташлыһы, ҡайраҡтайы, татырлыһы ла етерлек. Татыр ерҙә мал артыр. Ҡом-ташлыла емеш-еләге, бүтәне үҫер.

Иң ҡәҙерлеһе — бәрәкәтле ҡара тупраҡ. Иген ҡороп уңа, иген ишелеп үҫә, емеш һутланып бешә торған ер. Ҡара ыуылдырыҡтай ҡара ерҙе тот та икмәккә һыла.

Ана шул беҙҙе туйындырған, кейендергән, изге төйәгебеҙ булған еребеҙ өсөн халҡыбыҙ күпме тир, күпме ҡан түккән. Тыуған ер, тыуған тупраҡ шул тиклем ғәзиз, шуға ла:

— Шатлыҡтан шашып, ергә ятып аунайҙар;
— Ергә эйелеп ант итәләр;
— Ер үбеп, тәүбәгә киләләр;
— Ситкә китһә, бөртөктәрен бетеү итеп йөрөтәләр;
— Ғүмерҙәре бөткәс, ер ҡуйынына инәләр.

Халыҡ үҙенең яҙмышын ер менән мәңгелеккә бәйләгән.

«Ер, ил, ирек!» — тип, баҫҡынсыларға, иҙеүселәргә ҡаршы көрәшкә сыҡҡан.

«Ер, көн!» — тип, Бәҙерғол Юнаев батшалар алдына бырып хоҡуҡ даулаған.

«Ер, ил, ирек!» — тип, Салауат Юлаев яуға атылған.

«Ер, ирек, икмәк!» — тип, Шәһит Хоҙайбирҙин оран һалған.

Шулай ер төшөнсәһе тыуған төйәк, йорт-ер, ил-көн мәғәнәләрен алып, киңәйә, тәрәнәйә барған, олонан-оло, изгеләрҙән-изге тойғоларға эйә була барған ул ғәзиз тупрағыбыҙ.

**татырлы** — солонцеватый
**ҡом** — песок
**бүтәне** — остальное
**ыуылдырыҡ** — икра
**тәүбәгә килеү** — раскаиваться
**мәңгелеккә** — навечно
**баҫҡынсы** — грабитель, налётчик

1. Тексты тасуири уҡығыҙ. Төп темаһын билдәләгеҙ.
2. Кеше өсөн ҡара тупраҡ нимә ул?
3. Илем, ерем тип көрәшкә сыҡҡан батырҙар кемдәр?
4. Улар тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.
5. Ни өсөн тексттың тәүге һөйләме ҡалын хәреф менән бирелгән? Ҡағиҙәне иҫегеҙгә төшөрөп, аңлатма бирегеҙ.
6. Текст буйынса план төҙөп яҙығыҙ. Йөкмәткеһен һөйләгеҙ.

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

Предложения, состоящие из нескольких простых предложений, называются сложными.

В зависимости от средств связи сложные предложения делятся на союзные (сложносочинённые и сложноподчинённые) и бессоюзные.

**Сложносочинёнными** называются предложения, в которых простые предложения связываются друг с другом интонацией и сочинительными союзами: *Әсәйем ашарға бешерә, ә мин уға ярҙам итәм.* — Мама готовит кушать, а я ей помогаю.

**Сложноподчинёнными** называются предложения, в которых одно предложение подчинено другому и простые предложения связываются подчинительными союзами: *Ҡышын урман елһеҙ шаулаһа, буран булыр.* — Если лес зимой шумит в безветренную погоду, будет буран.

Бессоюзными называются предложения, в которых простые предложения связываются друг с другом интонацией, без помощи союзов: *Күк күкрәне, көслө ямғыр яуа башланы.* — Прогремел гром, начался сильный дождь.

**9.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Автор ни өсөн йәйҙе ярата?

## Йәйҙе яратам

Был донъяның биҙәге күп,
Ал, зәңгәр, һары.
Алтын көҙ ҙә яҡын миңә
Һәм сыуаҡ яҙы.
Һыуыҡ ҡыштың аҡ төҫтәрен
Берҙәй яратам...

Тауҙарҙы һандалға манып,
Ана, таң ата.
Зәп-зәңгәр күктән ергәсә
Һуҙыла ал нур.
Күкшел тауҙар ойоп ята —
Түҙемле, сабыр.
Донъяның бөтә биҙәген
Йәй бергә йыя.
Иң яратҡан миҙгелем дә
Йәй бына шуға.

*(Ғ. Фәйзи)*

сыуаҡ
нур
һуҡмаҡ
терегөмөш
хыял

**ойоп ята** — дремлет
**һандал** — наковальня

1. Автор йәйҙе нисек һүрәтләй? Уның әйткән һүҙҙәре менән килешәһегеҙме?
2. Һеҙ йәйҙе яратаһығыҙмы? Ни өсөн?
3. Шиғырҙы ятлағыҙ.

**10.** Тексты уҡығыҙ. Уның буйынса һорауҙар, план төҙөгөҙ. Текста күтәрелгән проблема буйынса инша яҙығыҙ.

## Йәй

Көтөп алынған йылы ла, йәмле лә йәй етте. Ана, йылға буйҙары сыр-сыу килеп һыу инеүсе бала-сағалар тауышынан гөрләп тора. **Улар йөҙәләр, сумалар, һыу сәсрәтешеп уйнайҙар**. Эй күңелле!

Болондар хәҙер йәйғор төҫтәре менән балҡый. **Күпме ал, ҡыҙыл, һары, зәңгәр сәскәләр!** Бихисап. Ана быуынлы үлән башҡаларҙан ҡалҡыбыраҡ ултыра. Зәп-зәңгәр сәскәһе ниндәй күркәм, зәңгәр күҙҙәр һымаҡ. Уларға эйәреп үҫкән меңьяпраҡ та, иғтибар менән ҡараһаң, ғәжәп матур икән. Гөлләмәне биҙәп торасаҡ. **Клеверҙар, кәрешкәләр, аҡ, күк ҡыңғырау сәскәләр һәм үләндәр, сәскә атып, болонға һәр ҡайһыһы үҙенсә йәм бирәләр, хуш еҫ аңҡыталар.** Был хозурлыҡҡа күңел ҡыуана, саф һауаһын һулаған һайын һулағы килә.

Ә урмандар йәшел диңгеҙме ни! Бары йүкәләргә генә аҙ-маҙ ҡар яуған. Эйе, сәскә атҡан улар. Үҙҙәренән ниндәй татлы еҫ аңҡый. Тирә-яҡтарында бал ҡорттары бызылдап осоп йөрөй.

Йәй йәме, йәй ҡояшы, саф һауаһы тәнгә — сихәт, күңелгә дәрт өҫтәй.

*(«Мәктәп календары»нан)*

**кәрешкә** — вика

1. Ҡалын хәрефтәр менән яҙылған һөйләмдәр алда үтелгән ниндәй грамматик темаларҙы асыҡлай?
2. Ике составлы ике һөйләм күсереп яҙығыҙ.
3. Сәскә исемдәрен яҙып алығыҙ. Бер сәскәне тасуирлағыҙ.

**11.** Тексты уҡығыҙ. Абзацтарға бүлеп, рус телендәге һүҙҙәрҙе тәржемә итеп, күсереп яҙығыҙ.

## Етте селлә мәлдәре

Йәй. Июль тулыһынса йәйге селлә миҙгеленә тап килә, шуға ла ул Башҡортостаныбыҙҙа *самый жаркий месяц* һанала. Был ай шулай уҡ *грозовые дожди* йыш булыуы менән айырылып тора. Йомарт июль ҡояшының, мул яуым-төшөмдәрҙең *шифаһын*, *пользу* һанап бөтөргөһөҙ. Был айҙа, кешеләр һыйланып ҡалһын тигәндәй, *природа* бай табын *организует*. Бер-бер артлы ер еләге, ҡурай еләге, бөрләгән,

ҡарағат, сейә емештәре өлгөрә. Аҡландарҙың сыбарлығына хайран ҡалырлыҡ: урман-болондарҙа бер юлы сәскә атҡан 30—40 *разные растения* күрергә була. *Такое богатство* башҡа бер айҙа ла юҡ! *Лечебные травы:* меңьяпраҡ, күк һәм һары мәтрүшкә, кейәү үләне сәскә ата. Йүкәләр, бал еҫе аңҡытып, шау сәскәлә ултыра.

*(«Башҡортостан календары»нан)*

**?**

1. Яҙылғандарға өҫтәп нимәләр әйтер инегеҙ?
2. Текст буйынса һәм үҙ күҙәтеүҙәрегеҙҙән сығып, июль айының үҙенсәлектәре тураһында һөйләгеҙ.
3. Ҡушма һөйләмдәрҙең аҫтына һыҙығыҙ, төрөн билдәләгеҙ.
4. Дарыу үләндәренең исемлеген дауам итегеҙ.

**Т**

**12.** Тәҡдим ителгән темалар буйынса һөйләгеҙ. Үтелгән шиғырҙар, һынамыштарҙы хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ. Терәк һүҙҙәр яҙығыҙ. План төҙөгөҙ.

1. Һыу буйында.
2. Йәйге йәмле көндәрҙә.
3. Сәскәле ялан.
4. Йәйге көн йыл туйҙыра.

**13.** Йәйә эсендәге һүҙҙәрҙе тейешле формала ҡуйып яҙығыҙ. Һығымта яһағыҙ. Тексҡа исем бирегеҙ.

Ҡояш — ул газ шарынан торған ҙур йондоҙ. Ундағы эҫелек 15 миллион (градус) етә. Башҡа (йондоҙҙар) ҡарағанда ул (ер) яҡынырак урынлашҡан. Шуға күрә ҡояш беҙгә ҙур булып күренә. Ер үҙ (күсәр) Ҡояш тирәләй әйләнә. Ер әйләнгәндә, (Ҡояш) ҡараған яғында — көн, ә икенсе яртыһында төн була.

Ҡояш (беҙ) яҡтылыҡ, йылылыҡ бирә. Ул булмаһа, Ер (йөҙө) бөтә тереклек үлеп бөтөр ине. Мәҫәлән, ҡараңғы (мәмерйә) үлән, ағас, сәскәләр үҫмәй. Кеше лә (ҡояш) йәшәй алмай. Ҡояш нуры төшмәгән ер аҫтында, һыу аҫтында эшләгән кешеләр ауырыуға тиҙ бирешеүсән була.

Ҡояш ягымлы ла, үҫал да. Ул ныҡ ҡыҙҙырғанда (баш кейем) йөрөргә ярамай. Эҫе тейеүе бар, хатта (тән) еңелсә бешеүе лә мөмкин.

*(Ф. Фәткуллина)*

**14.** Башватҡыста хеҙмәт тураһында мәҡәлдәр йәшеренгән. Уларҙы табығыҙ. Асҡысы — алфавитта.

1. 13 40 13 39 34 16 40 17 40 31 40 19, 15 37 34 1 34 1 23 5 1 26 1 22 17 1 25 31 37 19.

2. 26 37 23 37 34 16 37 15 — 7 27 23 16 37 15, 42 16 15 1 27 16 37 15 — 30 27 23 16 37 15.

3. 1 5 1 24 26 37  42 22 23 1 15  2 12 7 40 13, 14 8 34 8 18 8  30 8 7 17 40 26  2 12 7 40 13.

**15.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Шиғыр тыуҙырған тәьҫораттар менән уртаҡлашығыҙ.

Йәй уртаһы. Йәйғорҙарҙың
Дуғаланып ҡалҡынғаны,
Йәйғор булып тәбиғәттең
Мең-мең төҫтә балҡығаны.

Йәй уртаһы. Еремдең дә
Еткән ҡыҙҙай сая сағы.
Алда әле шатлыҡ биреп,
Бәхетте мул йыясағы.

Йәй уртаһы. Оҙон көндөң
Тирҙе ботлап һыҡҡан мәле,
Йылда ла бөтмәҫ эштәрҙең
Тап осона сыҡҡан мәле.

Йәй уртаһы. Ҡыҫҡа төндәр
Тылсымлы нур үргән сағы.
Донъялары матурҙарҙың,
Хыялдары матурҙарҙың
Матур төштәр күргән сағы.

*(Аҫылғужа)*

**дуғаланып** — дугой
**мул** — много
**ботлап** — пудами

1. Шиғырға ниндәй исем бирер инегеҙ?
2. Уның төп фекерен билдәләгеҙ.
3. Шиғыр буйынса йәй уртаһында ниндәй үҙенсәлектәр күҙәтелә?
4. Автор шиғырҙа бер үк һүҙҙәрҙе бер нисә тапҡыр ҡабатлай. Ни өсөн?
5. Шиғыр тураһында үҙ фекерегеҙҙе әйтегеҙ.

## Грамматика буйынса белешмә (8-се класс)

### Синтаксис

Предложение в башкирском языке состоит из двух блоков — блока подлежащего с относящимися к нему словами и блока сказуемого с относящимися к нему словами. Слова, обозначающие время и место, могут располагаться впереди этих групп в начале предложения. Одной из особенностей башкирского языка является то, что сказуемое завершает предложение. Например:

Беҙҙең класта ун биш уҡыусы **уҡый.** — В нашем классе **учится** пятнадцать учеников.

Кисә спорт залында ярыш **булды.** — Вчера в спортивном зале **было** соревнование.

### Маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре

Целью высказывания является сообщение, вопрос или побуждение. В соответствии с этим предложения в башкирском языке делятся на **повествовательные (хәбәр һөйләм), вопросительные (һорау һөйләм), восклицательные (өндәү һөйләм)** и **побудительные (бойороҡ һөйләм).**

**Повествовательное предложение (хәбәр һөйләм)** служит для выражения фактов и для описания, изображения предметов, людей, процессов, явлений и событий. В основе его лежит утверждение или отрицание чего-нибудь. Например:

Иртәгә беҙҙең **класс** циркка **бара.** — Завтра наш класс пойдёт в цирк.

Насар тауарға **реклама** ла **ярҙам итмәй.** — Некачественному товару и реклама не поможет.

Предложение, содержащее вопрос, называется **вопросительным (һорау һөйләм).** Значение вопроса в башкирском языке выражается:

1) вопросительными местоимениями (**ҡасан?** — когда? **кем?** — кто? **нимә?** — что? **нисә?** — сколько? и др.):

**Кем** килде? — Кто пришёл?

**Ҡасан** бараһың? — Когда поедешь (пойдёшь)?

2) вопросительными частицами **-мы/-ме, -мо/-мө** и вопросительной интонацией. При этом ударение падает на предпоследний слог:

Кисә килдең**ме**? — Ты вчера приехал?

В конце вопросительного предложения ставится вопросительный знак.

**Тулы һәм кәм һөйләмдәр**

По наличию второстепенных членов предложения могут быть нераспространёнными и распространёнными:

1) **Урман шаулай. — Лес шумит** (простое двусоставное нераспространённое предложение).

2) Ҡапыл көслө **ел сыҡты. —** Вдруг **поднялся** сильный **ветер** (простое двусоставное распространённое предложение).

Распространёнными и нераспространёнными могут быть и односоставные предложения:

**Алданма** ҡыҙыл алмаға. — **Не обманывайся** красным яблоком (простое односоставное распространённое предложение). **Төн. — Ночь** (простое односоставное нераспространённое предложение).

**Ҡылымдарҙың төҙөлөшө**

Глаголы в башкирском языке бывают **простые (ябай)** и **составные (ҡушма).**

Простые глаголы состоят из одного слова (корня или основы): **уҡырға** — читать; **һөйләргә** — рассказывать.

Составные глаголы состоят из двух и более слов:

1) глагол + глагол: **һатып алырға** — купить;
**барып килергә** — сходить, съездить;
**үҫеп ултырырға** — расти;

2) не глагол + вспомогательный глагол:
**хәл итергә** — решать;
**хәбәр итергә** — сообщить.

**Ябай һөйләм һәм уның төрҙәре**

По строению грамматической основы простые предложения делятся на **двусоставные (ике составлы)** и **односоставные (бер составлы).**

Предложения, грамматическая основа которых состоит из подлежащего и сказуемого, называются **двусоставными (ике составлы):**

**Алма** ағасынан алыҫ **төшмәй.** — Яблоко от яблони недалеко падает.

Предложения, грамматическая основа которых состоит из одного главного члена, называются **односоставными (бер составлы):**

Себеште көҙ **һанайҙар.** — Цыплят по осени считают.

**Һөйләмдең баш киҫәктәре**

**Подлежащее** и **сказуемое** — главные члены предложения. **Подлежащее (эйә)** обозначает предмет речи и отвечает на вопросы именительного падежа: **кем? кемдәр?** — кто? **нимә? нимәләр?** — что? Например:

**Балалар** уҡый. — **Дети** учатся.

**Сказуемое (хәбәр)** обозначает действие предмета и отвечает на вопросы **нимә эшләй?** — что делает? **нимә эшләне?** — что сделал? и т. д.

**Подлежащее (эйә)** в башкирском языке может быть выражено существительным, местоимением, числительным, прилагательным, именем действия, причастием, словосочетанием и сложным глаголом:

**Ҡояш** яҡтырта. — **Солнце** светит. **Ул** сыҡты. — **Он** вышел.

**Икеһе лә** һуңланы. — **Оба** опоздали.

**Ике икең** — дүрт. — **Дважды два** — четыре.

Кире **ҡайтыу** юҡ. — Обратной дороги нет.

**Сказуемое** (хәбәр), как и подлежащее, может быть выражено различными частями речи, словосочетаниями и сложными глаголами:

Биш бишең — **егерме биш.** — Пятью пять — **двадцать пять.**

Алма **һатып алдым.** — **Купил(-а)** яблоки.

**Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ**

Между подлежащим и сказуемым ставится тире:

1) если подлежащее и сказуемое выражены существительными, прилагательными, числительными, причастиями в именительном падеже:

**Ата улы — Ватан улы.** — Сын отца — сын Родины. **Илеңде һаҡлау — ата-әсәңде һаҡлау.** — Беречь Родину — беречь отца и мать. **Ике икең — дүрт.** — Дважды два — четыре;

2) если подлежащее выражено местоимением, а сказуемое выражено существительным или другими частями речи, выступающими вместо него, и есть пауза после подлежащего:

**Ул — ғалим, мин — шофёр.** — Он — учёный, я — шофёр;

3) если в составе сказуемого есть слово **это (ул)**, то тире ставится перед ним:

**Китап — ул белем шишмәһе.** — Книга — это источник знаний.

**Эйә менән хәбәрҙең ярашыуы**

В башкирском языке сказуемое согласуется с подлежащим в 1-м и 2-м лице и числе:

**Мин яҙам.** — Я пишу.

**Беҙ яҙабыҙ.** — Мы пишем.

Если подлежащее выражено местоимением 3-го лица или существительным во множественном числе, то сказуемое в башкирском языке обычно употребляется в единственном числе:

**Ул ҡайта.** — Он возвращается.

**Улар ҡайта.** — Они возвращаются.

**Аныҡлаусы**

**Определение (аныҡлаусы)** — второстепенный член предложения, обозначает признак предмета и отвечает на вопросы **какой? который? чей? — ниндәй? ҡайһы? ҡайҙағы? нисәнсе? кемдең? нимәнең?** Китапханала яңы (ниндәй?) китаптар күргәҙмәһе үтте. — В библиотеке прошла выставка **новых** (каких?) книг.

**Тултырыусы**

**Дополнение (тултырыусы)** — второстепенный член предложения со значением предмета, на который направлено действие или распространяется признак. Дополнение отвечает на вопросы косвенных падежей: **кого? что?** — кемде? нимәне? **кого? чего?** — кемдән? нимәнән? кемдә? нимәлә? **кем? чем?** — кем менән? нимә менән? **кому? чему?** — кемгә? нимәгә?

Беләге бар **берҙе** йығыр, белеме бар **меңде** еңер. — Силой победишь **одного**, а умом — **тысячи. Тау тау менән** осрашмаҫ, **кеше кеше менән** осрашыр. — Гора **с горой** не сходится, а человек **с человеком** сойдётся.

**Хәл**

**Обстоятельство (хәл)** — второстепенный член предложения состава сказуемого, характеризует с разных сторон действие, признак, выраженные сказуемым. Отвечает на вопросы **как?** — нисек? **когда?** — ҡасан? **отчего?** — нилектән? **почему?** — ни өсөн?

**Бөгөн** (ҡасан?) киноға барабыҙ. — **Сегодня** (когда?) идём в кино.

**Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ!**

Ябай һөйләмде синтаксик тикшереү өлгөһө
(синтаксический разбор простого предложения)

———— эйә (подлежащее)
════ хәбәр (сказуемое)
- - - - - тултырыусы (дополнение)
~~~~~ аныҡлаусы (определение)
—·—·—· хәл (обстоятельство)

Беренсе ҡар октябрь урталарында яуҙы. — Первый снег выпал в середине октября.
~~~~~

## Уҡыу өсөн текстар

### Әхмәт Лотфуллин

Ир уҙаманы, милләтебеҙ аҡһаҡалы Әхмәт Лотфуллин Әбйәлил районы Ишҡол ауылында тыуып үҫкән. Мәңге йәшел ҡарағайҙар, зифа бөҙрә ҡайындар менән ҡапланған тауҙар араһында ятҡан был ауыл киндер туҡыусылары, балаҫ һуғыусылары, оҫта ҡуллы сигеүсе ҡыҙҙары, ағас эшенә оҫта булған ир-аты менән тирә-яҡҡа билдәле була.

Ошо оҫталар араһында үҫкән рәссам ғүмер буйы үҙ халҡының, туған тәбиғәтенең гүзәл һыҙаттарын күңел түрендә һаҡлап килә.

Әхмәт Лотфуллиндың ябай көнкүреш темаларына арналған әҫәрҙәре: «Өс ҡатын», «Алтын көҙ», «Сәй эсеү», «Үтәгәндәге туй» картиналарындағы персонаждарҙың пластикаһы, милли типажы, эмоциональ колориты авторҙың башҡорт ғөрөф-ғәҙәтен, йолаларын тәрәндән белеүен күрһәтә. Был картиналарҙағы образдарҙың һәр береһенә тәрәнлек, эске рухи азатлыҡ һәм гармония хас. Автор, әйтерһең: «Бына беҙ ниндәй күркәм, рухи яҡтан бай халыҡ, ошо рухи байлыҡтарыбыҙҙы һаҡлап алып ҡалып, түкмәй-сәсмәй киләсәк быуындарға тапшырайыҡ», — тип әйтергә теләй һәм үҙ маҡсатына ирешә лә!

Уның картиналарының тағы ла шундай үҙенсәлеге бар: уларҙан башҡорт көйҙәре, ҡурай һәм ҡумыҙ моңдары ишетелеп торған кеүек. *(Л. Поповадан)*

**туҡыусы** — ткачиха, ткач
**түкмәй-сәсмәй** — весь, целиком
**күңел түре** — глубина души

### Дуҫ булайыҡ

Бына аш та өлгөрҙө. Ибраһим бабай менән Хәсән бабай әбейҙәре менән урындыҡтың иң түрендәге мендәр өҫтөнә менеп ултырҙы. Юлдаштың атаһы Хәмит, Кинйәбай ағайҙар ситтәнерәк урынлашты. Шунан һуң Хәмит ағайҙың һеңлеһе, ҡомғанға йылы һыу ҡойоп, бик һәйбәт итеп ағартылған еҙ тасҡа ҡунаҡтарҙың ҡулдарын йыуҙырып сыҡты. Бөгөн ҡәҙерле ҡунаҡ килеү хөрмәтенә ашау тәртибен дә ҡыҙыҡ өсөн боронғоса һаҡларға тырыштылар. Ҡул йыуҙырып бөткәндән һуң, ҡыҙыл кизеләр менән матурлап, етен ептән һуғылған ҙур яңы ашъяулыҡ уртаға йәйелде, һәр кем алдына ағас ҡалаҡтар ҡуйылды. Бынан һуң Зөләйха әбей табынға бер табаҡ һалма килтереп ултыртты. Кинйәбай ағайҙың алдына шундай уҡ ҙур ағас табаҡ менән тотош бер һарыҡ итен килтереп ҡуйҙылар. Быны



күреп, Юлдаш саҡ ҡысҡырып көлмәне, сөнки уның итте бер юлы былай күп бешергәнде күргәне юҡ ине. Ул атаһының да, быны күреп, йылмая биреп ултырыуын күрҙе. Юлдаш ҡаранған, уйланған арала, Зөләйха әбей, Гөлйөҙөм, Фатима еңгәләр ҙә, Хәмит ағайҙың теге ҡустыһы ла инеп табынға ултырҙы. Шунан Кинйәбай ағай, кесәһенән үткер бәке сығарып, усына янып алды ла, баяғы тауҙай ҡалҡып ятҡан итте турап, табаҡтағы һалма өҫтөнә һала башланы.

— Йә, рәхим итегеҙ, ҡунаҡтар, етешегеҙ әле, — тине Зөләйха әбей. Үҙе ҡалаҡ тултырып ит менән һалма алды ла һоғоноп уҡ ебәрҙе. Башҡалар ҙа ҡалаҡтарына тотондолар. Юлдаш башта Кинйәбай ағайҙың нисек ит турағанын, нисек тәмле, майлы ғына киҫәктәрен үҙе лә ҡабып-ҡабып ебәргәнен ҡыҙыҡһынып ҡарап ултырҙы. Үҙемә айырым тәрилкәгә һалып бирерҙәрме икән, тип көттө, ләкин өләсәһе уны башына ла килтермәне.

— Йә, улым, ниңә тик кенә ултыраһың, аша, — тип ҡыҫтаны ла ҡыҫтаны. Етмәһә, иттең еҫе лә бигерәк тәмле булып танауҙы ҡытыҡлай. Аптырағас, Юлдаш та башҡалар кеүек дөйөм табаҡтан ашарға тотоноп китте. Һөҙлөккә генә бешкән йоҡа һалма ла, һимеҙ һарыҡ ите лә ғәжәп тәмле ине. Ул үҙе алып ашау өҫтөнә Кинйәбай ағаһы һоғондорған иң тәмле, иң майлы киҫәктәрҙе лә бер ҙә кире ҡаҡмай ашап ҡына ултырҙы. Башҡалар ҙа ашыҡмай, һоғаланмай, яйлап, тәмләп кенә, һөйләшә-һөйләшә ашанылар ҙа ашанылар. Ашай торғас, ашъяулыкта һөйәк-һаяктар ғына тороп ҡалды. Юлдаш, быны күреп, үҙенең дә, башҡаларҙың да шул тиклем күп ит ашай алыуҙарына аптыраны. Ит менән һалма ашағандан һуң, өләсәһе менән Гөлйөҙөм еңгә йүгереп йөрөп туҫтаҡ менән һурпа ташыны. Иҙелгән әсе ҡорот менән ҡатыштырып, ҡара борос һалып ебәргән был һимеҙ ит һурпаһы Юлдашҡа тағы ла тәмлерәк тойолдо. Өйҙә ул бер ҡасан да быңдай һурпа эскәне юҡ ине әле.

Аштан һуң ҡунаҡтарҙың ҡулдарын тағы йылы һыу менән йыуҙырҙылар. Унан баллап-майлап бик оҙаҡ итеп сәй эстеләр. Юлдаш ҡына сәй эсә алманы. Ул ит, һалма, һурпа ашап сиктән тыш туйғайны. Хәҙер ул күҙҙе ҡыҙҙырып ятҡан бауырһаҡтарҙың бер генә бөртөгөн дә алып ҡаба алмай ине. Шулай ҙа Юлдаш, табындан тороп, тышҡа сығып китмәне. Ҡарттарҙың май, бал ҡабып, бәләкәс-бәләкәс кенә йотоп, яйлап ҡына сәй эсеүҙәрен ҡарап, бигерәк тә уларҙың һүҙҙәрен тыңлап тик ултырҙы. Ә ҡарттарҙың һүҙҙәре берененән-береһе ҡыҙыҡлыраҡ ине. Башта улар ҡаланан килгән ауылдаштарына үҙҙәренең бөгөнгө эштәре, уңыштары, ҡайһы бер етешһеҙлектәре тураһында һөйләнеләр. Һүҙҙәр үткәндәргә, ҡарттарҙың йәш, көслө, дәртле саҡтарына күсеп киткәс, Юлдаш тағы ла ҡыҙыҡһыныбыраҡ тыңлай башланы. *(З. Биишеванан)*

**мендәр өҫтөнә менеп ултырҙы** — сел на подушку
**ҡәҙерле ҡунаҡ килеү хөрмәтенә** — в честь приезда уважаемого гостя
**ҡыҙыҡ өсөн** — для интереса
**Юлдаш ҡаранған, уйланған арала** — пока Юлдаш смотрел по сторонам, размышлял
**тәмле, майлы ғына киҫәктәрен** — самые вкусные, жирные куски
**ҡыҙыҡһынып ҡарап ултырҙы** — смотрел с интересом

## Тыуған төйәк

...Тәңре үҙеме, әллә яҙмыш ихтыярымы беҙгә үҙенең гүзәл илаһи төбәгенән мул итеп өлөш сығарған. Был бәхет түгелме ни? Иркен яландарыбыҙҙың, күркәм тауҙарыбыҙҙың, ағын һыуҙарыбыҙҙың, ҡалын урмандарыбыҙҙың игелеген күреп, ҡәҙерен белеп йәшәргә лә йәшәргә беҙгә. Меңәр йыл эсендә тауҙар ишелгән, мәмләкәттәр ҡыйралған, ҡалалар һүнгән, ҡәбиләләр тарих юлдарында аҙашып ҡалған. Ошо араларҙы үтеп, беҙҙең халҡыбыҙ үҙен генә түгел, рухын, сәсән телен, моңло йырын, милли әҙәбен, милли иманын һаҡлап ҡалған. Был бәхет түгелме ни?

Замандарыбыҙ болалы мәлдә, дүрт ярым быуат әүәл, тарихи зарурлыҡ беҙҙең боронғо бабаларыбыҙҙы Рәсәй менән ҡауыштырған. Тамырҙарҙы тамырҙарға бәйләгән. Улар, ышаныслы ҡанат аҫтына һыйынып, милләт бөтөнлөгөн, уның именлеген ҡурсалап ҡалған. Был ерҙә йөҙәр йыл буйынса милләт-ара татыулыҡ хөкөм һөрә... Был бәхет түгелме ни?

Шундай халыҡтың оҙон юлдарҙа юғалмайса, батырҙарса йәшәй алыуының сәбәбен уйлайым да, ошондай һөҙөмтәгә киләм. Үҙенең тән һәм рух сәләмәтлеген һаҡлаған халыҡ үлемһеҙ булырға яратылған. *(М. Кәрим)*

**Тәңре** — Бог
**аҙашыу** — плутать

**иман** — вера
**ихтыяр** — воля
**ишелгән** — обрушился
**мәмләкәт** — страна, государство
**бола** — беспорядок
**именлек** — благополучие
**хөкөм һөрә** — господствует
**үлемһеҙ булырға яратылған** — создан быть бессмертным

## Әтәс менән төрөк солтаны

*(Мадъяр халыҡ әкиәте)*

Донъяла бер ярлы ҡатын йәшәгән, ти. Уның берҙән-бер байлығы — әтәсе булған. Бер ваҡыт, сүп-сар араһында тибенеп йөрөгәндә, ярты алмас крейцер табып алған, ти.

Тап ошо мәл яҡында ғына төрөк солтаны үтеп барған булған. Ул әтәстең ярты алмас крейцерын күреп ҡалған да:

— Ярты алмас крейцерыңды миңә бир, — тигән.

Әтәс ҡабарынған, ҡағынған да:

— Юҡ, бирмәйем! Ул минең хужама ла ярап ҡалыр, — тип яуап биргән.

Ләкин төрөк солтаны әтәстән ярты алмас крейцерҙы тартып ала ла, уны өйөнә алып ҡайтып, хазиналары һаҡланған ергә йәшереп ҡуя.

Әтәс, асыуланып, ситәнгә осоп менгән дә:

— Кик-ри-күк! Төрөк солтаны, минең ярты алмас крейцерымды кире бир! — тип һөрән һалған.

Әтәстең тауышын ишетмәҫ өсөн, солтан үҙенең һарайына инеп бикләнгән дә хеҙмәтселәренә бөтә ишектәрҙе лә, тәҙрәләрҙе лә яҡшылап ябып ҡуйырға ҡушҡан.

Бынан һуң әтәс тәҙрәгә осоп менгән, суҡышы менән тәҙрәне шаҡылдата, ҡанаттарын ҡаға һәм ҡысҡыра башлаған:

— Кик-ри-күк! Төрөк солтаны, минең ярты алмас крейцерымды кире бир!

Төрөк солтаны асыуланған һәм хеҙмәтсеһенә:

— Әтәсте тотоп ҡойоға ташла! — тип бойорған.

Хеҙмәтсе әтәсте ҡойоға ташлаған. Ләкин әтәс унда ла тыныс ҡалмаған:

— Һыу, һыу, минең эсемә тул, — тигән. Ҡоҙоҡтоң һыуы әтәстең эсенә инеп бөткән.

Шунан әтәс яңынан төрөк солтанының тәҙрәһенә осоп менгән дә:

— Кик-ри-күк! Төрөк солтаны, минең ярты алмас крейцерымды кире бир! — тип ҡолаҡ ярырлыҡ итеп ҡысҡырған.

Солтан, элеккенән дә яман асыуланып, хеҙмәтсеһенә:

— Бар, әтәсте тотоп, янып торған мейескә ырғыт! — тигән.

Тик әтәс үҙ һүҙен иткән:

— Һыу, һыу! Минән ҡойол, утты һүндер!

Күҙ асып йомғансы һыу мейестәге утты һүндергән. Әтәс, бер ни булмағандай, тағы ла тәҙрәгә осоп ҡунған:

— Кик-ри-күк! Төрөк солтаны, минең ярты алмас крейцерымды кире бир!

Был юлы солтан тамам ярһыған:

— Хеҙмәтсе, бар, әтәсте тот та умарта эсенә ташла, бал ҡорттары кәрәген бирһен!

Хеҙмәтсе әтәсте тотҡан да бал ҡорттары янына ташлаған.

Ә әтәс:

— Бал ҡорттары, бал ҡорттары! Минең ҡауырһындарым, ҡанаттарым аҫтына йәшеренегеҙ!

Бал ҡорттары әтәстең ҡауырһындары, ҡанаттары аҫтына инеп тулғандар.

Әтәс тағы ла төрөк солтанының тәҙрәһенә осоп менгән:

— Кик-ри-күк! Төрөк солтаны, минең ярты алмас крейцерымды кире бир!

Солтан артабан әтәсте ни эшләтергә лә белмәгән.

Хеҙмәтсе әтәсте тотоп, солтан эргәһенә алып килгән. Шул саҡ әтәс:

— Ҡауырһындар, ҡанатҡайҙар, бал ҡорттарын сығарығыҙ, улар төрөк солтанының кәрәген бирһендәр!

Бал ҡорттары йәшеренгән ерҙәренән осоп сыҡҡандар ҙа солтанға ташланғандар. Солтан ултырған урынынан ырғып торған, бейей һәм үрле-ҡырлы һикерә башлаған:

— Уй-уй, ҡәһәр һуҡҡыр әтәс! Уны хазиналарым янына алып барығыҙ, шунан үҙенең ярты алмас крейцерын эҙләп алһын!

Әтәсте хазиналар һаҡлана торған ергә алып барғандар.

Унда ул үҙ йырын йырлаған:

— Ҡорһағым, ҡорһағым, солтандың кеше талап йыйған бөтә аҡсаларын үҙ эсеңә ал!

Әтәстең эсенә төрөк солтанының аҡсалар тултырған өс ялғашы инеп киткән, ти.

Әтәс уларҙы өйөнә алып ҡайтып, хужаһына тапшырған. Теге ҡатын уларҙы бөтә ярлыларға таратып биргән, ти.

**крейцер (Австро-Венгрияла боронғо ваҡ аҡса)** — крейцер (австро-венгерская старинная мелкая монета)
**берҙән-бер байлығы** — единственное богатство
**ҡәһәр һуҡҡыр әтәс** — проклятый петух
**кәрәген бир/ергә** — дать как следует, наказать
**кеше талап йыйған аҡсалар** — награбленные деньги
**тарат/ырға, таратып бир/ергә** — раздавать
**ялғаш** — корыто

## Өс һорау

*(Татар халыҡ әкиәте)*

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер етем егет.

Берҙән-бер көн бына ошо егет эш эҙләп сығып киткән. Көн китә, ти, был, төн китә, ти. Шулай бара торғас, барып етә, ти, иген сәсеп йөрөүсе бер кеше янына. Егет әйтә:

— Эштәрең шәп булһын, уңыштарың мул булһын, ағай кеше, — ти.

— Шулай булһын, улым, — ти теге кеше. Шунан юлсы егеттән һораша башлай: — Ҡайҙан киләһең? Ҡайҙа бараһың? — ти. Егет:

— Эш эҙләргә сыҡтым, ағай, — ти. Игенсе әйтә:

— Ярай, егет, — ти, — эш кешеһенең — эштә, юл кешеһенең юлда булыуы яҡшы, — ти. — Уйлана-уйлана барһаң, юлың ҡыҫҡараҡ булыр, мин һиңә бер-ике хикмәтле һүҙ әйтәм, яуабын таба алһаң, килеп әйтерһең, — ти.

— Ярай, ағай, — ти егет, — әйтеп ҡара, — ти. Теге кеше, тубалын аҫып, иген сәсергә тотона. Усын тултырып орлоҡ ала ла һибеп ебәрә.

— Бына бер тапҡыр сәстем, быныһы бурысымды түләргә булыр, — ти. Икенсе мәртәбә сәсеп ебәрә лә: — Бына быныһын бурысҡа биреп тороуым, — ти. Шунан өсөнсө тапҡыр сәсеп ебәрә лә: — Быныһы ҡәҙерле ҡунаҡтар өсөн, — ти.

Егет уйға ҡала: «Был нимә булыр икән?» — ти.

— Ярай, ағай, — ти егет, — һин миңә уйларға бер аҙ ғына ваҡыт бир, — ти.

— Уйла, уйла, улым, — ти игенсе, шулай ти ҙә игенен сәсеп китә. Оҙаҡ та үтмәй, әйләнеп килеп етә лә егеттән һорай.

— Йә, хәл нисек, улым, берәй нәмә уйланыңмы? — ти.

— Ағай, — ти юлсы егет, — һинең һуң ата-әсәләрең бармы?

— Бар, — ти теге.

— Йәш сағыңда улар һине тәрбиәләгәндер бит? — ти егет.

— Тәрбиәләнеләр, — ти игенсе.

— Улайһа, беренсе сәскәнең уларҙы тәрбиәләү өсөн булды.

— Дөрөҫ әйтәһең, улым, беренсеһен шулай бурысымды түләр өсөн сәстем.

— Һинең ир балаларың бармы? — ти егет.

— Бар, — ти теге кеше.

— Улай булғас, икенсе тапҡыр сәскәнең, ысындан да, бурысҡа биреп тороу була, хәҙергә һин балаларыңды тәрбиәләйһең, ашатаһың-эсерәһең, улар һиңә бурыслы булып ҡалалар, — ти.

— Быныһын да бик дөрөҫ әйттең, — ти игенсе.

— Һинең ҡыҙҙарың бармы? — тип һорай егет.

— Ьар.

— Улар һинең ҡәҙерле ҡунаҡтарың кеүек кенә бит, үҫеп етеү менән, һинән китәләр бит улар, — ти егет. — Өсөнсө тапҡыр сәскәнең ана шул ҡәҙерле ҡунаҡтарың өсөн булды, — ти.

— Бик дөрөҫ әйтәһең, аҡыллы егет икәнһең, — ти игенсе, егетте маҡтап.

**сәс/ергә** — сеять
**улар һиңә бурыслы булып ҡалалар** — они становятся твоими должниками

## Таң алдынан ҡайтырмын

*(Повестан өҙөк)*

«...Мин — сәскә. Донъяларҙың шундай хозурлығын минән башҡа ерҙә кем белә?! Елбер-елбер елдәр иҫкәндә лә, күбәләктәр йырлап осҡанда ла минән гүзәл бер моң эркелә.

Тау башында үҫкән ҡыңғырау сәскә мин. Яҙ көнө, гөрләүектәр ағып бөтөп, ерҙәр йәшелләнгәс, килдем мин был донъяға. Янымда үҫеп ултырған олпат ҡайындың япраҡтары һарғая башлаһа, минең дә ғүмерем бөтәсәк...

Һәр көн таңда ҡояш менән бергә уянам мин. Ҡояш нурҙары иркә генә итеп ҡосаҡлап алғанда, сың-сың тигән тауыш ишетерһегеҙ. Был мин булырмын. Эйе, сәскәләр ҙә һөйләшә. Улар ҙа донъяға килә һәм үлә. Рәнйетмәгеҙ беҙҙе, кешеләр.

Кисә тау башына ғашиҡтар менде. Шундай һылыу ине улар, шундай бәхетлеләр ине, һоҡланыуымдан үҙем белгән иң гүзәл көйҙө уйнаным.

— Теләйһеңме, — тине егет һылыуға, — мин һиңә донъялағы иң гүзәл, иң моңло сәскәне бүләк итәм? — Һәм ул миңә үрелде. Үҙемдең донъялағы иң гүзәл сәскә булыуымды ишетеү рәхәт ине. Тик минең үлгем килмәй ине шул. Һеҙҙең үлем сигендә ҡалғанығыҙ бармы, кешеләр? Иң ауыр тойғо ул донъяла. Үҙ ғүмеремдә беренсе тапҡыр кесерткән йәиһә әрем булмағаныма үкендем. Минең бит бер кемгә лә яуызлыҡ ҡылғаным юҡ. Ниңә һуң һәр бер үткән кеше минең ғүмеремде өҙгөһө килә?!

— Өҙмә, — тине ҡыҙ ҡапыл. — Үҫһен, бигерәк матур бит. Таждарыма ике тамсы бәреп сыҡты. Ысыҡ тип уйлағанһығыҙҙыр. Күҙ йәштәре ине улар. Әллә рәнйеүҙән, әллә шатлыҡтан илай инем мин...» *(Ф. Исхаҡова)*

**ҡыңғырау сәскә** — колокольчик
**кесерткән** — крапива
**яуызлыҡ** — зло

# Башҡортса-русса һүҙлек

## А

**аҙай/ырға** уменьшаться, убавляться
**аҡһа/рға** хромать
**алда** впереди
**арба/рға** заколдовать
**арғымаҡ** аргамак
**артабанғы** дальнейший
**атаҡлы** знаменитый, известный
**ау/ырға** падать
**ашҡаҙан** желудок
**ашҡын/ырға** стремиться, рваться

## Б

**боҙоҡ** испорченный, неисправный
**борҡо/рға** подниматься клубами; распространяться (о запахе), пахнуть
**бормалы** извилистый
**боҫ/орға** прятаться, таиться
**бушат/ырға** разгружать; расслабить

## В

**ваҡла/рға** размельчить; крошить; разменивать
**ваҡытында** вовремя, своевременно
**вариҫ** наследник
**ват/ырға** бить; ломать
**выждан** совесть

## Ғ

**ғазапла/рға** мучить, терзать
**ғорурлан/ырға** гордиться
**ғәҙел** справедливый
**ғәҙеллек** справедливость
**ғәҙәттә** обычно, как правило
**ғәйбәт** сплетня; пересуды
**ғәйепле** виновный, грешный
**ғәйепләнеүсе** обвиняемый
**ғәрсел** обидчивый

## Д

**дағала/рға** подковать
**дерелдә/ргә** дрожать, трястись
**дөйөмләштер/ергә** обобщать
**дөрөҫлөк** истина, правда
**дөрөҫлә/ргә** подтверждать, свидетельствовать
**дымла/рға** увлажнять
**дәрт** страсть, душевный подъём
**дәртлән/ергә** воодушевляться, вдохновляться
**дәүмәл** объём

## Е

**елгәр/ергә** веять
**елдер/ергә** мчаться, нестись
**етештер/ергә** производить
**еткер/ергә** доводить
**етәкселек** руководство

## З

**зая** напрасно, бесполезно, зря
**зөбәржәт** изумруд
**зәғифлән/ергә** калечиться

## И

**ижтимағи** социальный, общественный
**изгелек** добро
**илбаҫар** захватчик
**илселек** посольство
**илт/ергә**, алып бар/ырға доставлять; нести, вести
**иптәштәрсә** по-товарищески
**ирет/ергә** топить, растапливать
**иҫ** чувство; сознание
**иҫер/ергә** пьянеть
**иҫән-һау** цел и невредим
**иҫәп** учёт, счёт; намерение
**иҫәплә/ргә** считать
**иттифаҡ** союз, объединение
**ифрат** очень, чрезвычайно
**ихата** двор; изгородь
**ишара** жест, знак; намёк
**ишетел/ергә** доноситься, слышаться

## Й

**йыйыштыр/ырға** убирать, прибирать
**йыуанай/ырға** толстеть
**йыуанлыҡ** толщина
**йәберлә/ргә** обижать, притеснять

**йәбеш/ергә** прилипать; приставать; хвататься
**йәмәғәт** общество
**йәшелсәселек** овощеводство
**йәшерен** тайный, секретный
**йәшер/ергә** прятать, скрывать
**йәштәш** сверстник, ровесник

## К

**камиллаш/ырға** совершенствоваться
**келәт** амбар
**кер/ергә, ин/ергә** входить, заходить; заезжать
**кешнә/ргә** ржать
**киб/ергә (кип-)** сохнуть, высыхать
**кикерек** гребень, гребешок (у петуха)
**кил/ергә** приходить; приезжать
**килтер/ергә, алып кил/ергә** приносить, приводить; привозить
**киләһе** будущий, предстоящий
**кирелән/ергә** упрямиться
**киреһенсә** наоборот; напротив
**кисер/ергә I** переносить, испытывать
**кисер/ергә II** прощать, извинять
**кис/ергә** идти, шагать (погружаясь во что-л.); переходить вброд
**кискә** вечером, к вечеру
**киҫ/ергә** резать, обрезать; пересекать
**көйөн/өргә** горевать, печалиться
**көлкөлө** смешной, забавный
**көл/өргә** смеяться
**көнсөл** ревнивый; завистливый
**көрәш/ергә** бороться, сражаться
**көслә/ргә** насиловать, принуждать
**көсһөҙлән/ергә** слабеть, ослабевать
**көсәй/ергә** усиливаться
**көсән/ергә** напрягаться, тужиться
**көтөлмәгән** неожиданный, непредвиденный
**көт/өргә** ждать, ожидать; пасти
**күгәр/ергә** синеть, голубеть; посинеть; плесневеть
**күҙлә/ргә** подсматривать
**күңелһеҙ** невесёлый; скучный, неинтересный
**күпләп** оптом
**күпме** сколько, много ли
**кәкрәй/ергә** кривиться, искривляться
**кәм/ергә** убавляться, уменьшаться
**кәмселек** недостаток; дефект
**кәңәшләш/ергә** советоваться

## Ҡ

**ҡабалан/ырға** торопиться, спешить
**ҡабарынҡы** выпуклый
**ҡабар/ырға** пушиться, взбиваться; вздуваться, подниматься
**ҡабул бул/ырға** осуществляться
**ҡана** ну, ну-ка, давай-ка
**ҡана/рға** кровоточить
**ҡанлан/ырға** становиться окровавленным
**ҡорал** оружие; оружейный
**ҡораллан/ырға** вооружаться
**ҡоралһыҙ** безоружный
**ҡоро/рға I** сохнуть, высыхать; исчезать, вымирать
**ҡор/орға II** строить, сооружать; собирать; занавешивать
**ҡортла/рға** червиветь
**ҡуб/ырға (ҡуп-)** отделяться, отставать; срываться
**ҡуйын** пазуха; объятие
**ҡуй/ырға** ставить; помещать; назначать; устанавливать
**ҡуйыр/ырға** густеть, сгущаться; усиливаться, усугубляться
**ҡулдан** вручную; с рук
**ҡултыҡла/рға** брать под руку
**ҡулъяҙма** рукопись; рукописный
**ҡурҡ/ырға** бояться, пугаться
**ҡурсала/рға, һаҡла/рға** оберегать, защищать, ограждать
**ҡутар/ырға, аҡтар/ырға** ворошить; выворачивать, разбирать
**ҡуш** парный; двойной
**ҡушамат** прозвище; кличка
**ҡушымта** приложение; примесь; припев
**ҡуш/ырға I** добавлять; объединять; смешивать
**ҡуш/ырға II** приказать; велеть; поручать
**ҡыҙыҡһын/ырға** интересоваться
**ҡыйбатлан/ырға, ҡыйбатай/ырға** дорожать, удорожаться
**ҡыйла/рға** сорить, мусорить; засорять

**ҡыйрал/ырға, емерел/ергә** рушиться, разрушаться
**ҡыйшай/ырға** кривиться, скашиваться
**ҡыйынлыҡ** трудность, затруднение
**ҡырын** наклонный, покатый; косой; противоположный; неверный
**ҡысҡыр/ырға** кричать
**ҡысы/рға** чесаться, зудеть
**ҡыҫҡар/ырға** укорачиваться; сокращаться
**ҡыҫтыр/ырға** прижимать; совать; скреплять; вставлять
**ҡыҫыл/ырға** сжиматься; щуриться; прищемляться; застревать; соваться
**ҡыҫ/ырға** жать, сжимать; защемлять; теснить; прикрывать; подмигивать

## Л

**лапаҫ** навес, сарай
**лыс һыу** совсем сырой, насквозь мокрый

## М

**маҡтан/ырға** хвастаться
**малсы** скотовод; скотник
**ман/ырға** макать
**матурлан/ырға** хорошеть; наряжаться
**мауыҡ/ырға (мауыҡ-)** увлекаться **мауыҡтыр/ырға** заинтересовывать, увлекать
**махсуслаш/ырға** специализироваться
**маһай/ырға** зазнаваться
**менге** верховой;
**менге ат** верховая лошадь
**менән** с, со, вместе с; и
**меҫкен** жалкий, несчастный; бедняга
**милек** собственность, имущество
**михнәт** страдание, мучение; **михнәт сигеү** страдать, мучиться
**моңай/ырға** печалиться, грустить
**моңло** мелодичный; задушевный; печальный
**моңһоҙ** беспечный; немелодичный
**мөмкинлек, мөмкинселек** возможность
**мөстәҡил, үҙ аллы** самостоятельный; независимый, суверенный
**мөстәҡиллек, үҙаллылыҡ** независимость, суверенность; самостоятельность
**мунса яғыу** топить баню
**мүк** мох; **мүк еләге** клюква
**мыжыҡ** ворчливый; капризный
**мылтыҡ** ружьё
**мыҫҡылла/рға** унижать, оскорблять
**мәҙәк** шутка, забава
**мәҙәни** культурный
**мәҙәниәт** культура; цивилизация
**мәжбүр** обязанный, вынужденный; **мәжбүр бул/ырға** быть вынужденным; **мәжбүр ит/ергә** принуждать, вынуждать
**мәжлес** званый обед (ужин); пир
**мәке** прорубь
**мәкерле** коварный
**мәкерһеҙ** бесхитростный, простодушный
**мәл, ваҡыт** время, пора
**мәңге** вечный; вечно, навеки
**мәңгеләштереү** увековечивать
**мәшәкәтлә/ргә, маҙаһыҙла/рға** стеснять, беспокоить, тревожить

## Н

**нигеҙлән/ергә** обосноваться, поселиться; опираться *на что*; основываться *на чём*
**никах** брак, брачный союз; бракосочетание
**ныҡлап** накрепко, крепко

## О

**оҙонай/ырға** прибавляться, удлиняться
**оҙонса** продолговатый
**ойоҡсан** в одних чулках
**ойо/рға I** скисать, квaситься
**ойо/рға II** дремать; неметь
**ойош/орға** слепляться, комкаться; формироваться
**ойоштороусы** организатор
**оҡшашлыҡ** сходство, аналогия
**олоғай/ырға** повзрослеть, стареть
**олпат** солидный, степенный
**олпатлан/ырға** становиться солидным, степенным
**олтораҡ** стелька

**осhоҙайыу, осhоҙланыу** дешеветь, удешевляться

## Ө

**өйҙәш** квартирант
**өйрәт/ергә** учить, обучать
**өт/өргә** палить, опаливать; жечь, обжигать

## Р

**ризалаш/ырға** соглашаться
**рәсмиләштереп ҡуйыу** узаконить
**рәшәткәләү** огородить решеткой

## С

**сабыр бул/ырға** быть терпеливым
**сабыр ит/ергә** терпеть
**сабыртҡы, сабыртма** сыпь
**сабыш** бега, скачки
**сағылдыр/ырға** отражать; ослеплять; отображать, изображать
**сағ/ырға (саҡ-)** жалить
**сағыштырмаса** относительно; сравнительно
**сайҡа/рға I** кивать; качать, раскачивать
**сайҡа/рға II** полоскать; **кер сайҡарға** полоскать бельё
**сайпыл/ырға** расплёскиваться
**саҡ** еле, едва
**саҡыр/ырға I** звать, вызывать; приглашать
**саҡыр/ырға II** куковать; кукование **кәкүк саҡыра** кукушка кукует
**саҡырыу, өндәмә** воззвание, призыв
**салын/ырға** мелькнуть перед глазами; показаться на миг; **ҡолаҡҡа салыныу** послышаться
**сәнс/ергә** колоть, воткнуть
**сәнәғәт** промышленность
**сәпәкәйлә/ргә** бить, хлопать в ладоши
**сәсел/ергә** рассыпаться; рассеиваться
**сәхрә** простор; красивая живописная местность

## Т

**таб/ырға (тап-)** находить; отыскивать
**табыш** прибыль; находка
**тағат/ырға** разматывать, распускать
**тағы, тағын** ещё, опять, снова
**таҒ/ырға (таҡ-)** прицеплять, привязывать
**таҙар/ырға** очищаться, отмываться; поправляться
**тайҙыр/ырға** вывихнуть, вывернуть
**тай/ырға** поскальзываться
**тамам** окончательно, полностью
**тамамла/рға** оканчивать, заканчивать
**танылған** признанный, известный
**таны/рға I** узнавать; признавать
**таны/рға II** отказываться; отрекаться
**таныҡлыҡ** свидетельство, удостоверение
**таныш** знакомый; известный
**таулы** горный
**таушал/ырға** мяться; дряхлеть
**таяныс** опора
**телемләп** ломтиками
**телhеҙ** немой
**теләгәнсә** вдоволь, вволю
**теләктәш** соратник, сподвижник
**теләнсе/ргә** попрошайничать
**теләр-теләмәҫ** нехотя, неохотно
**телә/ргә** желать, хотеть
**теңкәгә тей/ергә** надоедать, докучать
**терел/ергә** оживать, воскресать (из мёртвых); *перен.* оживляться; **сәскәләр яҙынан терелде** цветы ожили
**теркә/ргә** регистрировать; учитывать
**тертлә/ргә** вздрагивать; пугаться
**терә/ргә** прислонять; приставлять
**тешлә/ргә** кусать; кусаться
**тиб/ергә (тип-)** пинать; пульсировать; биться (о сердце)
**тигеҙләмә** уравнение
**тигеҙлә/ргә** выравнивать, разравнивать
**тиҙлек** скорость, быстрота
**тик I** только, лишь; однако, но, да
**тик II** зря; напрасно; бесполезно
**тимерсыбыҡ** проволока, провод
**торғоҙ/орға** поднимать; будить
**торғонлоҡ** застой; застойный
**торлаҡ** жилище, жильё; жилой
**тормошло ғаиләле** семейный

**тотон/орға** держаться, браться, взяться; расходовать, тратить, использовать
**тот/орға** держать; содержать; хватать
**төҙәй/ергә** выпрямляться, распрямляться
**төҙәт/ергә** исправлять; поправлять, чинить, ремонтировать; налаживать
**төҙәтмә** поправка, исправление
**төкөрөр/гә** плевать; выплёвывать
**төркөмсә** подгруппа
**төрөн/өргә** закутываться
**төр/өргә** завёртывать; засучивать
**төшөнкө** подавленный
**төшөнсә** понятие
**төшөн/өргә** понять
**төш/өргә** спускаться; сходить; высаживаться; **автобустан төшөү** сходить с автобуса
**төшөр/өргә** опускать, спускать
**туған-тыумаса, туған-ырыу** родня, родственники
**туҙанла/рға** пылить
**туҙ/ырға** разлетаться; **саң туҙа** пыль поднимается; изнашиваться; **кейем туҙа** одежда изнашивается; взлохмачиваться; **сәсе туҙған** волосы растрёпаны
**туй** свадьба; **туй үткәреү (яһау)** справлять свадьбу
**туйғансы** досыта, вдоволь
**туй/ырға** наедаться; насыщаться; *перен.* надоедать
**туҡ** сытый; наевшийся
**туҡлан/ырға** питаться
**туҡлыҡлы** сытный, питательный
**туктат/ырға** останавливать, прекращать
**тукта/рға** останавливаться; временно располагаться; перестать
**туктауһыҙ** безостановочно, беспрестанно
**тый/ырға** укрощать, сдерживать; запрещать, воспрещать
**тымыҙ/ырға** успокаивать
**тым/ырға** перестать; утихать, затихать
**тыныслан/ырға** успокаиваться, утихать
**тын/ырға** умолкать, замолкать; затихать; успокаиваться
**тыңла/рға** слушать
**тыу/ырға** рождаться; возникать
**тышҡы** внешний; **тышҡы яҡ** внешняя сторона; верхний; **тышҡы кейем** верхняя одежда; внешний, зарубежный
**тышта** на улице; снаружи
**тәбиғәт көсө** сила природы
**тәбриклә/ргә, тәбрик ит/ергә** поздравлять, приветствовать
**тәгәрә/ргә** катиться; **тәгәрәп китеү** покатиться; **тәгәрәп төшөү** упасть (сверху)
**тәжрибә** опыт, эксперимент
**тәкдим** предложение; **тәкдим яһа/рға** сделать предложение; **тәкдим ит/ергә** предлагать
**тәнҡит** критика
**тәнҡитлә/ргә** критиковать
**тәрбиәләнеүсе** воспитанник
**тәрбиәлә/ргә** воспитывать; **бала тәрбиәләү** воспитывать ребёнка; ухаживать; **ауырыуҙы тәрбиәләү** ухаживать за больным
**тәрәнәй/ергә** углубляться
**тәү** впервые, в первый раз
**тәүбә ит/ергә** покаяться
**тәүәккәллә/ргә** решаться
**тәшкил ит/ергә** составлять, образовать
**тәьҫир ит/ергә** влиять, воздействовать; производить впечатление

## У

**уҙ/ырға** проходить; проехать, проезжать
**уйламағанда** нежданно-негаданно
**уйламағанса** не так, как думали
**уйсанлан/ырға** становиться задумчивым
**уңышлы** урожайный; успешный; плодотворный, удачный

## Ү

**үҙенсәлекле** своеобразный
**үҙенән-үҙе** сам по себе; произвольно
**үк, уҡ** *частица* сразу же

**үкен/ергә** каяться, раскаиваться; сожалеть
**үкер/ергә** реветь; вопить
**үтмәҫлә/ргә** притуплять
**үтә I** насквозь; **үтә күреү** насквозь видеть; через, сквозь
**үтә II** слишком, крайне

## ф

**файҙалан/ырға** использовать, пользоваться, употреблять
**фиҙакәр** самоотверженный
**фирҡә** партия

## х

**хас** свойственный, присущий
**хафалан/ырға** беспокоиться, тревожиться
**хис** чувство; эмоция; **мөхәббәт хисе** чувство любви
**хисап** счёт; расчёт; учёт
**хисапла/рға** считать; исчислять
**хәҙерге заман** настоящее время; **хәҙерге йәштәр** современная молодёжь
**хәтергә ал/ырға** вспоминать; **хәтерҙән сығар/ырға** забыть
**хәтерһеҙ** забывчивый

## һ

**һағай/ырға** настораживаться
**һаҡһыҙлыҡ** неосторожность
**һаңғырау** глухой
**һаңғыраулан/ырға** становиться глухим
**һаранлан/ырға** скупиться, жадничать
**һарғай/ырға** желтеть; *перен.* тосковать, печалиться
**һарыҡсылыҡ** овцеводство
**һаташ/ырға** бредить
**һат/ырға** продавать
**һатып ебәр/ергә** продать
**һатыулаш/ырға** торговаться, сговариваться (о цене); *перен.* спорить
**һеҙҙән генә белдек** от вас только узнали
**һелкен/ергә** трястись, шевелиться
**һелкет/ергә** трясти, шатать
**һелк/ергә** махать, качать
**һиҙен/ергә** чуять, предчувствовать
**һиҙ/ергә** чувствовать, ощущать; чуять; догадываться
**һипкеллән/ергә** покрываться веснушками
**һиптер/ергә** поливать; сыпать
**һирәкләп, һирәк-һаяҡ, һирәк-һаяклап** изредка
**һиҫкән/ергә** вздрогнуть
**һоҡланғыс** восхитительный
**һоҡлан/ырға** восхищаться
**һоҫ/орға** черпать
**һөҙөмтә, һығымта** результат, итог, вывод
**һөжүм** наступление; нашествие; нападение; покушение
**һөйгән** любимый; возлюбленный
**һөйкә/ргә** прислонять
**һөйөн/өргә, ҡыуан/ырға** радоваться
**һөйөнөс** радость
**һөйөнөслө** радостный
**һөй/өргә** любить; ласкать
**һөнәрсе** ремесленник; мастеровой
**һөр/өргә** пахать, распахивать
**һөрт/өргә** вытирать; мазать
**һула/рға** дышать; вдыхать
**һулы/рға** вянуть, засыхать
**һунарсылыҡ** охота, звероловство
**һуңла/рға** опаздывать
**һур/ырға** выдёргивать; выкачивать
**һүген/ергә** ругаться, браниться
**һүн/ергә** угасать, потухать
**һүнмәҫ** неугасающий, неугасимый
**һүр/ергә** распускать, расплетать
**һүт/ергә** распарывать; распускать; разматывать
**һыҒ/ырға (һыҡ-)** выжимать, отжимать
**һыҙатла/рға** прочерчивать; обрисовать, изображать
**һыҙғыртҡыс** свисток
**һыҙғыр/ырға** свистеть
**һыҙла/рға** болеть, ныть; ломить
**һыҙ/ырға** чертить
**һыйпа/рға** гладить
**һыла/рға** мазать, натирать; массировать
**һылтау** отговорка, предлог
**һыуһар** куница
**һыуһыҙлан/ырға** обезвоживаться
**һыуын/ырға** остывать

## Ш

**шалтырат/ырға** греметь
**шартла/рға** трескаться; лопаться; взрываться
**шиң/ергә** вянуть; спадать
**шомлан/ырға** опасаться, тревожиться
**шөбһә, шик** сомнение, подозрение
**шөбһәлән/ергә, шиклән /ергә** сомневаться, подозревать
**шығырла/рға** скрипеть
**шыйығайт/ырға** разбавлять
**шыйыҡ** жидкий
**шылдыр/ырға** сдвигать, задвигать
**шылтыра/рға** бренчать, звякать
**шыл/ырға** сдвигаться, подвигаться; ускользать
**шыптырла/рға** шуршать, шелестеть

## Э

**эйәләш/ергә** привыкать; обживаться; приручаться
**эйәр** седло
**эйәр/ергә** следовать; сопровождать; подражать
**эйәрт/ергә** брать с собой
**элемтә** связь; общение; **элемтә бүлеге** отделение связи
**элемтәсе** связист; связной
**эл/ергә** вешать; застёгивать; запирать
**эләг/ергә (эләк-)** цепляться; попадать; доставаться
**эләктер/ергә** зацеплять; подцеплять; захватывать, ловить
**энәлек** боярышник
**эңер** сумерки
**эргә** бок; место рядом; **эргәлә генә** рядом, под боком
**эреләи/ергә** укрупняться; важничать
**эренлә/ргә** гноиться
**эре/ргә** свёртываться
**эске** внутренний
**эскерле** злопамятный
**эскерһеҙ** искренний, добродушный
**эслек** подкладка
**эслә/ргә** подшивать подкладку
**эстән** про себя; изнутри

## Ә

**әбей** старуха, старушка
**әҙерләүсе** заготовитель
**әҙләп, аҙлап, әҙләп кенә, әҙ-әҙләп, әҙләп-әҙләп** понемногу, помалу
**әҙселек** меньшинство
**әйт/ергә** говорить; сказать; звать; передавать
**әһәмиәтле** важный, существенный

## Ю

**юйыл/ырға** стираться, исчезать
**юн/ырға** тесать топором
**юрға** иноходец
**юхала/рға** лицемерить
**юшҡын** накипь

## Я

**яза** наказание; казнь
**язала/рға** казнить; наказывать
**яҡынай/ырға, яҡынлаш/ырға** приближаться
**яҡындан** близко
**яна/рға** угрожать
**яраш/ырға** мириться
**ярҙамсыл** отзывчивый
**яуапсы** ответчик

# Йөкмәткеһе

Һаумы, мәктәп! . . . 3
Сифат . . . 11
Эйә менән хәбәр . . . 13
Башҡортостан тәбиғәте . . . 15
Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре . . . 22
Ваҡыт һәм урын хәлдәр . . . 25
Ҡылымдың заман категорияһы . . . 28
Атамалар ни һөйләй? . . . 31
Башҡортостан мәҙәниәте . . . 41
Өҫтәлмәлек . . . 42
Тиң киҫәкле һөйләмдәр . . . 44
Халыҡ ижады — халыҡ хазинаһы . . . 53
Беҙ ҡышты ла яратабыҙ . . . 66
Йәнләндереү . . . 67
Өндәш һүҙ . . . 71
Менгән атым — уң ҡанатым . . . 78
Тәбиғәт йәшеллеккә төрөнә . . . 87
Тиң киҫәктәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр . . . 92
Ябай һөйләм төрҙәре . . . 97
Йәмле йәй айҙары . . . 103
Грамматика буйынса белешмә (8-се класс) . . . 112
Уҡыу өсөн текстар . . . 117
Башҡортса-русса һүҙлек . . . 124

Учебное издание

**Габитова** Закия Муллагалеевна
**Усманова** Минсылу Губайтовна

**БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК**

**Учебное пособие для 9 класса
для изучения башкирского языка (как государственного)
в общеобразовательных организациях
с русским языком обучения**

*(на башкирском и русском языках)*

Уҡыу баҫмаһы

**Ғәбитова** Зәкиә Муллағәле ҡыҙы
**Усманова** Миңһылыу Ғөбәйт ҡыҙы

**БАШҠОРТ ТЕЛЕ**

**Уҡытыу рус телендә алып барылған
дөйөм белем биреү ойошмаларының 9-сы класы өсөн
башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ)
өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

Редакция мөдире Г. А. Раянова
Мөхәррире З. М. Ғәлишина
Рәссамы һәм биҙәлеш мөхәррире З. И. Кәримова
Техник мөхәррире Г. Р. Исхаҡова
Корректорҙары А. Х. Хәкимова, Г. В. Ахмалтдинова

Баҫырға ҡул ҡуйылды 28.07.2017. Форматы $60 \times 90^1/_{16}$. Офсет ҡағыҙы.
Киҫек-журнал гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма таб. 8,25+0,25 йәбештермә + 0,25 форз. Шартлы буяу отт. 19,00.
Иҫәп-нәшер таб. 5,39 + 0,22 йәбештермә + 0,40 форз. Тиражы 40 200 дана.
Заказ 1.0148.17.

Әҙер файлдарҙан баҫылды.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.



Салауат Юлаевҡа
һәйкәл




Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы З. Биишеваға бюст



Конгресс-холл




Йәштәр һарайы



Х. Әхмәтов исемендәге
Башҡорт дәүләт
филармонияһы



Башҡорт аттары



КИТАП